ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

2-8 октябрь (карасай)
2021
№40 (978)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 4 октябрҙән 14 октябргә тиклем гәзит-журналдарға ташламалы хаҡ менән арзаныраҡҡа яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә. Ошо мәлдә республиканың һәр ҡала-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, ошо ун көнлөктә "Киске Өфө"гә дәррәү яҙылып, гәзитебеҙҙең киләһе йыл буласаҡ 20 йыллыҡ юбилейына бер бүләк эшләйек!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Тарихи дөрөҫлөктө...**
ил Конституцияһы яҡлай!

3,6

**Ауылды ҡалаға күсереүселәр**

8-9

**Башҡорт үҙенең боронғо илендә йәшәй**

11

**Донъябыҙ ожмах ҡына**

13

**ТВ-программа** 14

*АФАРИН!*

# ТУҒАН МОҢ ЕЛКӘНЕНДӘ



**Башҡортостан юлдаш телеканалында "Тамыр"ҙың үҙенсәлекле проекты - йәш музыканттарҙың "Елкән" беренсе телевизион конкурсы старт алды.**

Башҡорт тарихы йылына арналған, башҡорт композиторҙары әҫәрҙәре генә яңғыраясаҡ проектта ҡатнашыуға 173 ғариза килде, шуларҙан дүрт номинацияға (фортепиано, ҡыллы, тынлы, халыҡ уйын ҡоралдары) 43 йәш музыкант һайлап алынды. Балаларҙың конкурс программаһын республикала һәм унан ситтә билдәле музыканттар, сәнғәт эшмәкәрҙәре Артур Нәзиуллин, Илшат Мөслимов, Шәүрә Сәғитова, Артур Ғайсаров, Виктория Симонова баһаланы.

- Балаларға баһа биреү еңелдән түгел, - ти Милли симфоник оркестрҙың генераль директоры, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Артур Нәзиуллин. - Классик музыканың, туған музыканың киләсәген күреү һәм ишетеү - ҙур ҡыуаныс. Композиторҙарыбыҙ әҫәрҙәрендә Башҡортостан тарихының мөһим ваҡиғалары, милли рух һәм халыҡтың донъяға ҡарашы сағыла. Әйҙә, балалар туған музыка аша тарихты киләсәккә илткән ваҡыт елкәне булһын...

*ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ*

# ҺӘР БАЛА ҺӘЛӘТЛЕ,

## тик уны күрә, үҫтерә беләйек

**Өфөләге "Аврора" һәләттәрҙе үҫтереү үҙәге хаҡында кемдәр ишетеп, кемдәр яҡындан танышып беләлер, моғайын. Уның ишектәре "Һәр баланың уңышы" федераль проекты сиктәрендә асылыуға инде өсөнсө йыл. Ойошманың эшмәкәрлеге һәм алдына алған маҡсаттары, ҡыҫҡа ғына осорҙа өлгәшелгән уңыштары тураһында директоры Айҙар СӘЙҒӘФӘРОВ менән әңгәмәләштек.**

**"Аврора" һәләттәрҙе үҫтереү үҙәге тураһында балаларға һәм уларҙың ата-әсәләренә ниндәй төп мәғлүмәттәрҙе белеү кәрәк?**

- Был учреждение тик һәләттәре булғандар менән генә эшләй, тип уйлау беҙҙең үҙәк менән яҡындан таныш булмаған атай-әсәйҙәрҙең һәм мәктәп уҡыусыларының төп хаталы фекере. Ысынында иһә, беҙ "Сириус" федераль белем биреү үҙәге кеүек үк өс йүнәлештә: "Фән", "Сәнғәт" һәм "Спорт" буйынса барлыҡ балаларҙың да һәләттәрен асыҡлау, уларға оҡшаған өлкәлә үҫешеү мөмкинлеген бирәбеҙ. Һәләтһеҙ бер бала ла юҡ, уға ни бары күңеле ятҡан өлкәне табырға һәм тырышлыҡ һалырға ғына кәрәк. Беҙ мәктәптәге уҡыу программаһында булған бөтә предметтар буйынса эшләйбеҙ, хатта унан киңерәк тә. Мәҫәлән, шул уҡ "Фән" йүнәлешендә "Технология", "Химия", "Математика", "Физика", Биология һәм медицина", "Интернет технологиялары" тигән бүлектәр бар. "Спорт"та "Тхэквондо" һәм "Фехтование", ә "Сәнғәт" йүнәлешендә әлегә "Көршәк яһау сәнғәте", "Рәсем сәнғәте" һәм "Музыка" буйынса профиль сменалары ойошторола. Һуңғыһында милли уйын ҡоралдарында башҡарыу оҫталығы нигеҙҙәренә төшөнөргә лә мөмкин. Тағы ла ҡайһы берәүҙәр "Аврора" тик Өфө ҡалаһы өсөн генә эшләй, тип тә уйлай. Был осраҡта мин, ғәҙәттә, үҙебеҙ менән таныштырып, таблицабыҙҙы күрһәтәм: республиканың бөтә районларынан йыйылған ҡатнашыусылар һаны, әүҙемлеге буйынса баш ҡала тәүге унау араһына ла инмәй.

Йәмғиәтебеҙ баҙар шарттарында йәшәгәнгәме, бигерәк тә һуңғы йылдарҙа ниндәй өлкәлә, ниндәй кимәлдә белемеңде камиллаштырырға теләһәң дә, хаҡ түләү мотлаҡҡа әүерелде. Бер кем дә белемен бушлай таратмай. Әммә беҙ был тенденцияға буйһонмайбыҙ һәм бөтә белем биреү программаларыбыҙҙы бушлай ойошторабыҙ. Һәр уҡытыусы балаларын "Аврора" үҙәгенә ебәрә ала, дәрес үткәреү өсөн үҙенә ниндәйҙер материал кәрәк булғанда ла бер ниндәй хаҡ түләмәй, беҙҙән видео дәрестәр, презентациялар һ.б. алырға, квалификацияһын арттырырға мөмкин. Ә балаға өс йүнәлештең береһендә булһа ла ниндәйҙер кимәлгә өлгәшергә булышлыҡ итәбеҙ. Хатта балалар һәм атай-әсәйҙәр өсөн бушлай психолог ярҙамы ла бар.

**(Дауамы 12-се биттә).**



12+

*✓ Илебеҙ мәктәптәрендә экологик тәрбиә биреүгә нығлап тотоноу кәрәк. Элегерәк экология предмет булараҡ уҡытылһа, әлеге ваҡытта экология темаһына программаға ярашлы бер нисә генә дәрес темаһы ҡаралған.*



УҠЫТЫУСЫ ҺҮҘЕ

# БИОЛОГИЯҒА - БЕР СӘҒӘТ КЕНӘ...




**Быйылғы яҙҙың эҫелеге, ҡоро килеүе әҙәм балаһын бер аҙ уйланырға мәжбүр иттеме икән? Яңы ғына япраҡ ярған ағастар, сәскәгә бөрөләнгән гөлдәр, үләндәр көйҙөргөс эҫе һынауына дусар булды. Яҙғы селләне йәйгеһе алыштырҙы... Кеше тәбиғәт алдында көсһөҙлөгөн тойҙо. Һыу баҫыуҙар, ел-ғәрәсәттәр ҡубыуы, янғындар иҫәпһеҙ ҡорбандар, зыян-ҡазалар алып килде. Тәбиғәт үҙ ҡанундарын боҙоуҙы, уның мөхитенә ҡыҫылыуҙы ғәфү итмәй. Экологик хәлдең йылдан-йыл хәүефлерәк була барыуы ошо хаҡта һөйләй.**

Биосистема - бер бөтөн донъя ул. Уның бер генә өлөшөндәге үҙгәреш тә бөтөн системаны тетрәндерергә һәләтле. Быға са күрелмәгән сир-зәхмәт, тәбиғәт катаклизмдары быға асыҡ дәлил бөгөн. Озон ҡатламының йоҡарыуы, парник эффекты, мәңгелек боҙҙарҙың ирей башлауы кешелек факторына туранан-тура бәйле, ти ғалимдар. Донъялыҡтың бер сере булып торған Кеше үҙенең тәбиғәт балаһы икәнен онотоп, үҙе ултырған ботаҡҡа үҙе балта саба. Байлыҡ һәм аҡса ҡолона әйләнеүе, мәңгелек ҡиммәттәрҙе юҡҡа сығарыуы, рухи түбәнлеккә төшөүе уны бар иткән Тәбиғәттең, Юғары көстөң асыуын ҡабарталыр кеүек тойола миңә.

Өс тиҫтә йыл ауыл мәктәбендә биология фәнен уҡытҡан кеше булараҡ, шуны әйткем килә: илебеҙ мәктәптәрендә экологик тәрбиә һәм белем биреүгә кисекмәҫтән нығлап тотоноу кәрәк. Элегерәк экология предмет булараҡ уҡытылһа, һуңынан биология һәм экология, химия һәм экология, география һәм экология фәндәренә әйләнде, әлеге ваҡытта экология темаһына программаға ярашлы бер нисә генә дәрес темаһы ҡаралған. Шуныһы ла мәғлүм булһын: 5-7-се кластарҙа биология фәненә аҙнаһына бары 1 сәғәт бүленгән. Әлбиттә, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, экологик мәҙәниәт тураһында һөйләшеү һәр темала сағылыш таба, ләкин был хәҙерге заман шарттары өсөн бер тамсы ғына. Һуңғы йылдарҙа, сер түгел, кластан тыш сараларҙың сифаты ла бик түбән. Отчет өсөн матур фотоларға төшөү сараларҙың йөкмәткеһен дә, тәрбиәүи әһәмиәтен дә ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Дәрестәрҙә теге йәки был тәбиғәт күренештәрен яңы алымдар ҡулланып, бөгөнгө экологик шарттарға, йәғни балаларҙы уратып алған мөхит һәм атмосфера күренештәренә бәйләп аңлатыу кәрәк. Экология, биология һәм география дәрестәрен иҫке ҡалыптар буйынса үткәреү мөмкин түгел. Мәҫәлән, балаларға ни өсөн көндәрҙең эҫе тороп та ямғыр яумауын, бер урында - һыу баҫыу, икенсе төбәктәрҙә ҡоролоҡ күренештәрен, йылғалар кибеүен үҙ мөхитебеҙҙән, йәшәгән шарттарҙан сығып аңлатыу кәрәк. Теманы үҙләштергән бала үҙе үк һығымта яһарға тейеш: ошондай йәйҙәр ҡабатланып торһа, эсәр һыу проблемаһы килеп тыумаҫмы? Ҡыҫҡаһы, тормошобоҙ, бөгөнгө торошобоҙ проблемаларын барлап, уларҙы анализлап, киләсәккә күҙаллауҙар яһау юлы менән генә беҙ үҙ еребеҙгә, тәбиғәтебеҙгә һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләй алабыҙ. Үҙ ереһең хужалары, ысын илһөйәрҙәр тәрбиәләүҙе заман талабына әйләндерергә һуңламаһаҡ ине.

**Минира БИКӘНӘСОВА,**
**уҡытыусы.**
**Ауырғазы районы.**

БЫЛ АЙҘА...

# ПОКРАУ ЕТТЕ - ҠАР КҮРЕНДЕ



**Көҙҙөң икенсе айы - ҡарасай аяҡ баҫты еребеҙгә. Самаһыҙ эҫе һәм ҡоро тропик йәйҙән һуң көҙ нисек булыр икән, тигән һорау борсой күптәрҙе. Һарысай торошонан да күрҙек инде: көҙҙөң тәүге айы "уттан алып һыуға" һалды беҙҙе, хәҙер хәүеф ҡатыш ҡыҙыҡһыныу менән октябрҙе көтәбеҙ. Көҙ үҙәге ни фиғеле, ниндәй "шуҡлыҡтары"менән шаҡ ҡатырыр?**

Меҫкен синоптиктар тамам албырғаны быйыл. Элек тә уларҙың фараздарына бер аҙ юмор менән ҡарала ине, хәҙер инде метеокүҙәтеүҙәр юҡты бушҡа ауҙарыу булып күренә, сөнки бөгөнгө климат шарттарында быны улар үҙҙәре лә танырға мәжбүр. Айырыуса оҙайлы күҙаллауҙар мөмкин түгел, был йүнәлештә шөғөлләнеүсе күпме сығанаҡ бар - уларҙың фараздары һәр береһенеке төрлөсә. Юҡ, уларҙы ғәйепләп тә булмай. XXI быуаттың олатайөләсәйҙәребеҙ заман ахыры итеп күргән "офоҡ аръяғына" артылыуыбыҙ, ысынлап та, һәр төрлө мәхшәрҙәре менән шаҡ ҡатыра. Әле ут эсендә дөрләп үткән йәйебеҙҙең антиподы - ҡаты ҡыш менән ҡурҡыталар. Шулай була ҡалһа, ошо ике "ЧП"-ның уртаһындағы көҙҙән ниҙәр көтөргә? Халыҡ һынамышында, ихтимал, быуаттар буйы йәшәп килгән "Покрау етте - ҡыш етте", "Покрауҙа ҡар күренер" (Покрау - Покров көнө, иҫке стиль менән - **1 октябрь**), "Көҙ килеше йәйенән билгеле" тигән әйтемдәрҙәге фараздар аҡланырмы? Һарысайҙың тәртибенә ҡарағанда, һуңлаған ямғырҙары менән кинәндерҙе былай сентябрь ҡорғаҡһыған еребеҙҙе генә түгел, әҙәм күңелдәрен дә, тик бына тап әбейҙәр сыуағы мәлендә ҡапыл һыуытып ебәреүе... Ярай, исмаһам, ер дымға туйыныр, уныһы ла ҙур файҙа. Ә бына октябрь, синоптиктар фекере буйынса, күп йыллыҡ күҙәтеүҙәрҙең уртаса кимәлендә булыр, тип көтөлә. Эйе шул, көн торошо тәртәһенә инеп китһә, ниһайәт, әлеге "күп йыллыҡтарҙың уртасаһы"на беҙ бик шат булыр инек, тик бына глобаль климат ни тиер?

Ҡарасай, ғәҙәттә, үҙенең көҙгө бурыстарын башҡарыуҙы дауам итеп, тәбиғәтте ҡышҡа әҙерләй башлай: ҡоштар йылы яҡтарға китә, ағастар япраҡ ҡоя, ҡыр йәнлектәре ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ йүнләй, баҡсасылар миҙгелде тамамлап, йылы өйҙәренә ҡайта, тәүге ҡыраүҙар төшә, ә, бәлки, ҡар япмаһы менән дә ҡурҡытып алыр - был ҡырпағай ағайҙың эше тип тормаҫ. Тәбиғәт һәр хәлдә хас та тормошобоҙҙағы мәхшәрҙең күсермәһе: берәүҙең ни эшләгәнен икенсеһе белмәҫ, берәүһе эшенә икенсеһе тығылыр. Их, ҡайҙа ла баһа, бөйөк Туҡай маҡтаған "...бик һалҡын да түгел, бик эҫе лә - урта һауа; ел дә ваҡытында иҫеп, ямғыр ҙа ваҡытында яуа" торған замандарыбыҙ... Күшеккән күңелдәрҙе алтын көҙ балҡыуы ла, әбейҙәр сыуағы ла йылытырға ашыҡмай, бәлки, һарысайҙың был бурысы ҡарасайға йөкмәтелгәндер? Нисек кенә булмаһын, иҫәндәргә йәшәргә кәрәк, коронавирус ҡырғынына үс итеп һәм йәнә лә фәҡирлектә уҙыусы тереклегебеҙгә ҡарамаҫтан. Бирһен Хоҙай, әҙәм балаһының барсаһына ла ғүмер көҙҙәренең алтын миҙгелен ҡаршыларға, ғаиләһе усағы, яҡындары йылыһы сыуағында ҡалған ғүмер йылдарын камил аҡылында, үҙ аяҡтарында атлап үтергә насип булһын.

Ҡарасайҙың бисмиллаһы - Өлкән йәштәгеләр көнөндә **(1)** башҡа ошондай уйҙар килеүе бик тә тәбиғи бөгөн. **Фәҡирлеккә ҡаршы протест көнө лә (17) был айҙы юҡҡа һайламағандыр, сөнки илебеҙҙә өлкән йәштәгеләрҙең күпселеге фәҡирлек менән йәнәш йәшәй. Ябай халыҡ хәле ыңғайға ыңғайламағас, календарь битендәге был көндөң атамаһын булһа ла үҙгәртеп торалар, ахрыһы. Тәүҙәрәк "Халыҡ-ара фәҡирлекте бөтөрөү көнө" тип йөрөтөлгән дата хәҙер икенсерәк яңғырай: "Фәҡирлеккә халыҡ-ара протест көнө". Тимәк, фәҡирлекте бөтөрөү, асылда, мөмкин булмаған эш тип аңларғамы? Бары тик уға ҡарата ризаһыҙлыҡ белдерергә генә ҡала, ә был бары-бер тамаҡты туйҙырмай... Тик кем ризаһыҙлыҡ белдерергә йөрьәт итер һуң? Ысын булһа ... Рәсәйҙә фәҡирлек кәмей төшкән, тиҙәр, ишеттегеҙме әле? Ләкин бына ҡыуанырға ғына ерлеге юҡ был "имеш"тең. Ә сере бының фәҡирлек кимәлен иҫәпләү ысулын үҙгәртеүҙән килеп сыҡҡан, тип яҙа эксперттар.** Дөрөҫөрәге, йәшәү минимумын иҫәпләү методикаһы үҙгәреү сәбәпле, фәҡирлек буйынса яңы мәғлүмәттең иҫкеһе менән тап килмәүе асыҡланған. Росстаттан "Независимая газета"ға хәбәр итеүҙәренсә, был ике мәғлүмәтте сағыштырып, фекер алышҡандан һуң, "һәйбәтерәк вариант һайлап алынасаҡ". Әгәр фәҡирлек кимәлен РФ Хеҙмәт министрлығы тәҡдим иткән яңыса иҫәпләү ысулына таянған хәлдә, былтырғы йыл Рәсәйҙә фәҡирлек кимәле 20 процентҡа артҡан килеп сыға. Социаль блок өсөн яуаплы хөкүмәт ағзалары ҡыйын хәлдә ҡалды: Рәсәй Президентының 2024 йылға тиклем илдә фәҡирлек кимәлен ике тапҡырға кәметергә тигән указы буйынса хәҙер нимә тип отчет бирергә? Дөрөҫ, Президенттың пандемия шарттарына бәйле 2030 йылға тиклем фәҡирлек кимәлен ике тапҡырға кәметеү (2017 йылға ҡарағанда) бурысы тураһында яңыртылған указы сыҡты. Росстат мәғлүмәттәре буйынса, 2017 йылда килеме йәшәү минимумынан түбән булған рәсәйҙәр өлөшө 13,2

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ 1 октябргә Башҡортостанда 420 кеше COVID-19 йоҡторған. Республикала сирлеләрҙең дөйөм һаны 66 879-ға еткән. Шул уҡ ваҡытта бер тәүлектә республикала 21 пациент вафат булған, дөйөм һан 1615-кә тиклем артҡан. Бөтәһе 58 334 кеше коронавирустан һауыҡҡан, шул иҫәптән 512-һе - һуңғы тәүлектә.Вакцинаның беренсе компонентын - 1 282 792, икенсе компонентын 1 175 839 кеше ҡаҙатҡан.

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай төбәктә туризмды үҫтереүгә йүнәлтелгән бер нисә закон ҡабул итте. Башҡортостан Конституцияһы положениеһына ярашлы, экологик һәм мәҙәни-тарихи әһәмиәткә эйә үҙенсәлекле тәбиғәт объекттары - республиканың махсус яҡлауында. Улар араһында "Шүлгәнташ" дәүләт тәбиғәт ҡурсаулығы, "Асылыкүл ", "Ҡандракүл ", "Мораҙым тарлауығы", "Ирәмәл" тәбиғәт парктары, Ҡуштау, Торатау, Йөрәктау шихандары бар.

✓Һайлау йомғаҡтары буйынса Дәүләт Йыйылышында өс депутат үҙ урындарын бушата. Депутаттар Эльвира Айытҡолова һәм Римма Үтәшева Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Думаһына эшкә күсә, депутат Андрей Егоров Өфө ҡала Советына һайланыуына бәйле вәкәләттәрен һала. Һайлау кампанияһы йомғаҡтары буйынса Дәүләт Йыйылышын өс депутат: Тамара Танһыҡҡужина, Милана Скоробогатова һәм Заһир Хәкимов тулыландыра.

✓Башҡортостанда эпидемиологик хәлдең ҡатмарлы булыуы сәбәпле күсмә вакцинация пункттарының һаны кәметелә. Медицина хеҙмәткәрҙәрен амбулатор звеноға күсерәләр. Шулай итеп, 11 күсмә пункттың өсәүһе генә эшләй: "Торатау" конгресс-холында (9:00-19:00), "Башҡортостан" лайфстайл үҙәгендә (13:00-19:00) һәм "Мир" сауҙа үҙәгендә (13:00-19:00).

✓Коронавирустан прививкаға яҙылырға мөмкин: Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша; Колл-үҙәк телефоны аша - 122; поликлиника регистратураһына шәхсән килеп йәки телефон аша. Вакцинацияға һәм коронавирус инфекцияһына бәйле һорауҙар буйынса ҡыҙыу элемтә телефондары: Башҡортостан Республикаһының Ковидҡа ҡаршы ситуация үҙәге - 8(347) 218-19-19; коронавирус инфекцияһына бәйле һорауҙар буйынса - 8 (347) 286-58-27; 8 (347) 279-91-20 (тәүлек әйләнәһенә); 122 (шылтыратыу бушлай).

*✓ Дөйөм алғанда, экскурсоводтарҙың компетентлығы республика өсөн генә түгел, ил өсөн дә көнүҙәк. Тап шуға күрә күптән түгел экскурсоводтарҙы мотлаҡ дәүләт аттестациялауы тураһында федераль закон ҡабул ителде.*



процент тәшкил итеп, аныҡ һандарҙа был 19,4 млн кеше тәшкил итә, тимәк, 2030 йылға тиклем илдәге фәҡирҙәр һанын 9-10 млн кешегә кәметеү хаҡында һүҙ бара. Шуныһы таң ҡалдыра: фәҡирлек кимәлен билдәләүгә уртаҡ ҡараш булмағас, Рәсәйҙә был кимәлде, шулай уҡ килеме йәшәү минимумынан түбән булған кешеләр һанын иҫәпләү ысулына тикшереүҙәр үткәреүгә 42 млн һумлыҡ контракт төҙөлгән. Ҡыҙыҡ килеп сыға түгелме, хас та Крылов мәҫәлендәгесә: музыканттар нисек кенә ултырып ҡараһа ла көй килеп сыҡмай ҙа ҡуя...

Ҡарасайҙың башҡа мөһим көндәре лә байтаҡ. Шуларҙың бер нисәһе белем биреү, мәғариф темаһына бағышлана. **Әлбиттә, иң беренсе урында - Уҡытыусылар көнө (5). Был йәһәттән социаль селтәрҙәрҙә бөгөн заман уҡытыусыһының ниндәй булырға тейешлеге хаҡында фекер алышыуҙар, бәхәстәр бара. Иң беренсе шарт, ул, әлбиттә, төплө белем, ти рәсми сығанаҡтар. Быныһы былай ҙа аңлашыла. Һәр яҡлап хәбәрҙарлыҡ, уҡыусы иғтибарын йәлеп итерлек, уны ҡыҙыҡһындырырлыҡ миҫалдар, көтөлмәгән парадокстарға, параллелизмдарға ҡоролған фекерләү ҡеүәһе, бай телмәр; уҡыусыларҙы айырып ҡарамай, һәр береһенә тигеҙ, ихтирамлы мөнәсәбәт, әҙәплелек сифаттары бик кәрәк бөгөн уҡытыусыға. Замана балалары ҡеүәтле мәғлүмәти мөхиттә формалаша, уҡытыусыға ла электрон технология саралары менән оҫта эш итә белеү мотлаҡ.** Һөнәри-техник белем биреү көнө **(2)** лә мәғариф өлкәһендәге етди мәсьәләләрҙең береһе. Был йәһәттән яңыраҡ ҡына Өфөлә булып үткән "Йәш һөнәрмәндәр" (WorldSkills Russia) милли чемпионаты бик яҡшы тәжрибә булды һәм был өлкәнең бөгөн тотош ил буйынса көнүҙәклеген, шул уҡ ваҡытта йәш быуынға һөнәри белем биреүҙә республикабыҙҙағы ҡаҙаныштар һәм алдынғы тәжрибәне күрһәтте. Тимәк, ауыл-ҡала үҫмерҙәренә һөнәр оҫталығы серҙәренә юл асыҡ. Киләсәктә уларҙы тағы ла юғарыраҡ кимәлле оҫталыҡ мәктәбе көтә: һөнәрмәндәр чемпионаты булып үткән заманса йыһазландырылған әҙер база федераль уҡыу үҙәге ойоштороласаҡ. Бынан тыш, белем биреүгә ҡағылышлы Халыҡ-ара социаль педагог **(3)**, Бөтә Рәсәй уҡыуҙар **(9)**, Халыҡ-ара мәктәп китапханаһы **(25)** көндәре билдәләнә.

Әинде ай башынан төшөп киткәндә, календарҙа тағы ла ошондай даталар иғтибарҙы йәлеп итә: Бөтөн донъя йылмайыу, Халыҡ-ара музыка **(1)**, Электрон почта көнө **(2)**, Рәсәйҙең Хәрби-космос Көстәре **(4)**, Бөтөн донъя космос аҙналығы **(4-10)**, Граждандар оборонаһы ғәскәре, Бөтөн донъя архитектура, Бөтөн донъя хайуандар, Халыҡ-ара табип, Халыҡ-ара торлаҡ **(4)** көндәре, Бөтөн донъя йәшәгән ерҙе һаҡлау **(6)**, Бөтөн донъя почта **(9)**, Ауыл хужалығы һәм эшкәртеү сәнәғәте эшсәндәре, "Бәйләнештә" контакт селтәре, Бөтөн донъя психик сәләмәтлек **(10)** көндәре, Башҡортостан Республикаһы көнө **(11)**, БР Дәүләт гимны тураһында БР законы ҡабул ителгән көн **(11, 1993)**, Халыҡ-ара бәләкәй ҡыҙҙар көнө **(11)**, Бөтөн донъя артритҡа ҡаршы көрәш **(12)**, Халыҡ-ара стихиялы бәлә-ҡаза хәүефен кәметеү **(13)**, Халыҡ-ара стандартлаштырыу **(14)**, Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары **(15)**, Бөтөн донъя аҙыҡ-түлек **(16)**, Бөтөн донъя аҙыҡ-түлек сәнәғәте эшсәндәре, Юл хужалығы, Участка терапевы **(17)** көндәре, Бөтөн донъя остеопорозға ҡаршы көрәш, Халыҡ-ара авиадиспетчер, Бөтөн донъя статистик, Халыҡ-ара ашнаҡсы **(20)** көндәре, Аҡ Торналар әҙәби байрамы **(22)**, Реклама хеҙмәткәрҙәре **(23)**, Халыҡ-ара БМО **(24)**, РФ таможенниктары, Ҡатын-ҡыҙҙарҙың тыныслыҡ өсөн халыҡ-ара көндәре **(25)**, Дзюдо көрәшсеһе, Халыҡ-ара өләсәйҙәр һәм олатайҙар көндәре **(28)**, Халыҡ-ара ҡағыҙһыҙ көн, Бөтөн донъя инсульт менән көрәш **(29)**, Сәйәси золом ҡорбандарын иҫкә алыу, Бөтөн Рәсәй гимнастика көндәре **(30)**, Автомобиль һәм ҡала йәмәғәт транспорты, Халыҡ-ара иҡтисад, Бөтөн донъя ҡалалар **(31)** көндәре. Һанай китһәң, тотош ҡына байрамдарҙан тора икән дә октябрь.

**Ҡарасайҙа тыуғандар:**

**9 -** дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Башҡортостан Үҙәк башҡарма комитеты рәйесе, РКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты секретары, 1921-1924 йылдарҙа БАССР-ҙың Халыҡ комиссарҙары Советы рәйесе, башҡорт телен ғәмәлгә ашырыу буйынса комиссия рәйесе, Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры **Шәһит Хоҙайбирҙиндың тыуыуына - 125 йыл** (1896-1924).

**10 -** дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре **Ибраһим Абыҙбаевтың тыуыуына - 120 йыл** (1901-1937).

**13 -** шағир, ҡарһүҙ оҫтаһы **Әхмәҙиә сәсәндең** (Әхмәҙиә Шәрипов) **тыуыуына - 90 йыл** (1931-2002).

**-** М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы **Миңзәлә Хәйруллинаға - 60 йәш** (1961).

**15 -** педагог, методист, педагогика фәндәре кандидаты, 1968-1989 йылдарҙа БДУ уҡытыусыһы, "Әлифба" авторҙарының береһе **Абдрахман Ғәлләмовтың тыуыуына - 95 йыл** (1926-1989).

**25 -** ғалим-төркиәтсе, яҙыусы, йәмәғәт эшмәкәре, филология фәндәре докторы, профессор, Ленин һәм "Почет Билдәһе" ордендары кавалеры **Жәлил Кейекбаевтың тыуыуына - 110 йыл** (1911-1968).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТ*

## НАСАРҘЫ ҠАБУЛ ИТМӘ

**Тирә-яҡта аҡылы, һәләте, кешелеклелеге менән дан тотҡан бер уҡытыусы йәшәгән. Ул йәш егеттәрҙе хәрби кәсепкә өйрәткән.**

Көндәрҙән бер көндө уның янына үҙенең ҡанһыҙлығы, көнсөллөгө менән айырылған йәш һуғышсы килгән. Ул тирә-йүндә ҡаршы яҡтағыларҙы кәмһетеп, мыҫҡыл итеп, улар тураһында хөсөт таратып көсһөҙләндереү алымын ҡулланырға яратыуы менән танылған булған. Тик барыбер ниндәй ҙә булһа яңылышлыҡ ҡылып, яу һайын еңелә килгән.

Был юлы ла шулай килеп сыҡҡан: һуғышсы күнекмә ваҡытында бер нисә тапҡыр мыҫҡыллы һүҙҙәр ҡысҡырған да, аҡыл эйәһе нимә әйтер икән тип, уның реакцияһын күҙәткән. Тик уҡытыусы бер нәмә лә булмаған кеүек эшен дауам иткән. Шулай бер нисә тапҡыр ҡабатланған. Уҡытыусының кәмһенеп, көсһөҙләнеүен күрергә теләгән һуғышсыға күнекмәне ташлап китеүҙән башҡа сара ҡалмаған. Был хәлде иғтибар менән күҙәткән уҡыусылар аҡыл эйәһенән һорамай түҙмәгән: "Уҡытыусы, һеҙ ни өсөн уның һөжүменә, кәмһетеүенә түҙҙегеҙ. Уны көрәшкә саҡырырға ине", - тигәндәр.

Аҡыл эйәһе: "Әгәр һеҙгә алып килгән бүләкте ҡабул итмәһәгеҙ, ул кемдеке иҫәпләнә?" - тип һораған. "Бүләк бирергә теләгән кешенеке", - тип яуаплаған бер тауыштан уҡыусылары. "Көнсөллөк, асыу, күралмаусанлыҡ, хөсөт менән дә шулай. Уларҙы ҡабул итмәһәң, уны алып килгән кешенең үҙендә ҡала һәм уны көсһөҙләндерә..." - тип аңлатҡан уҡытыусы.

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*



# ТАРИХИ ДӨРӨҪЛӨКТӨ...

## ...ил Конституцияһы яҡлай!

**Тарих ҡабатлана, тиҙәр... Ысынлап та, ул ниндәйҙер бер арауыҡта ҡабатланып тора. Хәҙер инде уның фарсмы, трагедиямы икәнен дә аңлап булмай. Милли батырыбыҙ Салауат Юлаев шәхесенә лә ваҡыт-ваҡыт яҫҡынып тороусылар бар. Әлеге ваҡытта социаль селтәрҙәрҙә өфөләрҙең ҡайһы бер экскурсоводтарға ҡәнәғәтһеҙлек белдергән фекерҙәре төп тема булып тора. Уларҙа барлыҡ теләүселәрҙе бушлай курстарҙа уҡытып, Башҡортостандың милли батыры Салауат Юлаевтың исемен бысратып, шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың геройҙары юҡ, тип белдергән баш ҡала экскурсоводтарының ҡайһы берҙәре тураһында һүҙ бара.**

Был ваҡиға Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары Азат Бадрановтың да иғтибарынан ситтә ҡалманы һәм ул үҙенең аккаунттарында түбәндәгеләрҙе белдерҙе: "Социаль селтәрҙәрҙең башҡорт сегментында экскурсоводтарҙы уҡытыу һәм республиканың милли геройы Салауат Юлаевҡа ҡарата интерпретациялар буйынса әүҙем фекер алышыу бара. Туризм буйынса дәүләт комитеты етәксеһе Эльмира Туканова менән беҙ был ваҡиғаны тикшерәбеҙ. Атап кителгән экскурсоводтар менән профилактик әңгәмәләр үткәрелергә тейеш. Бындай хәл киләсәктә ҡабатланмаһын өсөн экскурсоводтарҙы уҡытырға, лекторий үткәрергә һәм йәмғиәттең был эшенә профессионал тарихсыларҙы - Рәсәй тарихи йәмғиәтен һәм Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәтен йәлеп итергә ҡарар иттек.

Дөйөм алғанда, экскурсоводтарҙың белем кимәле республика өсөн генә түгел, ил өсөн дә көнүҙәк. Тап шуға күрә күптән түгел экскурсоводтарҙы мотлаҡ дәүләт аттестациялауы тураһында федераль закон ҡабул ителде һәм 2022 йылдан республика территорияһында аттестацияны Туризм буйынса дәүләт комитеты үткәрәсәк, уға ярашлы республика тарихы буйынса экскурсия материалдары эшләнәсәк.

Салауат Юлаевҡа ҡағылышлы шуны әйтер инем: ул социаль ғәҙеллек өсөн көрәштә тәрән эҙ ҡалдырған тарихи шәхес һәм уға ниндәйҙер яла яғырға маташыуҙарҙың бер ниндәй аныҡ ерлеге юҡ. Тап ошо көслө шәхес етәкселеге аҫтында башҡорттар, урыҫ крәҫтиәндәре, шулай уҡ Волга буйы һәм Уралда йәшәгән башҡа милләт халыҡтары берләшкән. Дөрөҫ, Крәҫтиәндәр һуғышы ( боламы ул әллә восстаниемы - бынан уның асылы үҙгәрмәй) - ул конфликт, ләкин совет тарих фәне конфликтлы сюжеттарҙы күпселектә тынысыраҡ ҡабул итергә өйрәтте һәм хатта улай ғына ла түгел, ҡайһы бер тарихи шәхестәрҙе халыҡтар дуҫлығын нығытыу һәм ил берҙәмлеге хаҡына хеҙмәт итеүсе символ булараҡ күтәрҙе.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Азат Рәхмәтуллин хәбәр итеүенсә, республикала 203 вакцинация пункты асылған. Бөтәһе лә штат режимында эшләй. Хәҙерге көндә Башҡортостанда - Өфөлә һәм Стәрлетамаҡта ике ҙур инфекция үҙәге эшләй. Икеһе лә пациенттар менән тулған. Шуға күрә республикала 770 урынлыҡ тағы дүрт ковид-госпиталь асыу планлаштырыла.

✓Башҡортостанда балалар күпләп ауырый. Был турала республиканың Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе Анна Казак хәбәр итте. Статистикаға ярашлы, 730 белем биреү ойошмаһында яңы коронавирус инфекцияһы менән ауырыу осраҡтары асыҡланған. Уның билдәләүенсә, кешеләр тынысланды. Сауҙа үҙәктәрендә, транспортта һәм күп кеше ҡатнашлығындағы сараларҙа битлек режимын һәм социаль арауыҡты үтәүгә иғтибар ителмәй. Анна Казак ошо хәүефһеҙлек сараларын ҡаты контролдә тоторға тәҡдим итте.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға Ольга Панчихинаны республиканың Бала хоҡуҡтары буйынса вәкиле вазифаһына тәҡдим итте. Ольга Панчихина был вазифала 11 йыл эшләгән һәм Дәүләт Йыйылышы депутаты итеп һайланған Милана Скоробогатованы алмаштыра.

✓30 сентябргә ҡарай төндә Ырымбур өлкәһенең Гай ҡалаһында медицина колледжында уҡып йөрөгән өс ҡыҙҙың ғүмере ҡыйылған. Һәләк булған ҡыҙҙар Баймаҡ һәм Күгәрсен райондарынан. Полицейскийҙар енәйәтсене эҙләй, урында тәфтишселәр һәм криминалистар эшләй. Енәйәт эше ҡуҙғатылған. Республика Башлығы Радий Хәбиров Гай медицина колледжы студенттарының туғандары һәм яҡындары өсөн кәрәкле ярҙам ойошторорға ҡушты.

✓2020 йылда скульптор-монументалист, Салауат Юлаев һәйкәле авторы Сосланбәк Тавасиев исемендәге стипендия булдырылды. Быйыл тәүге түләү тәғәйенләнде. Республика Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, Өфө художество-гуманитар колледжы студенты Анастасия Ефремова тәүге еңеүсе тип танылды. Башҡортостан Хөкүмәтенең уға 5 750 һум стипендия түләү тураһында ҡарарына ҡул ҡуйылды.

***✓ Берлектәге предприятиелар һаны арта, инвестиция проекттары уңышлы тормошҡа ашырыла. 2021 йылдың ғинуар-июлендә Ҡаҙағстан менән Башҡортостан араһында тауар әйләнеше 200 миллион доллар тәшкил иткән.***



*ҠЫҪҠАСА*

# АЛДЫНҒЫЛАР РӘТЕНДӘ...

✓ **Рәсәйҙең 49 төбәгенән 106 юғары уҡыу йорто дәүләт ярҙамы күрһәтеүҙе күҙаллаған "Приоритет-2030" программаһына инде.** Улар араһында Башҡортостандың өс юғары уҡыу йорто - Башҡорт дәүләт медицина университеты, Башҡорт дәүләт университеты һәм Өфө дәүләт нефть техник университеты ла бар. Программаға ингән һәр уҡыу йорто йыл һайын 100 млн һум күләмендә грант аласаҡ. Һәр уҡыу йорто ағымдағы уңыштары һәм фәнни асыштары йәһәтенән генә түгел, ә үҫеүҙе күҙаллаған программаһына, уның тормошҡа ашырылыу мөмкинлегенең юғары булыуына һәм ил менән төбәктең милли маҡсаттарына ярашлы булыуынан сығып баһаланды. Әлеге мәлдә юғары уҡыу йорттары "Приоритет 2030" программаһы грантының махсус өлөшөн алыуға дәғүә итә. Уны алыусылар исемлеге программа советы тарафынан конкурстың икенсе этабы һөҙөмтәләре буйынса һайлап алынасаҡ. Грант дәүмәле һәр университетҡа айырым билдәләнәсәк.

✓ **Башҡортостанда Ленинградты һаҡлауҙа һәм блокаданан азат итеүҙә ҡатнашҡан 105 кешегә 50 мең һум күләмендә аҡса бирелә.** Рәсәй Президенты Владимир Путин "Йәшәү юлы" асылыуға 80 йыл тулыуға бәйле "Ленинградты обороналаған өсөн" миҙалы йәки "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһе менән бүләкләнгән Рәсәй граждандарына бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһында" указға ҡул ҡуйҙы. "Рәсәй Федерацияһында, Латвия Республикаһында, Литва Республикаһында, Эстон Республикаһында, Абхазия, Көньяҡ Осетия һәм Приднестровье биләмәләрендә даими йәшәгән һәм "Ленинградты обороналаған өсөн" миҙалы йәки "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһе менән бүләкләнгән Рәсәй граждандарына 2021 йылда 50-шәр мең һум аҡса түләргә", - тиелә Кремль сайтында баҫылған рәсми хәбәрҙә. Башҡортостанда улар 105 кеше иҫәпләнә.

✓ **Гидрометцентр йылытыу миҙгеленә (2021 йылдың октябренән 2022 йылдың мартына тиклем) температура режимының ниндәй булыу ихтималлығын билдәләне.** Декабрҙә уртаса температура Волга буйы федераль округының күп өлөшөндә норманан түбән, ә февраль илдең күп төбәктәрендә былтырғыға ҡарағанда йылыраҡ буласаҡ. Башҡа айҙарҙа һауа температураһы норма сиктәрендә булыуы көтөлә. Мәҫәлән, Өфө өсөн октябрҙә уртаса айлыҡ температура +3,3 градус, ноябрҙә -4,2, декабрҙә -10,8, ғинуарҙа -14,8, февралдә -13,3 һәм мартта -6 градус буласаҡ. Рәсәйҙең Гидрометеоүҙәк күҙаллаған температура режимы һуңғы 20 йылда 58-81 процент тирәһенә тура килә.

✓ **"Салауат Юлаев" үҙ боҙонда беренсе уйынды Мәскәүҙең "Спартак" командаһы менән уҙғарҙы һәм ҡунаҡтарҙы 2:1 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.** Түбәнге Каманың "Нефтехимик" командаһы ла өфөләрҙең оҫта, берҙәм, еңеүгә булған ынтылышлы уйыны менән осрашты. Матч хужалар файҙаһына 5:1 иҫәбе менән тамамланды. Юлаевсылар Ҡытайҙың "Куньлунь Ред Стар" командаһын 5:1 иҫәбе менән ҡыйратып ҡайтарҙы. Минскиҙың "Металлург"ы уйынсылары ла Юха Метсола ҡапҡаһын аса алманы, ә өфөләр ҡунаҡтарға бер шайба индереп, матчты 1:0 иҫәбе менән тамамлауға өлгәште. "Салауат Юлаевтың" еңеүҙәр серияһын "Северсталь" командаһы үҙ боҙонда өҙҙө һәм Өфө ҡунаҡтарына 2 шайба "бүләк" итте. Артабан ситтә уҙғарған уйындарҙа Өфө командаһы тағы ла еңеү байрағын үҙ ҡулына алды һәм "СКА" командаһын 2:4, Ярославлдең "Локомотив"ын овертаймда 2:3 иҫәбе менән ҡыйратты, Өфөгә ҡайтып Екатеринбургтың "Автомобилист" хоккейсыларын 3:2 иҫәбе менән еңеүгә өлгәште.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ҠАҘАҒСТАНДА ОСРАШЫУ

**Радий Хәбиров етәкселегендәге Башҡортостан делегацияһы рәсми сәфәр менән Ҡаҙағстанға барҙы. Бында республиканың инвестиция һәм иҡтисади ҡеүәте менән таныштырыу сараһы, шулай уҡ Башҡортостан Конгресс-бюроһы вәкиллеген асыу тантанаһы булды.**



Нур-Солтанда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров менән Ҡаҙағстан Президенты Ҡасым-Жомарт Тоҡаевтың эшлекле осрашыуы ла үтте. Ҡасым-Жомарт Тоҡаев һүҙҙәренсә, ковид пандемияһының дауам итеүенә ҡарамаҫтан, Ҡаҙағстан менән Башҡортостандың күп яҡлы бәйләнештәре йылдам үҫешә, йөкмәткеһе лә тулылана. Башҡортостан да, Ҡаҙағстан да төрлө өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек итеү менән ҡыҙыҡһына, тип билдәләне Радий Хәбиров та һәм: "Беҙ тармаҡ бәйләнештәрен, сәнәғәт кооперацияһын киңәйтергә, бергәләп юғары сифатлы продукция етештерергә әҙербеҙ, - тине. - Ҡаҙағстан күп милләтле Рәсәйҙә йәнә үҙенә ҡәрҙәштәр тапһын өсөн туғандаш ҡаҙаҡ халҡының Башҡортостан тураһында күберәк белеүен теләйбеҙ".

Берлектәге предприятиелар һаны арта, нефть химияһы, ауыл хужалығы, металлургия, еңел сәнәғәт һәм башҡа тармаҡтарҙа инвестиция проекттары уңышлы тормошҡа ашырыла, тип билдәләнә яҡтар. Әйтәйек, 2021 йылдың ғинуар-июлендә Ҡаҙағстан менән Башҡортостан араһында тауар әйләнеше күләме уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 20,2 процентҡа артып, яҡынса 200 миллион доллар тәшкил иткән. Яҡтар Өфө менән Нур-Солтан араһында тура авиабәйләнеш асыу мөмкинлеген дә тикшерҙе.

# ХӘҮЕФКӘ УРЫН БАР



**Башҡортостанда яңы коронавирус инфекцияһынан вакцинация темптары кәмене. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров билдәләүенсә, 1 октябргә республика халҡының 80 проценты прививка эшләтергә тейеш ине, ысынында иһә 50 проценттан саҡ ҡына ашыуыраҡ.**

"Кешеләр ауырыраҡ сирләй, айырыуса прививка яһатмағандар. Беҙ уларға ярҙам итергә тырышырбыҙ. Ләкин күптәрҙе юғалтабыҙ. Реанимацияла һәм үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылғандар араһында вакцина эшләткән бер кеше лә юҡлығын үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, - тине Радий Хәбиров. - Вакцинация планы - ябай һандар ғына түгел, был - аныҡ математик иҫәп. Билдәләнгән күрһәткестәргә өлгәшеп кенә беҙ коллектив иммунитет булдырырбыҙ һәм ғәҙәти тормошҡа кире ҡайта алырбыҙ". Республика етәксеһе коронавирус менән ауырыу буйынса хәлде "сағыштырмаса тотороҡло" тип атаны. Уның фекеренсә, шулай ҙа халыҡтың хәүефһеҙлеге буйынса яңы саралар һәм яңы сикләүҙәр индерергә кәрәк. "Ковидҡа ҡаршы штабта ҡарарҙар ҡабул иттек. Ҡайһы бер ойошмаларға ике документтың береһе: вакцинация тураһында сертификат йәки сирҙе үткәреү тураһында белешмә менән генә инергә мөмкин", - тине Радий Хәбиров.

**Башҡортостанда яңы сикләүҙәр өс этапта индерелә:**

**- 4 октябрҙән** дәүләт һәм муниципаль музейҙарға, театрҙарға, китапханаларға, мәҙәниәт йорттарына, кинотеатрҙарға, шулай уҡ күп кеше ҡатнашлығындағы спорт сараларына инеү өсөн сикләүҙәр индерелә.

**- 12 октябрҙән** был исемлеккә сауҙа үҙәктәре, шәхси музейҙар, күргәҙмә залдары, китапханалар, кинотеатрҙар, концерт залдары өҫтәлә; прививка тураһында сертификатһыҙ йәки сирҙе үткәреү тураһында белешмәһеҙ ҡала-ара автобустарға һәм "Орлан" ҡала яңы поезына билет һатып алып булмай.

**- 18 октябрҙән** сикләү саралары матурлыҡ салондарына, СПА-салондарға, солярийҙарға, мунсаларға, сауналарға, физкультура-һауыҡтырыу комплекстарына, фитнес-клубтарға, бассейндарға, ресторан-кафеларға (әгәр унда 50-нән ашыу урын булһа) ҡағыла.

# МӘКТӘП ТУҠЛАНЫУЫ



**Мәктәп туҡланыуын ойоштороу эшендә асыҡланған бөтөн осраҡтар буйынса ла урындарға барып тикшерелде, етешһеҙлек сәбәптәре бөтөрөлдө. Хөкүмәттә булып үткән оператив кәңәшмәлә сауҙа һәм хеҙмәттәр күрһәтеү министры Алексей Гусев ошо хаҡта хәбәр итте.**

Иҫегеҙгә төшөрөп үтәйек: былтыр мәктәп туҡланыуын ойоштороу һәр ваҡытта ла сифатлы булды тип әйтә алмайбыҙ. "Етди һәм киң таралған тәртип боҙоуҙарҙың береһе - ярымфабрикаттар менән эшләүгә тәғәйенләнгән аҙыҡ-түлек блоктарында сеймал файҙаланыу. Был тыйыла һәм ул санитария закондары нигеҙенә ҡаршы килә", - тине Гусев. Мәктәп менюһына ҡарата ата-әсәләрҙең ризаһыҙлыҡтарын иҫәпкә алып, технологтар, табип-диетологтар, гигиена буйынса табиптар тарафынан меню төҙөлдө һәм ул аҙаҡ мәктәп һәм ата-әсәләр комитеттарында тикшерелде. Улар хуплағандан һуң, Гигиена һәм эпидемиология үҙәгенән ыңғай баһа алғас, Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы тарафынан раҫлана. Былтырҙан алып балалар туҡланыуын ойошторғанда уҡыусыларҙың һаулығы тикшерелә. Шәкәр диабеты, фенилкетонурия менән сирләүсе балалар өсөн махсус меню төҙөлдө. Уларҙы эшләүҙә "Диамапы", шулай уҡ фенилкетонурия һәм башҡа һирәк ауырыуҙар менән яфаланғандарға ярҙам итеүсе ойошмалар ҡатнашты. "Башҡортостан Республикаһының Берҙәм мәғариф мөхите" системаһында ата-әсәләр шәхси кабинеттары аша балаларҙы туҡландырыу сифатына контроллек итә аласаҡ. Башҡортостанда Дөйөм белем биреү ойошмаларында туҡланыуҙы ойоштороу стандарты раҫланды. Яңы уҡыу йылы башынан алып 1-4-се кластар һәм ташламалы категорияға ҡараусы балалар бушлай туҡландырыла.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Урал транспорты", "Тәҙәләш" һәм "Күсемһеҙ милек" күргәҙмәләрендә тәҙәләш һәм транспорт өлкәһендәге яңы проекттар менән танышты. "Башавтотранс" предприятиеһы "ВДНХ-Экспо" алдындағы майҙанда ике яңы пассажир автобусын күрһәтте. "Башавтотранс"тың генераль директоры Надир Самиев республика етәксеһенә ошо көндәрҙә Өфөлә "НефАЗ" һәм "Вектор Next" маркалы 60 яңы автобустың популяр маршруттарға сығыуы тураһында һөйләне.

✓"Берҙәм Рәсәй" партияһынан берҙәм һайлау округы буйынса V саҡырылыш ҡала округы Советы составына һайланған Өфө хакимиәте башлығы Сергей Греков үҙенең мандатын Башҡортостандың Диңгеҙ йыйылышы рәйесе Юлай Моратовҡа бирергә хәл итте. Баш ҡала хакимиәте башлығы һүҙҙәренсә, Моратов ҡала Советында йәштәргә илһөйәрлек тәрбиәһе биреү мәсьәләләре өсөн яуап бирә.

✓Октябрҙә республика халҡын өҫтәмә ял көнө көтә, тип иҫкә төшөрҙөләр Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығында. Республика законына ярашлы, 11 октябрҙә Республика көнө - Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһында Декларация ҡабул итеү көнө билдәләнә. Республика көнө байрам тип иҫәпләнә. Рәсәйҙең хеҙмәт ҡануниәтенә ярашлы, йыллыҡ отпуск биргәндә 11 октябрҙәге байрам көнө - Республика көнө уның иҫәбенә индерелмәй.

✓30 сентябрҙән 11-се гимназияның, 62-се һәм 160-сы лицейҙарҙың, 23-сө, 61-се, 62-се мәктәптәрҙән 5-се, 6-сы, 7-се, 8-се һәм 10-сы класс уҡыусылары дистанцион уҡый башланы. Онлайн-формат 14 көнгә индерелгән. Ҡабул ителгән ҡарар Башҡортостандың Роспотребнадзор идаралығы тәҡдимдәренә нигеҙләнгән. Эпидемиологик хәл тотороҡлаһа, уҡыусылар йәнә мәктәпкә йөрөй башлай. Бынан алда ОРВИ һәм COVID-19 менән ауырыусылар күбәйгән 70 мәктәптә дистанцион уҡыуға күсергәйнеләр.

✓Билдәле өфөләр - блогер Рөстәм Нәбиев һәм ресторатор Сергей Белкин әлеге ваҡытта Манаслу тауы биттәүендә. Манаслу - бик бейек тау, артылыу хәүефле тип һанала. Сөнки Манаслу тауында үлем осрағы 17 процент тәшкил итә. Тау башына менгән саҡта осраған ҡар ишелмәһе, боҙ ҙур хәүеф тыуҙыра. Омскиҙа казарма емерелгәндә ике ағаһын юғалтҡан Рөстәм Нәбиев Эльбрусты яуланы ла инде. Хәҙер ул үҙенең икенсе бейеклегенә - Манаслу тауына үрләй.

**БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

**✓ Пандемия шарттарына ҡарамаҫтан, быйыл эшһеҙҙәр һаны 4,4 тапҡырға кәмегән һәм 8537 кеше тәшкил итә. Шулай уҡ теркәлгән эшһеҙҙәр кимәле йыл башынан 4,75 процентҡа түбәнәйеп, бөгөн 1,41 процент кимәлендә.**



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# АУЫРЫУСЫЛАР АРТА...

## эшһеҙҙәр кәмей

**Яҙлы-көҙлө тотош Башҡортостан территорияһында өмәләр һәм ағас ултыртыу акциялары әүҙем үтә. Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә лә был темалар көн үҙәгенә сығарылды.**

Муниципалитеттың Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, өмәлә барлығы 58 140 кеше ҡатнаша, 699 берәмек техника йәлеп ителә һәм 1900 кубометр сүп-сар сығарыла. Дөйөм ҡала өмәһе сиктәрендә ойошторолған "Йәшел Башҡортостан" акцияһында ҡала районларының торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәре тарафынан 79 йәмәғәт территорияһында 1420 төп ағас һәм 526 ҡыуаҡ, нигеҙҙә, ҡарағай, шыршы, ҡайын, миләш, йүкә ултыртылған. Ленин, Дим, Октябрь һәм Орджоникидзе райондарында яңы аллеялар барлыҡҡа килгән. Ағас ултыртыу 8 октябргә тиклем дауам итәсәк һәм акция барышында барлығы 3800 төп ағас ултыртыу планлаштырылған.

Көҙ ныҡлап үҙ хакимлығын урынлаштырғанға тиклем баш ҡала халҡы йылылыҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһе буйынса йыл да геүләп ала торған. Быйыл да көндәрҙең йылы тороуы, ҡапыл һыуытып ебәреүе һәм ҡабаттан йылытыуы һөҙөмтәһендә бер аҙ аңлашмаусылыҡтар булып алған: махсус ойошторолған штабҡа 22 сентябрҙән 2800 шылтыратыу ҡабул ителгән.

Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Пермина белдереүенсә, ОРВИ менән сирләүселәр һаны артҡан һәм ул эпидемия сиген үтеп киткән. Шул уҡ ваҡытта тажзәхмәт тә сигенергә уйламай, балалар ҙа ковидҡа бирешә башлаған. Һөҙөмтәлә был аҙна башында баш ҡаланың 51 мәктәбе өлөшләтә ситтән тороп уҡыуға күсерелһә, 29 сентябрҙә уларға тағы ла 19 мәктәп ҡушылған. Был хаҡта ҡала хакимиәте башлығының гуманитар мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Гөлләриә Ялсыҡаева белдерҙе. Ситтән тороп уҡыу ике аҙна дауам итәсәк һәм ул 5-8-се, 10-сы кластарға ҡағыла. Тажзәхмәт сиренең артабан таралыуына юл ҡуймау һәм сирҙе профилактикалау маҡсатында баш ҡаланың барлыҡ белем биреү учреждениеларында иртән термометрия башҡарыла, уҡыусылар бер урында тупланмаһын өсөн запас ишектәр асылған. Көн һайын дезинфекция саралары ҡулланып, еүешләп йыйыштырыу йһала. Бынан тыш, һәр синыфҡа бер класс-кабинет беркетелгән. Күләмле саралар уҙғарылмай. Хроник сирҙәре булған балалар ата-әсәләренең ғаризаһы буйынса дистанцион форматта белем алыуға күсерелгән.

Өфө ҡалаһы Халыҡтың мәшғүллек үҙәге директоры Ридан Ахьямов сығышынан мәғлүм булыуынса, пандемия шарттарына ҡарамаҫтан, былтырғы менән сағыштырғанда быйыл эшһеҙҙәр һаны 4,4 тапҡырға кәмегән һәм 8537 кеше тәшкил итә. Шулай уҡ теркәлгән эшһеҙҙәр кимәле йыл башынан 4,75 процентҡа түбәнәйеп, бөгөн 1,41 процент кимәлендә. Йыл башына эш биреүселәр 21141 вакансия тәҡдим итһә, 23 сентябргә был һан 28207 була, йәғни һәр эш эҙләүсегә өс вакансия тура килә. Айырым категория граждандар өсөн өҫтәмә һөнәрҙәргә уҡыу ойоштороla. Быйыл 2113 кешене уҡытыу планлаштырылған, 1184 кеше һөнәри белем алған да инде. Бынан тыш, баш ҡала эшһеҙҙәрҙе эшкә алған өсөн эш биреүсегә түләгән эш хаҡының бер өлөшөн компенсациялау ҙа ҡарала. Бөгөн был программала 142 предприятие ҡатнаша һәм улар 3217 вакансия тәҡдим итә.

Тормош кеше алдына ниндәй генә һынауҙар ҡуймаһын, бәндә йәшәргә тырышып ята. Эпидемиямы, пандемиямы - тормош дауам итә, йән биргәненә йүнен дә бирә Юғары көстәр. Хәйер, күпме ғүмер бирелгәнлеге лә уның ихтыярында. Биргәненә шөкөр итеп йәшәйек.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ - 2020

# БАШ ҠАЛА ӘҘЕР

БӨТӘ РӘСӘЙ ХАЛЫҠ ИҪӘБЕН АЛЫУ

**Баш ҡала халыҡ иҫәбен алыуға әҙер. Был кампания барлығы 49188 торлаҡ йортто һәм 1 миллион 155 мең кешене солғап аласаҡ.**

29 сентябрҙән 350 участкала контролерҙар эш башлай. Халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек барышында ҡала территорияһы һәм 24 ауыл биләмәһе сиктәре аныҡлана, адреслы хужалыҡтар менән эш тамамлана, иҫәп алыу участкалары эшен алып барыу өсөн биналар билдәләнә, нигеҙҙә, улар уҡыу йорттарында, йәштәр сәйәсәте, торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар учреждениеларында урынлаша. Халыҡ иҫәбен алыуға 350 контролер, төп составҡа - 2112, резервҡа 377 иҫәп алыусы әҙерләнгән, уларҙың күпселеге вакцинация үткән. Ҡала райондары иҫәп алыу ҡорамалдары менән тәьмин ителгән.

Быйылғы халыҡ иҫәбен алыуҙың төп айырмаһы булып уның "һанлы" форматта үтеүе тора. Шулай уҡ граждандар Госуслуги порталы аша электрон иҫәп алыу бланкыларын тултыра, теләге булғандар стационар участкаларҙа иҫәпкә алына ала.

Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу 15 октябрҙән 14 ноябргә тиклем дауам итәсәк.

ҺОРАУ - ЯУАП

# ЭШТӘН БУШАТТЫЛАР...

**Мин ярты йыл кеҫә телефоны һатыусы магазинда график буйынса эшләнем. Бер аҙна элек минең эшкә сыкмауымды сәбәп итеп, эштән бушаттылар. Баҡтиһәң, етәксе эш графигын үҙгәрткән, ә мин был хаҡта белмәнем, сөнки телефоным боҙолоу арҡаһында хәбәрҙәр һәм шылтыратыуҙар килмәй ине. Етмәһә, ул көндә мин икенсе ҡалала инем. Мин үҙемде ғәйепле һанамайым. Әллә яңылышамы?**

Прогул һөҙөмтәһендә эштән бушатыу РФ Хеҙмәт кодексының 81-се статьяһында (1-се бүлек, 6-сы пункт) билдәләнгән. Уға ярашлы, хеҙмәткәрҙең эш урынында көнө буйы йәки 4 сәғәт рәттән булмауы прогул һанала. Ләкин, әгәр ҙә хеҙмәткәр эш графигының үҙгәреүе тураһында алдан иҫкәртелмәү сәбәпле эш урынында булмаһа, был прогулға иҫәпләнмәй. Тик эшкә кире ҡайтарыуҙары тураһындағы дәғүә менән судҡа мөрәжәғәт иткән осраҡта хеҙмәткәргә эш графигы үҙгәреүе тураһында белмәүен иҫбатларға кәрәк. Һеҙҙең осраҡта, шулай уҡ, нәҡ шул ваҡытта телефоныгыҙҙың сафтан сыҡҡан булыуын, эш биреүсенең графикты үҙгәртеүен һәм һеҙҙе билдәләлекҡә ҡуймауын да раҫларға кәрәк буласаҡ. Ә эш биреүсе, үҙ сиратында, эш графигын үҙгәртеү ысынлап та кәрәк булыуын һәм яңы график тәғәйен локаль норматив документтарға таянып башҡарылыуын раҫларға тейеш. Графиктың үҙгәреүе тураһында хеҙмәткәрҙең тейешле рәүештә иҫкәртелгән һәм уның яңы график буйынса эшләргә риза булыуын да эш биреүсе шулай уҡ дәлилләргә бурыслы.

# СҮП ӨСӨН...

**Ғаиләлә 4 кешебеҙ. Районда теркәлгәнбеҙ, ләкин Өфөлә йәшәйбеҙ. Ике адрес буйынса ла сүп-сар сығарыу өсөн түләүҙе күҙаллаған квитанция килде. Ҡайһы квитанция буйынса түләргә тейешбеҙ һуң?**

Теркәлгән урында даими йәшәмәгән йәки ваҡытлыса йәшәгән осраҡта коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү күсемһеҙ милек хужаларының һанынан сығып билдәләнә. Был хаҡта Рәсәй Хөкүмәте 2011 йылдың 6 майында раҫланған ҡарарында әйтелгән (№354). Йәғни, ауылдағы шәхси йортта 4 кеше теркәлеп тә, унда бер кем дә йәшәмәй икән, йорттоң нисә хужаһы булыуынан сығып билдәләнгән квитанция киләсәк. Әгәр ҙә бер хужа икән, теркәлгән 4 кеше өсөн дә түләмәҫ өсөн даими йәшәгән урындан шуны дәлилләүсе белешмә алып килергә кәрәк. Ә, мәҫәлән, Әсәлек капиталына алынған йорттоң, ғәҙәттә, бер нисә хужаһы була (атай-әсәй, балалар). Тимәк, улар әлеге йортта йәшәмәһә лә, квитанцияла хаҡ барыһы өсөн дә билдәләнә.

Ә йәшәгән ерҙә түләү өсөн фатирҙың (йорттоң) ниндәй оператор тарафынан хеҙмәтләндерелеүен асыҡлап, улар менән килешеү төҙөргә кәрәк. Уларға шулай уҡ фатирҙа йәшәүселәрҙең һанын аныҡлаған белешмә алып барыу ҙа ҡаралған.

# КОЛЛЕКТОРҘАР ЯНАЙ

**Ирем ҙур процент менән кредит алған. Ваҡытында ғына түләй алмаған саҡтар ҙа була. Эшебеҙҙе коллекторҙарға тапшырғандар. Улар беҙгә көнө-төнө янап шылтырата, смс-хәбәр ебәрә. Ә күптән түгел ихатала баланы туҡтатып, әгәр ҙә атайың бурысын тиҙ генә ҡайтармаһа, урлап алып китәсәктәре тураһында әйтеп ҡурҡытҡандар. Беҙгә нимә эшләргә? Уларға шулай бөтә нәмә рөхсәт ителгәнме ни?**

Коллекторҙар үҙҙәренең былай эш итеүҙәре менән законды боҙа. Улар бары тик бурыс булыуы тураһында мәғлүмәт еткерергә генә тейеш. Шылтыратыуҙар тик көндөҙгө ваҡытта ғына башҡарылырға тейеш. Эш көндәрендә бындай иҫкәртеү менән граждандарҙы сәғәт киске 10-дан иртәнге 8-гә, ә ял көндәрендә киске 10-дан иртәнге 9-ға тиклем борсорға мөмкин. Шулай уҡ шылтыратыу йәки смс-хәбәр ебәреү тәүлегенә бер, аҙнаһына - 2, айына - 8-ҙән артмаҫҡа тейеш. Клиент менән шәхси осрашыу иһә аҙнаһына тик бер генә тапҡыр булырға мөмкин. Шулай уҡ коллекторҙарҙың бурыс тураһында икенсе кешеләргә мәғлүмәт биреүе лә законға ярашһыҙ. Ә балалар менән улар бөтөнләй бәйләнешкә инергә тейеш түгел. Бындай хәлдә кисектереү өсөн хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләнә.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ҡулдар шешенһә

❖ 2 балғалаҡ ҡырағай әнис орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Шунан биш минут йә быу өҫтөндә, йә талғын утта тотоп быҡтырырға. Һыуынғансы төнәтергә һәм һөҙөп алырға. Килеп сыҡҡан төнәтмә - бер тәүлеккә етәрлек дауа, уны ошо ваҡыт эсендә аҙ-аҙ ғына уртлап эсеп бөтөргә. Ҡулдар шешенеүен был рәүешле бер аҙна дауаларға. Кәрәк саҡта ҡабаттан дауаланырға мөмкин, әммә ике аҙна туҡталып торорға кәрәк.

## Һуған

❖ Ҡан ауырыуҙары булғанда көнөнә 100-150 грамм һуған ашау файҙалы.

## Диатез

❖ Лимонды йыуып турарға. Орлоҡтарын ташларға. Йомортҡа ҡабығын киптереп, килелә төйөргә. Лимонға шул йомортҡа ҡабығын һибеп, балаға ашатырға. Йомортҡа онтағын сама менән тотонорға, ә лимон - көнөнә бераү кәрәк. Өҫтәлмә бер ниндәй ҙә дарыуҙар ашатмаҫҡа. Был рәүешле баланың хәле яҡшырғансы дауаларға кәрәк.

## Баш шаулағанда

❖ Тигеҙ өлөштә ялан туҡранбашы сәскәһен һәм боланут япраҡтарын ҡушып, сәй кеүек бешереп, көн дауамында эсергә. Дауаланыу мөҙҙәте 3 ай.

## Инсульттан һуң

❖ 1 литр зәйтүн майын бер аҙ йылытып, өҫтөнә 50 грамм кейәү үләне һибергә һәм 2 сәғәт һыу парында тотҡандан һуң, 12 сәғәт төнәтергә. Шунан майҙы һөҙөп алып, һыуыҡҡыста һаҡларға. Көн һайын кискә ошо дауаны ойоған тән өлөштәренә һәм арҡа һөйәге буйына ыуырға.

## Әҫпе (диатез) ҡалҡҡанда

Әҫпеһе ҡалҡҡан балаға ҡара торма (черная редька) һутын эсерергә кәрәк. Башлап бер тамсы ғына эсерергә, артабан һуттың миҡдарын көн һайын ике тамсыға арттыра барып, бер ҡалаҡҡа тиклем еткерергә була. Һутты көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15-20 минут алда эсерергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләнә.**

✓ *Һәр кемде автобустарға тейәп, Салауаттың Рогервикка тиклем йәйәүләп үткән юлынан алып йөрөү мөмкин түгел, әммә тарихи ысынбарлыҡты белеү өсөн тарихсылар яҙып ҡалдырған китаптарҙы уҡып сығыу ҙа ҡамасауламаҫ ине.*



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Башҡорт оҫталары ҡымыҙ һәм һитә балы ижауҙарын эшләгәндә йөҙәр ҡоштарҙы йыш һынландырған. Ағас әйберҙәрҙең һыу менән бәйләнеше тәү сиратта оҡшашлыҡҡа ҡоролған. Быны ижауҙар тураһындағы йомаҡтар ҙа дәлилләй: "Өйрәк һыу аҫтына сума, ҡойроғо өҫтә ҡала", "Тимер ярлы күлдә алтын өйрәк йөҙә". Шул уҡ ваҡытта, башҡорттарҙың өйрәк образын ҡулланыуы элек күберәк фин-уғыр һәм пермь кешеләре рухи донъяһына хас Боронғо Урал һәм Көнбайыш Себер традицияларын үҙләштереүе һөҙөмтәһе, тип фаразларға нигеҙ бар.

Семәрле ижауҙар эшләү башҡорттарҙа юғары художестволы оҫталыҡҡа әүерелгән. XX быуат башында Ырымбур губернаһы кәсептәрен тасуирлап, Д.Н. Соколов "ижау менән бер бөтөн киҫәктән (ағастан - **авт.**) һырлап эшләнгән семәрле ағас сыңғаларҙан торған сылбырлы" нәфис ижауҙар тураһында телгә ала. Ҡаҙаҡтарҙа ла был көнкүреш кәрәк-ярағы "ожау" тип йөрөтөлгән, әммә ул оҙон нәҙек һаплы һәм йыш ҡына ҡуш һоҫҡоло булған. Ҡаҙаҡтарҙыҡы менән бер рәткә башҡорт сүместәрен ҡуйырға булыр; бындай һоҫоп алыу өсөн кәрәкте М. Дьюлой 1909 йылда Ырымбур губернаһы Тәмәс ауылынан Венгрия музейы өсөн һатып ала. Ә башҡорт ижауҙары сыуаш, мари һәм удмурттарҙың һыра ҡойоу өсөн тәғәйенләнгән йола сүместәренә яҡынараҡ тора. Башҡорттарҙа ижау эшләү кәсебе башта Урал традицияларына таянып, аҙаҡ оҙайлы ваҡыт үҙаллы үҫеш алған, тигән фекер тыуа. Сөнки башҡорт әйберҙәренә тура аналогия юҡ.

Башҡорттарҙың ҡолға, орсоҡ һәм туҡыу кәрәк-яраҡтарын, ҡайһы бер туҙ һәм ағас һауыт-һабаны семәрләүендә ултыраҡ игенселек мәҙәниәттәре йоғонтоһо һиҙелә. Һуңғы осор биҙәү йолаларына ҡамытты семәрләү, дуға һәм көйәнтәне буяп биҙәкләү ҡарай.

Рәсми мәғлүмәттәргә ярашлы, ҡамыт ағасын Өфө губернаһы Стәрлетамаҡ өйәҙенең көнсығыш улустары етештергән: Аҙнай, Ҡармыш, Петровск, Илсек-Тимер, Арыҫлан, шулай уҡ Бәләбәй өйәҙенең ҡайһы бер ауылдарында эшләгәндәр. Һырланған ҡамыт үрнәктәре 30-сы йылдар башында һүрәткә төшөрөп алған В.С. Сыромятников аша беҙгә килеп еткән. Һүрәт ярым овал булып ҡамыттың бөгөлгән йөҙөндә һәм ҡыҙарында урынлашҡан. Ул ҡамыттың ике яртыһын бер бөтөн итеп күрһәткән. Семәр йыш төшөрөлгән. Ҡайһы берҙә оҙонса уйымдар эшләнгән. Шулай уҡ оҙонса тырнаҡҡа оҡшаш соҡорсоҡтар, тура һәм кәкре һырҙар рәүешендәге семәрҙәр ҙә һалынған. Һүрәттә батман, ҡымыҙ һауыттары һәм башҡа һабаларҙа, эйәрҙәрҙә киң таралған кәкерсәк, арҡан, шыршы биҙәктәре асыҡ күренгән. Күберәк байрам (туй) егеү кәрәк-ярағы биҙәлгән. Был йола, бәлки, күрше халыҡтарға (фаразға ярашлы Ағиҙел арьяғына килеп ултырған татар-мишәрҙәр, типтәрҙәргә) оҡшатырға теләүҙән барлыҡҡа килгәндер ҙә, әммә башҡорт ағас оҫталарына таныш биҙәү алымдары ҡулланылған.



*Семәрле ҡамыттар. В.С. Сыромятников альбомынан. БХМ архивы*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# ТАРИХИ ДӨРӨҪЛӨКТӨ...

## ил Конституцияһы яҡлай!

**(Башы 3-сө биттә).**

Бында Салауат Юлаев образын миҫал итеп әйтеп китергә мөмкин. Ул СССР тарҡалған ваҡыттарҙан алып төрлөсә яла яғыуҙарға дусар ителә. Башҡорт һәм рус халҡы берҙәмлеген көүҙәләндергән был героик шәхесте хәҙер ошо ике халыҡты ҡапма-ҡаршы ҡуйыусы итеп күрһәтергә маташалар. Шул уҡ ваҡытта был интерпретацияларҙың айышына төшөнөү кәрәк, уны Салауат Юлаев образын боҙоп күрһәтеү өсөн файҙаланыуға юл ҡуйырға ярамай. Салауат Юлаев, асылда, халыҡтар дуҫлығын юғары баһалаған һәм уның үлемһеҙ образы бөгөн дә дөйөм граждандыҡ берҙәмлеген нығытыуға хеҙмәт итә".



Тарихсы, журналист, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Салауат Хәмиҙуллин иһә был ваҡиғаны абсурд һәм провокацион белдереү тип баһалай һәм уларға комментарий бирергә кәрәкмәй, ти. "Улар тап ошоно фекер алышыуға сығарыуға иҫәп тота һәм беҙ ирекһеҙҙән дөрөҫ булмаған мәғлүмәт һәм ғәйбәт таратыуҙа ҡатнашыусы булабыҙ. Әгәр ҙә кемгәлер был мәсьәлә ысынлап та ҡыҙыҡлы икән, уларға Башҡортостандың милли батыры Салауат Юлаев яҙған барлыҡ текстарҙы анализлаған Өфө тарихсыһы И.М. Гвоздикованың фундаменталь тикшеренеүҙәрен уҡырға кәрәк. Унда уның һорау алыуҙарҙа ниндәй күрһәтмәләр биргәне, кемгә һәм нимә тураһында хаттар яҙғаны ентекле яҙылған. Атап үтелгән "экскурсоводтар"ға килгәндә, улар үҙҙәренең наҙанлығы һәм компетентһыҙлығы менән тотош йәмғиәтте оятҡа ҡалдыра. Ул ғына ла түгел, уларҙың ғәмәлдәре билдәле "Уфагубъ" экстремистик төркөмө ысулдарын хәтерләтә. Әйткәндәй, мин үҙем шундай "белгестең" экскурсанттарға, Ағиҙел йылғаһы унда Бела исемле ҡыҙ батып үлгән өсөн Белая тип атала, тип һөйләгәненә шаһит булдым. Әгәр шундай экскурсоводтарға артабан да үҙ "эшмәкәрлектәрен" дауам итергә юл ҡуйғанда, республиканың һәм уның баш ҡалаһының ниндәй ыңғай имиджы тураһында һөйләргә мөмкин? Өфө ҡаланың иҫтәлекле урындарын белгән ысын эрудициялы белгестәргә эйә булырға лайыҡлы".

Әйткәндәй, 2003 йылда Башҡортостандан Палдискиға беренсе тапҡыр "Салауат эҙҙәре буйлап" журналистар экспедицияһы ойошторолдо. Уның составында төрлө милләт вәкилдәре булды. Тәғәйен урынға барып етеп, һәйкәлдең тирә-яғын байҡап, күҙҙәрҙән үҙенән-үҙе аҡҡан йәштәрҙе һөртөп тә өлгөрмәнек, эргәбеҙгә өлкәндәр ҙә, бала-саға ла йыйылып китте. "Ошо урындан үткән саҡта күҙ йәштәремде тыя алмайым, йөрәк һыҡтай. Рәхмәт, онотмай килеп, батырығыҙҙы хөрмәтләгәнгә", - тине бер урыҫ теле уҡытыусыһы. Ғөмүмән, кем менән генә һөйләшергә тура килмәһен, барыһы ла Салауат исемен оло хөрмәт менән телгә ала. Малай-шалай иһә: "Әлбиттә, Салауат Юлаевтың кем икәнен беләбеҙ. Ул - башҡорт халҡының милли геройы. Оккупанттарға ҡаршы көрәшкән. Мәктәптә беҙгә уҡытыусылар һөйләй", - тип эскерһеҙ яуаплай. Ҡандарында булған бойондороҡһоҙлоҡ йәш балаларҙа шулай сағыла - азатлыҡ, ғәҙеллек өсөн көрәште улар оккупанттарға ҡаршы көрәш тип ҡуҙаллай.

Ирҙәрҙең бер сәбәпһеҙ илағанын да мин ошонда күрҙем. Хәйер, унда сәбәп тә кәрәкмәй - Салауаттың һуңғы төйәге, әйтерһең дә, һәр кемде яңынан тыуҙыра - күҙ асып йомғансы икенсе кешегә әйләндерә. Күҙгә күренмәҫ энергия һәммәбеҙҙең йөрәге аша үтеп, беҙҙе бер бөтөнгә әүерелдерә. Юл буйына беҙҙе яҡлаусы, һаҡлаусы, терәк булған, бер һүҙһеҙ ярҙамға килгән ир-егеттәр ҙә күҙ йәштәрен йәшермәне. Иң сабыр, ҡаты кешеләр ҙә ҡараштарын күккә төбәне.... Палдискиға килгән юлда Салауатты "ул бит бандит булған" тип үҙ һүҙен бирергә теләмәгән журналистарҙың бәғзеләре лә кире Башҡортостанға юлланғанда уның тураһында фекерен тамырынан үҙгәрткәйне инде...

Бөгөн Башҡортостанда милли батырыбыҙ тирәләй ҡуйырған ялған һүҙҙәр ҡабат ошо мәлдәрҙе иҫкә төшөрҙө. Эйе, һәр кемде автобустарға тейәп, Салауаттың һәм уның көрәштәштәренең Рогервикка тиклем йәйәүләп үткән юлынан алып йөрөү мөмкин түгел, әммә тарихи ысынбарлыҡты белеү өсөн уларға тарихсылар яҙып ҡалдырған китаптарҙы уҡып сығыу ҙа ҡамасауламаҫ ине. Икенсе яҡтан, ирекһеҙҙән шундай һорау тыуа: ни өсөн Башҡортостанда башҡорттар ауыҙынан башҡа милләттәр тураһында ниндәйҙер насар һүҙ сыҡһа, шунда уҡ мәсьәлә юридик ысулдар менән, хоҡуҡ һаҡлау органдары ҡатнашлығында хәл ителә, ә, киреһенсә, башҡа милләттәр башҡорттарға, ул ғына ла түгел, республиканың дәүләт атрибутикаһында урын алған шәхескә ҡағылышлы, тимәк, дәүләт атрибутикаһына ҡарата бысраҡлыҡ таратһа һәм аҫтыртын ҡотҡо эшмәкәрлеген алып барып, ҡау аҫтына ут төрткәндә лә иҫкәртеү менән генә сикләнелә. Тарихсы Салауат Хәмиҙуллиндың фекере менән дә килешергә мөмкин: ҡотҡосоларҙың провокацияһына бирелмәҫкә! Әммә заманында ғәҙеллек өсөн көрәшкән милли батырыбыҙ Салауаттың исемен бысратыусылар ҙа ғәҙел яҙаһын алырға тейештер, моғайын. Юҡһа, башҡалар ҡурҡһын өсөн үҙеңдекеләрҙе туҡма, тигән кеүек килеп сыға.

**Өсөнсөнән, яңы үҙгәрештәр менән ҡабул ителгән Төп Законда тарихи дөрөҫлөктө һаҡлауҙы тәьмин итеү тураһында статья барлыҡҡа килде. Ул, моғайын да, Рәсәйҙә йәшәгән барлыҡ халыҡтарҙың да тарихын боҙоп күрһәтеүгә, шул иҫәптән дәүләт символында урын алған шәхестәрҙең исеме бысратылыуына юл ҡуймауҙы күҙаллайҙыр һәм гарантиялайҙыр. Шулай тип ышанайыҡ.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*СӘХИФӘНӘН*

# УҠЫТЫУСЫ ӘЙТКӘНЕ



**Белем биреү системаһында эшләү дәүерендә ҙур һығымталар яһарлыҡ хеҙмәт юлы үтелде. Совет мәктәбенең ыңғай тәжрибәһен юҡ итеп, урынына ышанысһыҙ нигеҙгә яҙа-йоҙа төҙөлгән системаға килеп терәлдек.**

Бик күп үҙгәртеүҙәр, реформалар алға һөрөлдө - күбеһенең бер фәтеүәһе лә булманы. Мин инҡар итеүсе түгел, һәр нәмәнең ыңғай яғын күрергә тырышам. Иллә-мәгәр яҡшы яҡтарынан телгә алырлыҡ факттар бик әҙ.

Тура ултырып, ҡырын һөйләп булмай, күп үҙгәрештәр артында мәктәп ишегенең ҡайһы яҡтан асылғанын да белмәгән белгестәр торалыр, тип уйлайым. Әгәр ҙә улай булмаһа, тимәк, бында аҡса эшләүселәр йәки емертеүселәр ҡулы уйнай инде.

Ул үҙгәрештәрҙең иң насары - БДИ. Берҙәм дәүләт имтихандары индерелгәндән бирле балалар китап уҡымай, шуның һөҙөмтәһендә хаталы яҙа башланы, уйламаҫҡа, ишетмәҫкә өйрәнде, әҙер яуапты эҙләп алырға ҡулайлашты, фекер ҡеүәһе һайыҡты - биороботтар әүәләү процесы шәп бара.

Флаг тотоп, алдан сапҡандар ғына быны аңламайҙыр.

Мәҫәлән, рус әҙәбиәтен уҡытҡан уҡытыусы килешер: әлеге мәлдә ҡулланған дәреслектәрҙең күбеһе балалар уҡымаһын, әҙәбиәтте яратмаһын өсөн төҙөлгән һымаҡ булып китә. Беренсенән, дәреслектәр дөрөҫ төҙөлмәгән, икенсенән, иҫ китмәле ҡатмарлы тел менән яҙылған, уны бала аңламайынса уҡығансы уҡымай ҙа ҡуя. Был бигерәк тә 9-11-се кластарҙа шулай.

Авторҙар һайлап алған әҫәрҙәрҙең бөтәһе лә уҡыусыларҙы тәрбиәләй тип әйтеүе бик ауыр. Мәҫәлән, Буниндың "Кавказ" хикәйәһе. Унда бер йәш кенә ҡатындың ире өҫтөнән йөрөп, көньяҡта һөйәре менән ял итеүе тураһында яҙыла. Ире (офицер) атылып үлә. Ошо әҫәрҙе уҡыған бала ниндәй фәһем ала? 9-сы класта ошондай хикәйә программаға инергә тейешме? Әле мөхәббәтте бөтә матурлығында, яҡтылығында татып өлгөрмәгән бала күңеле ошо әҫәрҙе ҡабул итеүгә әҙер түгел бит... Мин уҡытыусы булараҡ та, әсәй булараҡ та, ҡатын-ҡыҙ булараҡ та шуны аңлай алмайым. Был әҫәр буйынса балалар менән әңгәмә ауыр бара. Эйе, тәү ҡарашҡа тоғролоҡҡа өндәгән әҫәр кеүек, ләкин 9-сы класс өсөн бармай был хикәйә. Татьяна Ларина, Мария Кирилловна - бына улар өлгө!

Ә бүтән илдәрҙә беҙҙә күптән программанан алып ташланған "Как закалялась сталь" әҫәрен уҡыталар... Шунан уйла инде...

**Ләлә РАФИҠОВА.**

✓ *Популяцион генетик тикшеренеүҙәр хәҙерге Рязань өлкәһенең Бастан ауылы мишәрҙәренең һәм Башҡортостандың Ҡариҙел районы Байҡыбаш ауылы башҡорттарының генетик маркеры бер үк икәнен күрһәтте.*

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БЕҘ - ҠАРШЫНДАР, ЯУГИР ЗАТЛЫ БАШҠОРТБОҘ

Тимәк, "ҡаршын" этнонимының боронғо төркиҙәрҙең "карши" һүҙенән исем яһаусы -н суффиксы ҡушылып яһалған булыуы ысынбарлыҡҡа тап килә, тип иҫәпләп була.

Шулай ҙа ҡаршын этнонимының этимологияһын башҡаса аңлатыусы фараз да бар. Ҡайһы бер документтарҙа ошо олоҫ русса "Карашинская волость" тип теркәлә. Был осраҡта ошо этнонимдың "кара" һәм "шоно" ("шино") һүҙҙәренән хасил булыуы фаразлана. Әлбиттә, монгол телле ҡәүемдәрҙә төрләсәрәк яңғыраған "шоно-шино-шуно-шуна" һүҙҙәре төркисә бүре тигәнде аңлата. Тимәк, ошо фаразға ярашлы, ҡар(а)шын этнонимының "кара бүре" мәғәнәһендә барлыҡҡа килеүе мөмкин. Бында заманында ҡытай хроникаларында Төрки ҡағанатының хакимлыҡ итеүсе династияһы вәкилдәренең үҙҙәрен "Ашина", йәғни бүре нәҫеленән булыуҙары хаҡында белдереүе иҫкә алына. Шуныһы ҡыҙыҡлы, 1740 йылғы башҡорт ихтилалының Ҡараһаҡал тип аталып йөрөтөлгән етәксеһен ҡаҙаҡ һәм ҡалмыҡ далаларында Шуна батыр, йәғни, Бүре баһадир, тип беләләр.

Ҡаршын ырыуының Көньяҡ Урал территорияһына килеп етеп, бында инде күп быуаттар буйына йәшәгән башҡа башҡорт ырыуҙарына ҡушылыуы хаҡында теүәл мәғлүмәттәр ҡалмаған. Билдәле ғалим-этнограф, академик Р.Г. Кузеев ҡаршындарҙың Тарихи Башҡортостан ерлегенә килеүе хаҡында ошолай яҙған: "Этник тарих планында монгол яуы тап ҡыпсаҡ миграцион тулҡынының (ҡыпсаҡ-туҡсаба, сәнкем, ҡарый-ҡыпсаҡ, бошман, ҡаңлы, ҡаршын, ҡырғыҙ һәм башҡалар) ныҡ көсәйеүенә һәм башҡорттарҙың этник билдәләре формалашыуының тамамланыуына килтерә". Тимәк, Кузеевса, ҡаршындар ҙа заманында Бөйөк Дәште Ҡыпсаҡ далаһында өҫтөнлөк иткән ҡыпсаҡ ҡәбиләләренең береһе булып, XIII быуатта монголдар тарафынан Көньяҡ Уралғаса ҡыҫырыҡлап сығарыла.

Билдәле тарихи сығанаҡтарҙа VIII - XII быуаттарҙа уҡ боронғо башҡорт ырыу-ҡәбиләләренең әле йәшәгән ерҙәрендә көн итеүе хаҡында мәғлүмәттәр теркәлеп ҡалған. Монгол баҫҡынсылығы башланмаҫтан алдараҡ, XIII быуат башына тиклем Башҡорт иленең үҙ хакимдары булыуы хаҡында ла мәғлүмәт бар. 1320 йылда мадъяр-венгрҙарҙың боронғо ватанын, уларға ҡәрҙәш булған ҡәүемдәрҙе эҙләп килгән францисҡан монахы Иоганка Венгр, ул яҙғанса, "бөтөн Баскардия хакимы" менән осраша, әммә уны һәм уның халҡын, "сарациндар" (йәғни, ғәрәптәр) динен үҙ итеүе ("сарацинское заблуждение") арҡаһында христианлыҡҡа инандырыу мөмкинлеге булмауы хаҡында Венгрия короленә хәбәр итә.



Күрәһең, барса Евразия ҡитғаһын тетрәткән монгол яулап алыу экспансияһы осоронда башҡорттар, байтаҡ ҡына ваҡыт монгол ғәскәренә ҡаршылыҡ күрһәтеп, баҫҡынсыларҙың уларға ҡарата ихтирамына һәм юғары яугирлыҡ баһаһына лайыҡ була. Батырлыҡ яуҙа һынала, быны Сыңғыҙхан Урҙаһында яҡшы аңлайҙар. Монгол ғәскәренә лә тап ошондай ҡурҡыу белмәҫ яугирҙар талап ителә: һөҙөмтәлә Башҡорт иле Бөйөк хандың союздашы булып китә. Был хаҡта боронғо башҡорт риүәйәттәренән булған "Дәфтәр-и Сыңғыҙнамә" тәүарихында туранантура белдерелә.

Башҡорт тарихының һуңғы Урта быуаттары осоронда (XIII - XVI бб) Башҡорт иленең эске ижтимағи ҡоролошо ныҡ үҙгәрә: Алтын Урҙа хандары менән булған килешеүҙәргә ярашлы, власть вертикале урынына ырыу-ҡәбилә демократияһына хас булған горизонталь үҙидаралыҡ системаһы урынлаша. Барса башҡорт ырыуҙары, билдәле бер үҙаллылыҡҡа эйә булып, үҙҙәренең эске тормошо, ырыу халҡы менән идаралыҡ итеүҙе демократик рәүештә - ырыу йыйындарында, абруйлы ырыу башлыҡтарының ҡулы аҫтында башҡара. Әлбиттә, номиналь форматта улар Алтын Урҙа дәүләтенең вассалдары булып, Бөйөк хан власын танып һәм уға хеҙмәт итә - был яугир халыҡтарға хас феномен.

Алтын Урҙа һәм уның айырым ханлыҡтары осоронда - XIII быуат урталарынан XVI быуат урталарына тиклем ҡәҙимге малсылыҡ һәм башҡа хужалыҡ итеү мәшәҡәттәренән азат булған башҡорт яугирҙары чингизид хандарына, нуғай бейҙәренә, ә һуңынан рус батшаларына лә хәрби хеҙмәткә ялланып көн күрә. Әйтергә кәрәк, йорт-ҡөлгә һаҡлаусы, яу сабыусы ғәскәрҙә хеҙмәт итеүсе нөкәрҙәр ул замандарҙа ла ханбатшаларҙың ҡурсалауына һәм хеҙмәттәре өсөн төрлө привилегия-өҫтөнлөккә лайыҡ була. Шуға күрә XV - XVI быуаттарҙа башҡорт ирегеттәре, тарханлыҡ дәрәжәһенә эйә булған яу башлыҡтары менән бер рәттән, Себер, Ҡаҙан, Ҡасимов һәм хатта Үзбәк ханлыҡтары ғәскәрҙәренә хәрби хеҙмәткә яллана. Уларҙың иң күренеклеләре хандарҙан тарханлыҡ ярлығын ала. Мәҫәлән, XVI быуат башына ҡараған "Таварих-и гузида-и нусрат-наме" әҫәрендә Үзбәк ханы, чингизид Мөхәммәт Шейбани армияһының башҡорт отрядында хеҙмәт итеүсе яугирҙар хаҡында мәғлүмәт бар: "...из башгирдов Чингиз-бахадур и Чалбаш-бахадур".

Ҡаршын ырыуы башҡорттарының Ҡасимов ханлығында хеҙмәттә булыуы хаҡында ла тарихи документ булыуы билдәле. Батша Василий Шуйский тарафынан 1608 йылда кенәз Аҡсурингә бирелгән грамотала уға Ҡаршын бейлегендә йәшәүсе, яһаҡ түләүсе мордва кешеләре менән идара итеү хоҡуғы биреләүе хаҡында яҙылған: "...за службу и раденье вымороченым княж Акчуриным княженьем Караева над мордвою Кершинского беляка судом и пошлинами". Аксура кенәз хәрби хеҙмәттәре өсөн шулай уҡ Ирәкте бейлегендә йәшәүсе мордва һәм можеряндар (мишәрҙәр) өҫтөнән хакимлыҡ итеү хоҡуғына лайыҡ була.

Был осраҡта Балыҡсы, Ирәкте, Ҡаршын башҡорттарының, ҡәҙимге башҡорт хужалығы эштәренән айырылып тороп, ғәскәри хеҙмәт менән көн итеүҙәре уларҙың ырыу йола-ҡанундарын быуаттар буйына үтәп килеүенә бер дәлил булып торалыр. Олоҫ бүленеше индерелгән административ система индерелгәнгә тиклем айырым башҡорт ерҙәрен рус чиновниктары бейлек йәиһә кенәзлек, тип атаған. Был ерҙәрҙә Урҙа заманынан бирле урындағы легитим власҡа эйә булған башҡорт кенәздәре, тархандары һәм мырҙалары хакимлыҡ иткән. Шуныһы ла мөһим, ул дәүерҙә мордва, черемис (сирмеш - мари), сыуаш кеүек яһаҡ түләүсе ваҡ ғыраҡ ҡәүемдәр башҡорт кенәздәренә буйһондоролған була.

Рус йылъяҙмаларында һәм батша Рәсәйе заманына ҡараған башҡа тарихи документтарҙа можеряндар ҙа телгә алына, улар ысынбарлыҡта рустар Ока йылғаһы буйындағы Мещера тип атаған өлкәлә көн иткән мишәр халҡын тәшкил итә. Ҡайһы бер тикшеренеүселәр мишәр этнонимын йөрөткән боронғо ҡәүемдең фин-уғыр сығышлы булып, монгол-татар яуы замандарынан төркиләшеп китеп, төрки халыҡтары составына ҡушылып китеүе хаҡында фараз итә. Бында мишәр - мажар - мадъяр этнонимдарының тамырҙаш булыуына ла иғтибар итмәй булмай.Ә шул уҡ мишәрҙәрҙең тарихта киң билдәле Ҡасимов ханлығында Башҡорт иленән килгән яугирҙарҙың оҙаҡ йылдар дауамында хәрби хеҙмәттә булыуы ла билдәле. Шуныһы ҡыҙыҡлы, популяцион генетик тикшеренеүҙәр (геногеография) һөҙөмтәһендә, мәҫәлән, хәҙерге Рязань өлкәһенең Бастан ауылы мишәрҙәренең һәм Башҡортостандың Ҡариҙел районы Байҡыбаш ауылы башҡорттарының ир заттары буйынса генетик маркеры бер үк R1a-M198 гаплотөркөмөнә ҡарай икән. Был гаплотөркөм шулай уҡ Ирәкте, Танып, Уллар олоҫтары башҡорттары вариҫтары өсөн дә уртаҡ булып тора. Бынан бер генә һығымтаға килергә була - ҡайһы бер мишәр һәм башҡорт этник төркөмдәренә ҡараған ҡәүемдәр бер үк ата-бабаларҙан таралып китеп, генетик яҡтан ҡан-ҡәрҙәш булып сыға.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 39-сы һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

Чернухино станцияһы өсөн барған алыштарҙа дошман частары ҙур юғалтыуҙарға дусар була. Беҙҙең атлылар немецтарҙың 6 танкыһын, 4 үҙйөрөшлө орудиеһын, 1 000-дән ашыу һалдат һәм офицерын сафтан сығара. Немец командованиеһы 8-се корпусҡа ҡаршы үҙенең 17-се танк дивизияһын йәлеп итергә мәжбүр була.

Юғары Баш командование Ставкаһы 8-се атлы корпустың Донбастағы рейд барышындағы уңыштарына оло баһа бирә: корпусҡа гвардия званиеһы бирелә һәм ул артабан 7-се атлы гвардия корпусы, тип атала башлай. Корпус частарының да нумерацияһы үҙгәрә: 21-се атлы дивизия 14-се атлы гвардия дивизияһы, 55-се дивизия - 15-се атлы гвардия дивизияһы, ә 112-се Башҡорт дивизияһы 16-сы атлы гвардия дивизияһы тип үҙгәртелә. Дошман тылында, туҡтауһыҙ барған алыш-бәрелеш шарттарына ҡарамайынса, корпус частарында митингылар, йыйылыштар уҙғарыла. Ставка вәкиле, Ҡыҙыл Армияның кавалерия баш командующийы урынбаҫары, генерал-полковник Ока Иванович Городовиков (тыумышы менән ҡалмыҡтарҙан) ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитетына һәм республика хөкүмәтенә ҡотлау телеграммаһы ебәреп, Башҡорт атлы дивизияһының дошман менән ҡаты алыштарҙа башҡорт халҡының ышанысын аҡлауы хаҡында хәбәр итә.

7-се атлы гвардия корпусы частары дошман позицияларына һөжүмен дауам итә, әммә алға табан барыу үтә ҡатмарлаша: беҙҙең атлыларға немецтарҙың 17-се танк дивизияһы, айырым пехота дивизиялары ҡаршы тора. Корпус оборонаға күсергә мәжбүр була.

15 февралдә иртән беҙҙең дивизияның 60-сы атлы гвардия полкы Дебальцево станцияһының көньяҡ ситендә оборона рубежын биләй, ә 62-се кавполк Дебальцево йүнәлешендәге тимер юлы буйында дошман һөжүмен кире ҡаға. 60-сы гвардия полкы яугирҙарына Дебальцево - Артемовск тимер юлы полотноһын 10 саҡрым аралығында һүтеп ташлап, был юлдағы күперҙәрҙе шартлатырға бойорола.

М.С. Докучаевтың "В бой шли эскадроны" исемле китабында иҫән ҡалған яугирҙарҙың ошо хәтәр алыштар хаҡындағы хәтирәләренән бик ҡыҙыҡлы бер ваҡиға ла иҫкә алына. 16 февралдә Чернухино поселогы өҫтөнән осоп үткән немец самолеттарынан беҙҙең позицияларға листовкалар ташлайҙар. Унда фельдмаршал Манштейндың "Дон" армия төркөмө командованиеһының совет һалдаттарына мөрәжәғәте баҫылған була: "Үҙегеҙҙең тар-мар ителеүегеҙҙе гвардиясы исемен алыуығыҙ менән йәшерергә теләйһегеҙ. Килеп сыҡмаҫ. Беҙ һеҙҙе ҡырып бөтөрәсәкбеҙ. Ҡоралығыҙҙы һалырға һәм ҡаршылыҡ күрһәтеүҙе туҡтатырға тәҡдим итәбеҙ..." Әммә беҙҙең яугирҙарыбыҙ, дошманға ҡарата булған оло нәфрәтен һис кәметмәйенсә, тиңһеҙ алышын дауам итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

***✓ Кеше еңел тормошҡа тиҙ өйрәнә һәм физик көс талап иткән мәшәҡәттәрҙән ҡотолорға тырыша. Хәҙер бит хатта ауыл ерендә лә еңелгә күсергә тырышалар. Мәҫәлән, картуфты сәсеп үҫтергәнсе уны һатып алалар.***



**Ғаилә ҡороу Әҙәм балалары өсөн, бер яҡтан, ихтыяж булһа, икенсе яҡтан, бик яуаплы бурыс та. Әлбиттә, осорона күрә ғаилә ҡороу шарттары, мөмкинлектәре төрлөсә була. Шуныһы бик мөһим: замана йәштәре өлгө булырҙай оло быуын кешеләренең ғаилә ҡороу тәртибенә ҡолаҡ һалырға, уларҙың тәжрибәһен өйрәнергә тейеш. Тәбиғәт биргән дөрөҫ юлдан яҙлыҡмаҫ өсөн. Хаталар яһамаҫ өсөн. Ни тиһәң дә, тормош бит кешегә хаталарҙы төҙәтер өсөн түгел, уларҙы булдырмаҫ өсөн бирелгән. Сибай ҡалаһында йәшәүсе Венера Әнүәр ҡыҙы һәм Шаймorat Ҡотлоғужа улы ЙӘНБӘКОВтарҙың ғаилә мәктәбе күптәр өсөн үрнәк булырҙай. Уларҙың фекерҙәренә, һүҙҙәренә ҡолаҡ һалайыҡ.**

# АУЫЛДЫ ҠАЛАҒА КҮСЕРЕҮСЕЛӘР

**Танышыуҙы тыуған яғығыҙҙан, бала саҡ хәтирәләренән, ҡыҫҡаса тормош юлығыҙҙан, ҡасан, нисек осрашыуығыҙҙан башлайыҡ әле...**

**Шаймorat ағай:** Мин 1949 йылда Баймаҡ районының Ишмырҙа ауылында тыуғанмын. Ғаиләлә алты бала үҫтек: дүрт ҡыҙ ҙа ике малай. Ҡустым Әсғәт Йәнбәковты, Башҡортостандың халыҡ артисын, яҡшы беләһегеҙҙер. Ул - артист, ҡурайсы, гармунсы, баянсы булды. Атайым билдәле ҡурайсы булғас, мин дә йәштән үк ҡурайҙа ҡыжҡылдатып уйнарға өйрәнеп алдым. Тормошта бит һәр кемдең төп эшенән тыш, ниндәйҙер тағы ла бер һөнәре булырға тейеш. Ауыл мәктәбендә уҡытыусы ла булдым. Ситтән тороп Өфө китапхана техникумын тамамлағас, Сибайға күскәнсе Баймаҡ районы китапхана системаһында эшләнем. Сибайға килгәс, гимназия-интернатҡа эшкә урынлашып, хаҡлы ялға сыҡтым, унан һуң тағы ун бер йыл эшләнем.

Ауыл хужалығы техникумында икенсе курста уҡып йөрөгәндә бейеү ансамбленә яҙылдым. Мәҙәниәт йортона репетицияларға йөрөй торғайныҡ. Бер көндө иптәш ҡыҙым менән әлеге мәҙәниәт йортонан сығып килһәк, Шаймorat иптәш егете менән беҙҙе тупһала көтөп тора. Баҡтиһәң, ул ошонда ҡурай түңәрәгенә йөрөй икән. 1966 йылдың октябрь баштары совхозының Яманһаҙ бүлексәһе фермаһы зоотехнигы булып эшләй башланым. Тәүге тормош усағыбыҙ совхоз биргән өйҙә башланды. Ул өйҙө беҙ баштан уҡ матур итеп йыйыштырып, биҙәп йәшәргә тырыштыҡ. Ете йыл йәшәнек беҙ ул өйҙә. Үҙебеҙҙең колхоз рәйесе Хисмәтуллин Фирғәт Хәмит улы: "Һин ни эшләп үҙеңдең ауылыңа ярҙам итмәй, совхозды күтәреп йөрөйһөң", - тип, төрлө вәғәҙәләр биреп, тыуған яҡҡа кире ҡайтарып алды. Колхоз өр-яңы өй бирҙе. Өс йыл эсендә райондағы иң арттағы фермаларҙың береһен иң алдынғылар рәтенә сығарҙыҡ. Вәғәҙә буйынса сираттан тыш машина һатып алырға мөмкинлек бирҙеләр. Фирғәт Хәмит наҡ саҡырғанда етешмәгән һауыт-һабаны күрше-күләндән алып тора инек. Үҙ донъябыҙҙы төҙәтә торғас, хәҙер һауыт-һабаһы ла, башҡаһы ла етерлек. Өләсәйемдән, унан һуң әсәйемдән ҡалған кейеҙ әле булһа ла бар. Беҙҙең Әбйәлилдә кейеҙҙе эсләп эшләгәндәр: уның бер яғында балаҫ булһа, икенсе яғында - кейеҙ. Ул шул тиклем йылы, аллергия ла юҡ унан. Өләсәйемдең, әсәйемдең йылыһы килеп торған кейек тоям. Шулай уҡ өләсәйемдән ҡалған теген машинаһын да һаҡлайым. Әле лә ул төрлө әйберҙәр тегеүгә бик тә ҡулай. Уны ҡыҙыма инселәп ҡуйғанмын. Ул уны ярата, кәрәк саҡта ҡуллана ла. Ул - ҡомартҡы, иҫтәлек! Өләсәйем ошо машинала ваҡытында толоптар теккән хатта.

**Ауылдан ҡалаға күсеү ауыр булманымы?**

**Шаймorat ағай:** Ҡалаға күскәндә үҙебеҙ менән алып килгән ике һыйырҙы, ваҡ малды, ҡош-ҡортто тиҫтәнән ашыу йыл ҡараныҡ әле. Бер беҙҙә һыу буйынса, милли ризыҡтар буйынса кәңәштәр бирәм. Балаларыбыҙ ҙа беҙҙән күрмәксе ауыл холоҡлолар. Улыбыҙ ҙа Өфөнән ситтә үҙ йортон төҙөй.

**Шаймorat ағай:** Хәлдән килгәнсе тырышып йәшәйбеҙ. Венера әлеге көндә Сибай ҡалаһының "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы етәксеһе. Уға хәлемдән килгәнсе ярҙам итергә тырышам. Ярты быуаттан ашыу бергә йәшәп, бер-беребеҙҙе ярты һүҙҙән аңлап өйрәнгәнбеҙ. Төрлө сараларҙа, конкурстарҙа әүҙем ҡатнашабыҙ. Халҡыбыҙҙың милли кейемдәрен, ашһыуын, ғөрөф-ғәҙәттәрен пропагандалайбыҙ.

**Венера апай:** Быйыл беҙҙең ғаилә республиканың "Башҡорт ғаиләһе" конкурсында икенсе урын яулап, илле меңлек сертификат алдыҡ.

**Шаймorat ағай:** Кеше еңел тормошҡа тиҙ өйрәнә һәм физик көс талап иткән мәшәҡәттәрҙән ҡотолорға тырыша. Хәҙер бит хатта ауыл ерендә лә еңелгә күсергә тырышалар. Мәҫәлән, картуфты сәсеп үҫтергәнсе уны һатып алыуы еңелерәк тип уйлаусылар күбәйә бара. Ауыл менән бәйләнеште өҙмәйбеҙ. Атай-әсәйебеҙҙең ҡәберҙәре ауыл зыяратында. Уларҙың ҡәберҙәрен тәрбиәләп торабыҙ. 2015 йылда Ишмырҙа ауылында Йәнбәковтарҙың ҙур шәжәрә байрамын үткәрҙек. Ете тирмәбендә һигеҙҙе бөтөп, ауыл хужалығы техникумына уҡырға барҙым, 1968 йылда зоотехник һөнәре алып, әрме сафтарында йөрөп ҡайтҡандан һуң, башта колхозда, аҙаҡ совхозда урта етәкселәр рәтендә эшләргә тура килде. Бригадир, ферма мөдире, бүлексә етәксеһе булдым. Баймаҡ районының иң ҙур һарыҡ комплексының начальнигы ла булырға тура килде. Сибай һөт-консерва комбинатында тәьминәт бүлеге етәксеһе булып эшләгәндән һуң, колхоз-совхоздар тарҡалыу сәбәпле, егерме йыл хаҡлы ялға сыҡҡансы Сибай үҙәк ҡала дауаханаһында баш врачтың техника буйынса урынбаҫары булдым. Аллаһҡа шөкөр, 71 йәшемә тиклем эшләнем. Етәксе урындарҙа эшләгәс, замана сирҙәренән ситтә булдым, алама ғәҙәттәр урап үтте. Беҙгә, совет осоронда тәрбиәләнеп, шул осорҙа эшләгәндәргә, хәҙерге тормоштоң тик табыш алыуға ҡоролоуы ят күренеш. "Кеше кешегә дуҫ, иптәш һәм туған", тигән ҡиммәттәр юҡҡа сығыуы күңелгә һис тә ятмай. Беҙҙең быуынды яңы ҡиммәттәр үҙенә ылыҡтырмай ҙа.

**Венера апай:** Минең бала сағым Әбйәлил районының Хәлил ауылында үтте. 1948 йылда уҡытыусылар ғаиләһендә тыуғанмын. Ғаиләләге һигеҙ баланың, Аллаһҡа шөкөр, алтыбыҙ иҫән, ике ағайыбыҙҙы юғалттыҡ. Ауылда һигеҙ йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Урал урта мәктәбен тамамланым, шунан Сибайҙағы ауыл хужалығы техникумына уҡырға индем. Уны бөтөргәс, зоотехник булып эшләнем. Сепаратор бүлеге начальнигы ла булдым. Мәктәптә уҡытыусылар етешмәү сәбәпле, Йылайыр районы Яманһаҙ ине. Ул ваҡыттағы мода буйынса киң балаҡлы салбар кейгән. Аҡ күлдәктә, ҡара костюмда. Яланбаш. Мин уны беренсе күреүҙән үк күңелгә яҡын иттем. Ошо осрашыуҙан һуң бер йылдан өйләнештек.

**Шаймorat ағай:** Күрәһең, был осрашыу осраҡлы булмағандыр инде. Ул ваҡытта бит йәштәр араһындағы мөнәсәбәттәр шул тиклем дуҫтарса йылы була торғайны. Таныш булмаған ят кешеләргә лә беҙ шул яҡынлыҡ күҙлегенән сығып ҡарай инек. Венераға ла түңәрәккә йөрөй башлағас уҡ иғтибар иттем. Тупһала Рәүил дуҫым менән бушҡа көтөп торманыҡ, әлбиттә, танышыу, аралашыу ине төп уйыбыҙ. Ул саҡта йәштәр өсөн төрлө аралашыу саралары йыш үткәрелә торғайны. Ритайымдар әле модала түгел, күберәге вальс бейеү, сәхнәнән сығыш яһауҙар күңелгә яҡын була торғайны. Венераны мин яҙмыш бүләге тип ҡабул иттем, әле лә шул уйҙамын. Күптән түгел курсташтар осрашыуында бер иптәшебеҙ бик сәйер итеп: "Һин бәхетле, Венера менән күптәр танышырға теләй ине", - тип әйтеп һалды әле...

**Ғаилә төшөнсәһен өйһөҙ, баш өҫтөндәге ҡыйыҡһыҙ күҙ алдына килтереп булмай. Был мәсьәләне ул саҡта нисек хәл иттегеҙ?**

**Шаймorat ағай:** Әрменән ҡайтҡас, эргәләге Юлдыбай улын билдәле "Ирәндек" совхозына тәғәйенләгәйнеләр, ул мине лә саҡырҙы. Райондағы иң ҙур һарыҡ комплексы булған Әхмәр ауылына күсеп барҙыҡ. Тағы ла йәшәү өсөн өй биреледе. Ул өйгә лә йән өрҙөк. Шунда йәшәгән саҡта уйлай башланым: "Тыуған ауылда туғандар ҡалманы, гелән сиған һымаҡ бер урындан икенсе урынға күсенеп йөрөп булмаҫ". Әйтәләр бит, ҡырҡ йәштән һуң ир кеше шәхси йорто тураһында уйлана башлай, тип. 1994 йылдан Сибайҙа үҙебеҙҙең шәхси йортобоҙҙо һалып йәшәй башланыҡ. Дөрөҫ эшләгәнбеҙҙер, тим, илдә ҡыйралыш китте, колхоз-совхоздар тарҡалды. Беҙ ул бәхетһеҙлектәрҙән алда үҙ йүнебеҙҙе күреп өлгөрҙөк һәм әле тыныс йәшәйбеҙ.

**Венера апай:** Өйҙө мин һәр ваҡыт бөтөн күңелемде һалып матурларға, йүнәтергә тырышам - ғаиләм матур шарттарҙа йәшәһен. Килеп ингәндә өй балҡып, үҙенә тартып торорға тейеш. Шуға ла өй тигәндәр бит: өйәһең дә өйәһең, берен эшләп бөтөүгә икенсеһенә тотонорға кәрәк. Мәҫәлән, тәҙрә ҡорғандарын ике-өс йылға бер алыштырып тормаһаң, күңел булмай. Күпме күсенеп йөрөһәң дә, һауыт-һабаң, хужалыҡ өсөн кәрәк булған бөтөн нәмә үҙең менән ҡуша йөрөй. Берәй магазинға инһәң, күңелгә оҡшаған берәй һауыт-һабаны алғы ғына килеп тора. Элек ҡугенә түгел, Сибайҙың был осонда бер көтөү мал була торғайны. Ҡалаға күсһәк тә ауылды үҙебеҙ менән ҡуша алып килдек. Супермаркеттар аҙыҡ-түлек менән тулғас, хәҙер тоҡомлоҡ та ҡалманы, мал-тыуар, ҡош-ҡорт юҡҡа сыҡты.

**Венера апай:** Башта ҡала ерлегенә нисек итеп берегеп китербеҙ, тигән шик булды, әлбиттә. Ауылды бер ҙә генә лә ташлап китке килмәне. Бала саҡтан ауылға өйрәнелгән бит, әммә иремдең һүҙен йығырға ярамай. Мал менән ҡуша күскәс, өйрәнеп китеүе ҡыйын булманы. Йайлап өйрәндек: эше лә барҙы, хужалыҡҡа ла өлгөрҙөк. Шул уҡ ваҡытта өй эргәһендә лә, ҡаланан ситтә лә баҡсабыҙ булды. Әле лә бар. Быйыл да мул уңыш йыйып алдыҡ. Магазиндағы емеш-еләк, йәшелсәгә ымһынып та тормайбыҙ. Шәхси йорттарҙа йәшәгәс, күрше-күлән менән аралашып, ҡатнашып донъя көтәбеҙ. Күрше хаҡы Тәңре хаҡы, тип, аяттарға саҡырышабыҙ. Ҡалала йәшәһәк тә, мәҫәлән, мин үҙемде һаман да ауыл кешеһе һымаҡ тоям. Бында йәшәй башлағас, күрше тирәләге ҡатын-ҡыҙҙарҙы саҡырып алдым. Шулай итеп таныш булмаған кешеләр үҙ-ара танышып киттек. Бер милләт кешеләре булыуыбыҙ ҙа быға булышлыҡ итә. Башта урамыбыҙҙа һыу ҙа, газ да үткәрелмәгәйне. Күмәкләп, бергәләп ҡатнашып, бер-беребеҙгә ярҙам итештек. Бигерәк тә ашҡорҙоҡ, ете ҡорбан салдыҡ. Ауыл алдында булған үҙ бурысыбыҙҙы атҡарҙыҡ. Баҡһаң, ярты ауыл кешеһе бер арананбыҙ. Йәнбәк олатайҙан таралған Әфләтүновтар, Иҫәндәүләтовтар, Үҙәкиндәр - бер тоҡомдан булып сыҡтыҡ. Өфөгә барған һайын Башҡортостан архивынан, ЗАГС-тан материалдар йыйҙым. Материалдар алыуы ла ул осорҙа еңелерәк ине, әле шәжәрә байрамдары үткәрелмәй ҙә торғайны. Хәләл ефетемә рәхмәт, күп кенә ойоштороу мәсьәләләрен ул тиҙләтте.

**Тормош тәжрибәгеҙҙән сығып, йәштәргә, бигерәк тә йәш ғаиләләргә ниндәй кәңәштәр бирер инегеҙ?**

**Шаймorat ағай:** Нисек кенә булмаһын, хәҙер йәштәргә иң тәүҙә белем алырға тырышырға һәм эшләргә йыбанмаҫҡа кәрәк. Беҙ, совет осоронда тәрбиәләнгәндәр, шулай фекер йөрөтәбеҙ. Беҙ эштән бер ваҡытта ла ауырһынманыҡ, хатта йырлап йөрөп эшләнек. Шулай булырға тейеш тип ҡабул итә инек. Эш хаҡы беренсе урында булманы. Уға иҫебеҙ ҙә китмәй торғайны. Табыш алыу тигән төшөнсәне бөтөнләй белмәй инек. Хәҙер төрлө санкцияларына ҡушып, белемле йәштәрҙе лә тыуған иленән ситләштерәләр, үҙҙәренә ылыҡтырырға тырышалар, юғары эш хаҡы менән ымһындыралар. Тормошта уңышлы йәшәү өсөн белемле булыуҙан тыш, үҙ илең-

✓ *Телевизорҙан бының киреһен күрһәтәләр. Еңел генә өйләнешәләр, еңел генә айырылышалар. Әйтерһең дә, тик шулай булырға тейеш. Оло һүҙенә ҡолаҡ һалмаған йәштәр уны шулай ҡабул итә лә.*



дең патриоты булыу ҙа бик мөһим. Эйе, йәштәр хәҙер ауылды үҙ итмәй. Фермерлыҡ хужалыҡтары төҙөү өсөн, ай-һай, бик күп көс түгергә кәрәк, әрһеҙлек кәрәк. Уныһы ла көн итерлек кенә, үҫеш өсөн түгел. Минеңсә, уның киләсәге юҡ. Мәҫәлән, Израилдә бит тәбиғәт шарттары беҙҙекенә ҡарағанда ҡулайһыҙыраҡ булһа ла, коллектив хужалыҡтар төҙөп йәшәргә мөмкинлек бирелә. Кешегә кешелеклеген юғалтмаҫ өсөн берҙәм хужалыҡтар ныҡ ярҙам итә. Олигархтар өсөн ябай кешенең үҫеше мөһим түгел, табыш алыу уның төп хәстәрлеге. Шуның өсөн дә тауар хаҡын төшөрмәйәсәк улар.

Үҙебеҙҙең балаларға килгәндә, эйе, уларға үҙаллылыҡ бирҙек. Йәш кешегә бит мөхәббәт тойғоһо йәшәү көсө бирә. Ғаилә ҡороп йәшәй башлағас, әлбиттә, ярҙам иттек. Ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙе һағынып торабыҙ, арттырған һәр бер һөнәрҙәренә ҡыуанып туймайбыҙ. Иң тәүҙә беҙ үҙ балаларыбыҙға ғаилә ҡороуҙың ир өсөн дә, ҡатын өсөн дә шул тиклем яуаплы икәнен төшөндөрҙөк. Телевизорҙан бының киреһен күрһәтәләр. Еңел генә өйләнешәләр, еңел генә айырылышалар. Әйтерһең дә, тик шулай булырға тейеш. Оло һүҙенә ҡолаҡ һалмаған йәштәр уны шулай ҡабул итә лә. Балаларыбыҙҙың аңына беҙ һәр саҡ һеңдерә килдек: ғаилә булғас, балалар була, уларҙы тәрбиәләргә кәрәк. Улар атай-әсәйһеҙ булмаһын, үҙ балаларығыҙҙы үҙегеҙ тәрбиәләргә тейеш. Хәҙер бит балалар өсөн ата-әсәһе яуаплы, тип барабыҙ.

Әлеге лә баяғы телевизорҙан күргән шоуҙарҙағы күренештәр тәрбиә бирмәй. Айырылышыу - иң тәүҙә бала өсөн трагедия. Толстой әйткән бит: "Бөтә бәхетле ғаиләләр бер-береһенә оҡшап бәхетле, бәхетһеҙ ғаиләләр үҙҙәренсә бәхетһеҙ",- тип. Үҙҙәренсә бәхетһеҙ булғансы, башҡа бәхетле ғаиләләр кеүек бәхетле булһындар. Беҙ бына шулай бер-беребеҙгә ғәйеп ташламай тормош көтәбеҙ. Тормошобоҙҙоң аҙағы ла яҡынлайҙыр, әммә ғүмеребеҙ бушҡа үтте, тип уйламайбыҙ, үкенерлек насар эштәр ҡылманыҡ. Көн дә иртән торабыҙ ҙа көндәлек эштәр менән булышабыҙ.

**Венера апай:** Ғаилә ҡорған йәштәргә теләгем шул: бер-береңә ҡаршы төшмәй, икең бер һүҙле булып йәшәһендәр. Ата-әсәнең ярҙамына килгәндә, унһыҙ булмай. Мәҫәлән, Өфөләге улыбыҙға аҡсалата ла, һүҙ менән дә ярҙам итеп торабыҙ. Ейәнсәребеҙ ипотека буйынса фатир алды, уға ла хәлебеҙҙән килгәнсе ярҙам итәбеҙ. Төп ярҙамыбыҙ нимәнән ғибәрәт? Үҙ хәләл көсөбөҙ менән үҫтергән емеш-еләгебеҙ менән ярҙам итәбеҙ. Хужалығыбыҙҙа үҫтергән ҡош-ҡорт итенән өлөш сығарабыҙ, йыл һайын һуғым итен бүлешәбеҙ. Бер баш йылҡы, бер баш һыйыр һуябыҙ.

Быныһы мөһим түгел, иң беренсе, йәштәргә кәңәш бирергә кәрәк. Йәш ваҡытта улар быға бик мохтаж. Үҙ өлгөндә тәрбиәләргә кәрәк уларҙы. Олоғая килә оптимист булып ҡалыу өсөн кешеләр менән яҡындан аралашып йәшәргә кәрәк. Әгәр өйҙә дүрт стенаға бикләнеп ултырһаң, ул һине бөтөрә. Үҙең өсөн генә түгел, башҡалар өсөн дә йәмғәт эштәрендә ҡайнап йәшәһәң, үҙеңде башҡаларға кәрәкле итеп тойһаң, пенсияға сыҡҡас та тормош дауам иткәнен аңлайһың. Ағинәйҙәр ҡоронда булыуым миңә йәшәр өсөн көс бирә. Китапханалар системаһындағы "Күңел утрауы" түңәрәгенә саҡырғайнылар, ҡушҡуллап риза булдым. Сибай, Баймаҡ районы, Ҡыҙыл ҡасабаһындағы ҡатын-ҡыҙҙарға үҙебеҙҙең милли биҙәүестәрҙе эшләргә өйрәтәм. Ҡала буйынса үткән һәр сарала ҡатнашам. Әле яңыраҡ интернеттан инвест-һабантуйҙа башҡорт аш-һыуҙарына конкурс була тигән иғлан күреп ҡалдым да, шунда ҡатнаштым һәм өсөнсө урын алдым.

Ике ай элек карьерҙың аръяғында шишмә барлығын ишетеп, ағинәйҙәр менән шунан барып һыу алдыҡ. Быйылғы ҡоролоҡ йылында ла ул шишмә бер ҙә бирешмәгән. Баҡһаң, элек шул урында Сибай кантондың йәйләүе булған. Икенсе барғаныбыҙҙа күп йыллыҡ сәскәләр ултыртып ҡайттыҡ. Аллаһ бойорһа, октябрь башында шунда барып, ағастар ултыртасаҡбыҙ, Сибай кантон рухына аяттар уҡыясаҡбыҙ. Эш дауам итһә, тормош та дауам итә. Яҙғыһын Сибай крайҙы өйрәнеү музейы менән берлектә башҡорт аш-һыуҙарын тергеҙеү буйынса ҙур сара үткәрҙек. Ҡырҡтан ашыу ризыҡ төрөн өҫтәлгә ултырттыҡ. Дүрт метрлыҡ тултырма эшләп, Гран-приға лайыҡ булдым. Биш метрлығын тултырған саҡтар ҙа булды.

Буҙа эшләү буйынса телевидениеның "Бәхетнамә" тапшырыуына саҡырҙылар. Шунда барҙым. Элек-электән Әбйәлилдә Күсем яҡтары, тамъяндар буҙа буйынса оҫта булдылар. Өләсәйемдең нисек буҙа эшләгәне һәр саҡ күҙ алдымда тора. Ул тәүҙә бойҙайҙы шыттыра торғайны. Һолоно табала түгел, ҡаҙанда ҡыҙҙыра. Шытҡан бойҙайҙы киптереп, ҡыҙҙырылған һоло менән ҡушып, ҡул тирмәнендә тарта. Аҙаҡ ана шул ҡушымтаны һыйырҙың йә һарыҡтың эс майын ҡушып, талғын утта ҡайната. Буҙа кеҫәл һымаҡ ҡуйыраҡ булырға тейеш. Шәкәр ҡушылмай. Шытҡан бойҙайҙың составында былай ҙа шәкәр була. Бер йылы көслө ямғырҙан һуң һуғылған бойҙай шытты. Башҡа бойҙай булмағас, шунан он тарттылар. Икмәге тәмле, шәкәрле булғаны иҫтә ҡалған. Шайморат ағайың һәр саҡ ярҙам итергә әҙер тора. Шулай йәшәйбеҙ. Ҡушҡанды көтөп тормайбыҙ, ҡушҡан эшкә ҡарағанда үҙ инициативаң менән башлаған эш һөҙөмтәлерәк була.



**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәләкәй йылғалар ҙурына ҡушылғанда шундуҡ йотолмайҙар, күҙгә күренмәле һыҙат булып бергилке үҙ юлдарын дауам итәләр. Ҡалаға күскән ауыл кешеләре лә ана шул саф һыҙатты хәтерләтә. Тормошҡа етди ҡарау, ихласлыҡ, эскерһеҙлек, бәлки, бер ҡатлылыҡтыр ҙа - был сифаттар ауыл кешеһе артынан оҙатып йөрөй. Ҡала ығы-зығыһына бирешмәйенсә, рухи сығанаҡтарыбыҙҙы сафландырыусы сифаттар улар.**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН әңгәмә ҡорҙо.**

ҺАБАҠТАР

# БАТЫРҘАН БАХЫР ЯҺАНЫ...



**Бынан бер нисә йыл элек урамда һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, быcраҡ сәсе уҡмашып, бумалаға оҡшаған, алама кейемле, бөтә мөлкәтен үҙе менән йөрөткән кешеләргә, йәғни урыҫса әйтмешләй, бомждарға, йәлләп тә, ерәнеп тә, аптырап та ҡарай инек. Ә хәҙер бик иғтибар итмәйбеҙ ҙә шикелле. Һәр хәлдә ҡулын һуҙып, хәйер һораған мәлдә күрмәмешкә һалышып үтеп китергә тырышабыҙ, сөнки был күренеш көндән-көн ғәҙәтигә әйләнеп бара. Ҡайһы берҙә бер үк кешене йома булһа - мәсет, йәкшәмбелә сиркәү янында күрәбеҙ. Хәйер, бындай хәлгә төшкән кеше өсөн ниндәй дин кешеһе булыу мөһим дә түгелдер инде.**

Шулай ҙа бер көн бер асарбаҡҡа иғтибар итмәй үтеп китә алманым. Ул тырышып-тырмашып сүп һауытын бутай ине. Контейнер тулы түгел, шуға күрә бер ҡулы менән тотонған да ярты кәүҙәһе менән сүп һауытына төшкән, ә аяҡтары ергә теймәй, аҫылынып тора. Мин башта был кеше берәй әйберен яңылыш ташлаған да, шуны эҙләйҙер тип уйлағайным, әммә сүп һауытынан полиэтилен тоҡсайҙа икмәк һәм кетчуп шешәһе алыуын күргәс, был уйымдан кире ҡайттым. Тоҡсайын пакетына һалды ла, быcраҡ ҡулдары менән шешәнең ауыҙын һөртөп, уның төбөндәге помидор соусын эсә башланы. Минең тексәйеп ҡарап торғанымды һиҙҙе, әлбиттә, ҡыҙыҡ күрепме, мыҫҡыл итеүе булдымы, шешәне миңә табан һуҙған кеүек булды.

Һөйләшеп киттек. Һөйләшеп, тиһәм, бәлки, бик үк дөрөҫ тә түгелдер, сөнки мин уның нисек ошо көнгә төшөүе тураһында бер генә һорау бирҙем.

Александр, мин уйлағанса, асарбаҡ уҡ түгел, сөнки был аббревиатура "билдәле йәшәү урыны юҡ" тигән мәғәнәне аңлата, ә уның әле даими йәшәгән урыны, пропискаһы, үҙ ҡыйығы бар. Һигеҙ-туғыҙ йыл элек ҡатыны, ҡыҙы, ейәне менән өс бүлмәле иркен фатирҙа йәшәгән. Әле лә бар улар, тик хәҙер Александр яңғыҙы. Япа-яңғыҙ түгел, дүрт бесәйе бар. Ҡышын уларҙың һаны ике-өс тапҡырға арта. Урамда ҡайҙа барырға белмәй йөрөгән бесәйҙәрҙе бөтәһен дә үҙенә алып ҡайта икән.

Бәхетһеҙлек бер-бер артлы килә уға. Һәм ул быны бөтәһен дә ҡатынынан, ә дөрөҫөрәге, уға булған мөхәббәтенән күрә.

- Көнө-төнө эшләп, көрәп аҡса алғанда ла ярай алманым уға. Бер ваҡытта ла ҡәнәғәт булманы, һәр ваҡыт нимәлер етмәй төҫлө ине, - ти асарбаҡ.

Ҡатынының йәмерәйеп ултырғанын күрмәҫ өсөн эштән һуң да ҡалып эшләй, ял көндәрендә лә өҫтәмә эш таба. Өҙләкһеҙ эштә булғас, берҙән-бер ҡыҙының да үҫкәнен һиҙмәй. Ҡыҙы иһә атаһын "аҡса табыусы" тип кенә ҡабул итә. Ғаиләлә бәхетһеҙ икәнлеген белһә лә, Александр айырылышыу тураһында уйлап та ҡарамай. Сираттағы ялланып эшләгәнендә һул ҡулының бармаҡтарын өҙҙөрә. Ҡулы ғәриплләнеп, эшһеҙ ҡалғас, ҡатыны бөтөнләй дошман күрә уны, өйгә һыйҙырмай, яҡты йөҙ күрһәтмәй, хатта тик торғандан ҡул күтәрә, туҡмай, өйҙән ҡыуа башлай.

- Ҡатынымдың ҡатылығын үҙемдең йомшаҡлығымдан күрәм,- ти ул йәшермәй. - Уны үтә ныҡ яраттым. Өрмәгән ергә ултыртманым. Бөтә хаталарын, яңылышыуҙарын ғәфү иттем. Йөҙөндә бер йылмайыу, ҡәнәғәтләнеү күреү өсөн әллә нәмәләр эшләргә әҙер инем. Ҡыҙым тыуған йылды күлдән томбойоҡ сәскәһе алып бирәм тип, саҡ һаҙлыҡ төбөнә китмәнем. Мөхәббәтем харап итте инде. Батырҙан бахыр яһаны...

Бынан һигеҙ йыл элек ҡаты ауырып, дауаханала ятып сығыуына айырылышыу тураһында судҡа ғариза бирелгән, өс бүлмәле фатирҙы һатыу хәл ителгән була. Шулай итеп, ул иҫке йортта бер бүлмәле фатирға күсә. Шунда ла ул ҡатынына ҡаршы килә алмай, ҡасан булһа ла яңылышҡанын аңлар, йәлләр, кире бергә йәшәргә саҡырыр тип йәшәй. Урам буйлап, сүп-сар тирәһендә йөрөй башлауы ла үҙен ҡатынынан йәлләтеү маҡсатынан килеп сыға. Һуңынан инде был кәсепкә нығлап өйрәнеп китә: бесәйҙәре өсөн дә аҙыҡ-түлек күп була унда, үҙенә лә кәрәк-яраҡ табыла. Пенсия йәшенә етмәгән, ә инвалидлыҡ пенсияһы коммуналь хеҙмәткә, дарыуға саҡ-саҡ етеп ҡала. Шунлыҡтан, туҡланыу, кейенеү мәсьәләһен ул бөтәһен дә ошо сүп һауыттары тирәһендә хәл итә.

- Кеше бөгөн насар йәшәмәй, тоҡлап аҙыҡ-түлеген ташлай, кисә алған икмәген бөгөн ашамай, шкафында урын булмағас, быны тигән кейем-һалымын сығарып ташлай, - ти Александр. - Минең хаҡта яҙһаң, шуны ла яҙып үтерһең әле, ир-егеттәргә генә әйтер һүҙем бар. Ҡатындарын ятҡанда үҙҙәрен дә онотмаһын ине. Юғиһә, минең кеүек тишек кәмәлә ҡалыуҙары ихтимал...

Һуңғы һүҙҙәрен әйткәндә ул ҡулына пакетын алып, китеп бара ине инде. Бәлки, ағырға торған күҙ йәштәрен күрһәтергә теләмәгәндер. Ә, бәлки, был ҡылығы, һин дә ҡатын-ҡыҙ затынан бит инде, тип үҙенсә протест, ҡаршылыҡ белдереүе булғандыр...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

**✓ Бына бер аҙҙан, Алла бирһә, күстәнәстәрен тейәп, үҙе лә килеп етер әле. Икеһен бер бүлмәгә, бер карауатҡа һалып, тыштан бикләп китерҙәр. Был төн тәү ҡушылған төндән дә татлыраҡ буласаҡ!**




Ауылда саҡта алдырғаны ала, уҡығаны ла юҡ ине быны. Ҡатыны "Крестьянка" менән "Башҡортостан ҡыҙы"н, ә үҙе "За рулем" менән "Подвиг"ты алдырҙы. Форсат ҡалмай бит уҡырға, йәйен дә, ҡышын да шул эш тип йүгерә. Ә бында ваҡыт бар. Яҙҙырып та була икән, киләһе айҙан үҙенә алдыра башлар. Ә ҡайтҡас инде мотлаҡ яҙыласаҡ. Хәҙер бер яҡын дуҫы булды ла ҡуйҙы ошо зәңгәр тышлы китап.

Ишмырҙа башта биттәрен ҡутарып, ҡараштырып сыҡты, мөхәббәт, ғаилә тормошо тураһындараҡ яҙылғандарын эҙләне. Матур яҙылғандарын ғына уҡырға ине, ире төрмәгә эләгеп, ҡатыны ауылда ҡалып, боҙолоп киткән эштәр тураһында булып ҡуймаһын!

Ишмырҙа ике-өс бит уҡығас та шөрләй төштө: ах, тап уның ише әҙәм тураһында яҙылған түгелме? Хатта исеме лә оҡшаш - Иштуған. Иштуған шофер булып эшләгән, ҡалала - Өфөлә йәшәгәндәр. Ҡатыны, балаһы булған. Шунда машинаһы менән юл йөрөй торғас, Иштуған бер йәш ҡатын менән танышып, эскегә, уйнашҡа һалыша. Быны үҙ бисәһе белеп ҡала. Ығы-зығы, янъял тыуа, был сығып китергә мәжбүр була. Аҙаҡ сиктә барып төрмәгә эләгеп ҡуя.

Ишмырҙа ундай кеше түгел, ул бит бөтөнләй икенсе - изге юлда йөрөп эләкте. Ә теге - ахмаҡ, ниңә ирекле тормоштоң ҡәҙерен белеп кенә йәшәмәскә инде! Ишмырҙа шуларҙы уйлап ултыра-ултыра ла, ярар, бер тамағың менән бер артыңа баш булмағас, әйҙә ят ҡаңғырып, тип үсәп тә ҡуя.

Ошонда, Ишмырҙалар колонияһында, түгелме икән ул әҙәм? Бәлки, осрап та ҡуйыр. Хәйер, яҙыусылар кешеләрҙең исемен бутап яҙа, ти, бит ул. Ҡотолоп сыҡҡас, Өфөлә яҙыусыһын эҙләп, Иштуған тураһында һорашыр әле.

Нәзифәһе нисек йәшәп ятҡан була икән унда? "Зэк бисәһе" тип ҡаңғырталармы икән бахырҙы? Нәзифә бит алыҫтан, бөтөнләй икенсе райондан төшкән килен, ауылда туған-ырыуы, серләшер кешеһе лә юҡ, яңғыҙы йөрөйҙәр ҡаңғырып. Бергә йәшәгәндә былары беленмәне, хәҙер һиҙҙертәләр. Былай уҫаллығын уҫал ғына инде, әллә ни бирешеп тә бармайҙыр, шулай ҙа...

Нәзифәнең эше ир-ат янында - колхоз бухгалтерияһында кассир. Айына ике-өс тапҡыр аҡса алырға тип районға бара. Күберәк председатель шоферы алып китә. Ул бушамағанда, икенселәре лә йөрөтә. Парткомды йөрөткән төлкө танау Кинйәбулат Нәзифәгә күҙҙәрен йылтыратҡылай, имеш, тиҙәр ине. Иманы юҡ бит ул бәндәнең, эсеп алһа, әбейҙәргә лә йәбешер! Ул-был булып, белеп ҡалһамы!

Нәзифәһе төҫкә бик сибәр - Мәснәүи кеүек үк һап-һары сәсле. Шундай һары, көнбағыш сәскәһен ураған башына тип торорһоң. Ә күҙе - зәп-зәңгәр. Ҡараһаң, үҙ күҙҙәрең ҡамашыр. Баймаҡ яғында бит ундайҙар юҡ, шуға ла ауылда ят яландан күсереп килтереп ултыртылған сәскә кеүек кенә күренә. Ҡайтҡан көн урамдан үтеп киттеләр юрамал, бөтә ауыл ҡарап ҡалды.

Иртәгеһенә үк хәбәр таралған: ныу, Ишмырҙа тапҡан бит кәләште!

Аптырарһың, Ишмырҙа малайҙары, ата-әсәһенә ҡарағанда ла кәләшен һағынып ҡаңғыра. Асия! Быны әйтеүе түгел, уйлауы ла оят, әммә шулай булғас, шулай инде. Һылыу ғына түгел, уңған да бит кәләше: эшләмәгән эше, бешермәгән ашы юҡ. Әҙ генә лә тик тормай, гел генә юрғалап йөрөп ята. Йүгерә-йүгерә йонсоп та китәләр - колхоз эше, йорт эше, бала-саға. Аҡса таратыуға ғына күпме нервы! Ят ирҙәр ҡайғыһы тиһеңме унда! Саба-сабалыр ҙа, инәлер ҙә тәгәрәйҙер.

Кәләше тураһында шулай яман уйлағаны өсөн үҙен әрләп ала, күңеленән булһа ла ғәфү үтенә. Шунан хат яҙырға тотона. Бына бер аҙҙан, Алла бирһә, күстәнәстәрен тейәп үҙе лә килеп етер әле. Икеһен бер бүлмәгә, бер карауатҡа һалып, тыштан бикләп китерҙәр. Һәйбәт йөрөгән кешеләрҙе ҡатындары менән шулай осраштыралар ҙа! Был төн тәү ҡушылған төндән дә татлыраҡ буласаҡ! Йә, төрмә һынлы төрмәлә ҡатының менән ҡосаҡлашып ятсы! Башҡа һыйырлыҡ түгел! Әйтһәң, ышанмаҫтар ҙа! Быны уйлап тапҡан кеше бик һәйбәт кешеләр. Ҡасан килә инде ошо мәл!

...Көндәр шулай һағышлы ла, өмөтлө лә уйҙар, хистәр менән үтә торҙо. Ишмырҙа теге журналды түшәгә аҫтына йәшереп тота. Сере бар: бер ағыраҡ битенә һыҙыҡ һыҙып бара. Бер көн үткән һайын - бер һыҙыҡ. Һыҙыҡты ул кис, ятыр алдынан ғына һыҙа. Был - үҙенсә бер тантаналы мәл: тимәк, тағы бер көн үтте, рәшәткә эсе тағы бер тәүлеккә ҡыҫҡарҙы, тигән һүҙ. Тик ошо мәлдә - кисте көтөп алыуы ғына ауыр. Ҡайһы берҙә түҙмәйенсә иртән үк һыҙып ҡуя. Иртән һыҙһаң инде, кискеленә шатлыҡ ҡалмай, буш күңел менән ятып йоҡлаған кеүек була.

Һәр көн таяҡтарҙы һанап ҡарай. Әлбиттә, иҫәбен былай яттан да белә, әммә һанап ҡуйһаң, тынысыраҡ. Таяҡтар ҡайһы берҙә артығыраҡ та сыға. Ишмырҙа ҡыуанып, йөҙә яҡтырып китә: әллә яңылышып йөрөгән дә, срогы бер көнгә булһа ла ҡыҫҡарып ҡуйғанмы? Шунда уҡ яңынан иҫәпләргә тотона. Юҡ инде, алдай алмаҫһың донъяны!

Ишмырҙа төрмәнән йәй, август айында, сығырға тейеш. Бөтәһе лә күҙ алдына килә. А-а, ул бит һауала осҡан бөркөт, арҡаларҙа елдергән болан кеүек йәшәгән кеше! Ҡайһылайыраҡ йөрөй ине ауылында! Ҡайҙа ғына бармаһын - үҙ иле! Үҙ иле, үҙ кешеләре, дуҫ-иштәре, бөтәһе лә күтәреп алырҙай булып тора.

Ә ундағы көс, оһоллоҡ! Көрәштә арҡаһы бер ваҡытта ла ер күрмәне. Тегеләр аһ та уһ килә, ә был тир ҙә сығармай, йәпле мәлен генә самалап йөрөй ҙә, ала ла елгәрә. Һабантуй һайын тәкәһеҙ ҡайтмай ине. Ҡайтмай тигәс тә, өйгә алып ҡайтып тормай инде, ҡайҙан килгән, шунда китә - Ирәндектең иң ҡуркам еренә баралар ҙа усаҡ яғалар, тәкәне һуйып шашлыҡ бешерәләр.

Шулай үҙ алдына уйлана-уйлана ғына йәшәп ята ине әле, көтмәгәндә бер хәл килеп сыҡты. Ғәҙимге көн, эш ваҡыты. Бер-береһенә оҡшаш әҙәмдәр цехта эштәре менән була. Берәүҙәр, көн уҙһын, сабата туҙһын, тип йөрөй, Ишмырҙа кеүектәр, эшләгәс, эш булһын, тип тырыша. Шулай донъя һин дә мин торғанда, цехтың арғы башында ғауға ҡупты ла китте. "Зэк"тар үҙ-ара һуғыша. Улар һуғышһа инде - хәтәр, йә үҙе бөтә, йә үҙен бөтөрәләр - икенең бере.

Яман алышалар. Береһе тондора ла, икенсеһе сәсрәп барып төшә, шунан тороп тегеһе тондора. Ә ауыҙҙарынан сыҡҡан һүҙҙе тик төрмәлә генә ишетергә мөмкин. Ҡурҡыныс! Икеү дөмбәсләшә, ҡалғандары ҡыҫылмай, ҡарап тора. Бында закон шулай, әйҙә бәхәсте, гладиаторҙар һымаҡ, үҙ-ара хәл итһендәр.

Ишмырҙа янъялды күрмәмешкә һалышты: барып ҡыҫылырға атам туғаны, инәм ҡәрендәше түгелдер әле. Төрмәгә лә шул бола арҡаһында килеп ҡапты, ҡыҫылһаң, йә тағы бәләгә эләгеп ҡуйырһың.

Ул ҡапыл терт итеп ҡалды: таныш тауыш! Ныҡ таныш! Ҡайҙан таныш? Тотто ла янъял яғына йүгерҙе. Бәй, Мәснәүи түгелме? Шул бит? Ҡайҙан килеп сыҡҡан бында?

Ишмырҙа уны-быны уйлап торманы, формовка менән Мәснәүиҙең башын яра һуғырға торған Оҙон "зэк"тың муйынынан һыға тотоп алды. Шундай ҡыҫты, Оҙон бер-ике тыпырсынды ла хырылдап ҡулын төшөрҙө. Был ғына ла етмәне, тегене үҙ яғына бора бирҙе лә, башын аҫҡа баҫып, эйәгенә тубығы менән тондорҙо. Әле генә ғәйрәт ороп торған Оҙон иҙәнгә шылды ла төштө.

"Цыган" ҡушаматлы был блатнойҙы колонияла бөтәһе лә белә. Бында ул батша, хаким! Үҙе хаким, үҙе йәлләт. Бөтәһе лә унан ҡурҡа, әйткәнен үтәп кенә тора. Үҙе бер ни эшләмәй, хатта эшкә лә сыҡмай, бына тигән йәшәй: ашарына ла, эсеренә лә һәр ваҡыт бар. Табып килтереп торалар. Хатта контролерҙар ҙа иҫәпләшә уның менән, ҡаршы төшмәйҙәр.

Ишмырҙа бына ошо кешегә ҡул күтәрҙе. Мәснәүиҙе күргәс, уны-быны уйлап торманы инде. Тотонғанһың икән, артҡа сигенеү юҡ, юғиһә, бөттөң, тигән һүҙ. Һине бәреү ҙә яҡлашмаясаҡ, теге һине йә үлтерәсәк, үлтермәһә, артабан хайуан хәлендә тотасаҡ, бында инде көс менән генә еңергә кәрәк.

Мәснәүи эште төшөндә, бар яһиллығы менән Оҙонға килеп йәбеште. Әммә шул ваҡыт өсөһөн дә арттан килеп шаҡарып алдылар. Тотоноуҙарына ҡарағанда контролерҙар булырға тейеш - ҡаршылашырға ярамай. Шулайтып, былар бер ни аңғарып өлгөрмәне, алды ла киттеләр.

"Зэк"тарҙың күҙе тик Ишмырҙала: ҡара һин уны, шым ғына йөрөгән әҙәм ине, ҡайһылай яман булып сыҡты. "Цыган" һынлы "Цыган" ды әйләндерҙе лә һалды бит! Тимәк, хәҙер блатной булып ошо ҡалыр. Төрмәнең законы шундай, кем еңә, кем көслө, шул башлыҡ. Ә Ишмырҙа үҙен хәҙер ни көткәнен һиҙһә лә, эстән генә әллә кем ине. Берҙән, үҙенең кемлеген күрһәтте, икенсенән, яҡташын ҡотҡарып ҡалды. Башҡорт түҙә-түҙә лә, шунан бер ҡыҙҙырһаң, ауыҙын йырыр ул, тип маҡтанды эстән. Төрмәлә ундай абруй ҙа кәрәк.

Колонияның режим буйынса начальник урынбаҫары оҙаҡ һөйләшеп торманы. Эштең ниҙә икәнен белеште лә, "Цыган"ға ҡарап:

- Ун биш тәүлек! - тине.

Уныһы ун биш көнгә штраф изоляторы тигәнде аңлата. Был инде төрмә эсендәге төрмә була - сығармайҙар ҙа, йүнләп ашатмайҙар ҙа, үлмәҫлек кенә бирәләр.

Начальник урынбаҫары алдындағы ҡағыҙҙарҙы ҡарап ултырҙы ла ҡапыл Мәснәүигә боролдо:

- Ә һин, Кальметов, ҡайҙан килеп эләктең бында?

- Ҡайҙан килеп эләккәнде һеҙ яҡшыраҡ беләһегеҙ, гражданин начальник: янға ҡораллы һаҡсылар ҡуйҙылар ҙа ултырттылар ҙа ебәрҙеләр. - Мәснәүи һаман да шул икән, үҙенсә теллəште. Ә теге бындай һөйләшеүҙәрҙе күп ишеткәндер, алдында торған байғоштоң дорфалығына иҫе китмәне, Ишмырҙаға ҡараны:

- Ә һин, Буранбаев? - Ишмырҙаға ул йомшағыраҡ өндәште, шуның менән был "зэк"ты үҙерәк күреүен дә, һин арыу ғына әҙәм инең түгелме һуң, тигәнде лә тоҫмаллатты.

- Мин ни, баяғы, цехта эшләп тора инем... - Ишмырҙа эштең нисек булғанын аңлатты.

- Икегеҙгә лә бишәр тәүлек! - тине начальник. - Ә һин, Кальметов, юлға әҙерлән!..

- Гражданин начальник, минең ни...

- Молчать! Һеҙ, Буранбаев, Кальметов - "подельниктар", тәртипте беләһегеҙҙер, не первый раз замужем! Бөттө! Алып китегеҙ! - тине.

Былар үҙ-ара һөйләшеү түгел, йүнләп бер-береһенә ҡарашып та өлгөрмәнеләр, карцерға алды ла киттеләр.

Ә эш былай булған. Мәснәүи Кальметов ике көн генә элек этап менән элекке ултырған еренән ошо колонияға килгән. Дөрөҫөрәге, килтергәндәр. Эшкә сыҡҡан. Яңы кешене күреүе менән "вор" Мәснәүиҙән эшен үҙ исеменә яҙҙырып барырға ҡушҡан. Колонияла шулай инде, "вор" ҙа, көслөрәктәре лә эшләмәй, эшләргә теләмәй, ә аҡса, эш хаҡы кәрәк. Шуға ла улар йомшағыраҡтарҙы ҡурҡытып, эш хаҡтарын үҙҙәренә яҙырға ҡуша. Ишмырҙаны ла ярты йыл буйына шулай интектергәйне.

Бындай хәлдәрҙе контролерҙар ҙа, колония начальнигы ла белә, тик белмәмешкә һалыша. Юғарыға ялыу-фәлән булмаһа, теләһә нишләһендәр. Бына шул "Цыган" Мәснәүиҙе ҡурҡытып маташҡан. Ә теге күп уйлап тормаған, һалған да ебәргән. Киткән һуғыш.

Ишмырҙа килеп сыҡмаһа, әллә ниҙәр булыуы бар ине. Бында һөйләшеү, аңлашыу түгел, йүнләп бер-береһенә ҡарарға ла өлгөрмәнеләр, "шизо"ға илтте лә яптылар. Хәҙер ултыр япа-яңғыҙың еүеш камерала бер стакан һалҡын һыу эсеп.

Әлеге шул татар арҡаһында, тип йәне көйөп алды Ишмырҙаның. Ҡайҙан килеп сыҡҡан ул бында? Осрашыуҙары шәп тә ул, "подельник" булһалар ҙа, яҡташтар ҙа инде, татар менән башҡорттар. Исмаһам, һөйләшеп йөрөрҙәр ине. Дошманлыҡтары үтте бит инде. Дошман тип, ниндәй дошман булһындар инде, ахмаҡтар улар. Тиҙерәк осрашырға ине. Ә биш көнө йылдан да оҙағыраҡ.

### 3

Мәснәүи менән Ишмырҙаны бер үк ваҡытта сығарҙылар. Тик ҡапыл булды - ҡара-ҡаршы тап булыштылар ҙа телһеҙ ҡалдылар. Хәҙер нишләйбеҙ инде, тигәндәй, бер аҙ ҡарашып торҙолар. Күҙҙәр яна, ә тел әйләнмәй, арала ниндәйҙер көртә ята. Әллә нимәһенә янъялға килә лә ҡаба бит!

- Нихәл, Ишморза! - Беренсе булып Мәснәүи өндәште.

- Һаумы...

Улар ҡул ҡыҫышты. Ҡаты итеп ҡыҫыштылар. Мәғәнәһе аңлашыла: был һиңә Өфө түгел, хәл хәтәр, бер-беребеҙгә терәк булайыҡ! Ҡапыл ғына һөйләшер һүҙ ҙә юҡ һымаҡ. Һүҙ бар, хатта күп, тик ҡайһыһынан башларға?

*✓ Әлбиттә, тарих менән шөғөлләнеүселәрҙең барыһы ла боронғо башҡорттар тураһында хәбәрҙәр ине. Тик быға са китаптар әҙмә-әҙлекле рәүештә башҡорттоң үткәнен теҙеп күрһәтә алмағайны.*



"Подельник"тар, ашығмайыҡ әле, тәмләһен аҙаҡ иркенләп ашарбыҙ, тигәндәй, тынсыу, ҡараңғы коридор буйлап өнһөҙ генә атлайҙар. Биш көнлөк карцер егеттәрҙең күрен ныҡ ҡайтарған, шулай ҙа шаттар. Был атлауҙарынан уҡ күренә. Бер кинәнес менән баралар.

Бына улар яҡтыға сыҡты. Йәнә бер-береһенә ҡаранылар. Йонсоу күҙҙәренә нур һирпелде, ауыҙҙары йырылды. Тағы бер аҙ ҡарашып торҙолар. Шунан ҡапыл ҡосаҡлаштылар. Ҡыҫып, оҙаҡ итеп ҡосаҡлаштылар.

- Шуннан, Ишморза? - Мәснәүи зәңгәр күҙҙәрен балҡытып яҡташына ҡараны.

- Әйҙә миңә сәй эсергә! - тине Ишмырҙа.

- Чәйең бармы? - Мәснәүиҙең йөҙө тағы ла яҡтырып китте. - Мин монда яңа кеше.

- Бар, бар, әйҙә! - Яҡташын сәйгә саҡырыу Ишмырҙа өсөн бер кинәнес ине. Улар, оло мәжлескә саҡырылған кешеләрҙәй, дәртләнешеп, сәй эсергә киттеләр. Төрмәлә сәй эсеү, сәйгә саҡырыу оло һый, оло дәстәрхан. Ә бөгөн бына биш көн штраф изоляторында ултырып сыҡҡан кешеләр өсөн сәйҙән артыҡ тағы ни кәрәк!

"Зэк"тар сәйҙе колония магазинынан яҙҙырып ала. Төрмә тигәс тә, бында сәйе-шәкәре, шырпы-тәмәкеһе лә бар, эшләгән эшең хаҡына бирәләр. Күптәре сәйҙе алыу менән чифирь итеп эсеп бөтәләр ҙә йөрөйҙәр кеше күҙенә ҡарап. Ә Ишмырҙа, бәләкәйҙән сәй эсеп үҫкән кеше, уның ҡәҙерен белә. Әлдә шул бар әле, бик ауырға төшөр ине. "Төрмә" сәйе сәйме ни инде!

Бына Ишмырҙа оло кинәнес менән ҡаты итеп сәй бешерергә тотондо. Танауҙы ҡытыҡлап, хуш еҫе таралды. Иректә булһалар, былдай ҡунаҡ итеүгә көлөп кенә ҡуйырҙар ине лә, бында башҡаһы кәрәкмәгән дә һымаҡ.

Яҡташтар кәнфит ҡабып, эҫе сәйҙе эһелдәшеп эсергә тотондо. Хатта араҡы эскәндәге шикелле, көйефтәре күтәрелде, ҡыҙарышып киттеләр.

- Орлашмыйлармы? - тине Мәснәүи.

- Юҡ, ул яҡтан беҙҙә тәртип ҡаты. Берәү генә урлашып маташҡайны ла, аҡылға тиҙ ултырттылар. Башҡа бер әҙәмдең ҡулы ҡыбырлағаны юҡ.

- Дөрес, орлашырға государственный милекме ни ул? Беләсеңме, Ишморза дус, мин бит тегендә бөтә колонияны кулымда тотоп тордым. План үтәлми башласа, колония начальникы чакыртып ала иде. Чакыртып ала да: "Давай, Кальметов, помоги, Родина не забудет!" - ди. Үзең беләсең, алардан да план сорыйлар бит инде. Минем бер кычкыру ғына житә, какуй, кычкырып та тормыйм, бер генә карап алсам, барсы да башын басып эшкә тотына. Сездәге кебек "цыган"нарны тиз акылга утырттым! Кара син, мин эшкә чыгып житмәгән, килде дә: "Эш хакынны мина яздырасын!" - ди. Бер пешмәгән олух дип уйлагандыр инде. Ә мин аның кемлеген цехка кергәч тә күреп алдым. Күп уйлап тормадым, салдым да жибәрдем. Менә шуннан китте. Ярый син килеп катнаштың, югыйсә, бөтерә идем мин аны!..

**(Дауамы. Башы 38-39-сы һандарҙа).**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# БАШҠОРТ ҮҘЕНЕҢ БОРОНҒО ИЛЕНДӘ ЙӘШӘЙ

**Алты ярым миллиардтан күберәк кеше йәшәгән Ер шарында уларҙың барлыҡҡа килеүе тураһында ике уйҙырма бар. Беренсеһе - әҙәми заттың Алла, Бог һәм башҡа исем аҫтында йөрөгән иң бөйөк Ҡөҙрәт тарафынан тупраҡтан, балсыҡтан әүәләп яһалғаны тураһында. Икенсеһе - шул заттың уғаса Ер йөҙөндә булған йән эйәләренең миллионлаған йылдар дәүерендә маймылға, маймылдың торабара кешегә әүерелеүе тураһында фекер. Икеһе лә уйҙырма, сөнки икеһе лә иҫбат ителмәгән.**





Әммә кеше Ерҙә йәшәй. Оҙаҡ торамы ул бында? Быныһын да белеүсе юҡ. Йөҙәрләгән йылдыр, бәлки, миллиардлағандыр. Әммә кеше үҙенең йәшәү тарихында ныҡ үҙгәреш кисергәнен бик күптәребеҙ белә. Был уның тән төҙөлөшөнә ҡағылмай, ә уйлау-фекерләү һәм шуның нигеҙендә барлыҡҡа килгән хәрәкәт менән бәйле. Тәндә иһә үҙгәрешкә ҡан һәм уның төҙөлөшөндәге матдәләр дусар. Шуға күрә кешенең кемгә һәм нимәгә бәйләнгәнен асыҡлар өсөн уның ДНК-һын тикшерәләр. Ер йөҙөндәге төрлө ҡитғалағы, төрлө илдәге кешеләрҙең ДНК-һын өйрәнеү уларҙың ҡайһы береһенең бик боронғо булыуын һәм әле төрлө төбәктәргә ныҡ таралып йәшәүен, икенселәренең тәүгеләренән күпкә һуң барлыҡҡа килеүен, өсөнсөләренең ара, ырыу, халыҡ булып йәшәй башлағанына ни бары йөҙ-йөҙ илле генә йыл икәнен күрһәтте.

Ғалим, социолог, тарихсы, инженер Йәҙгәр Бәширов, тап ошо һәм башҡа кире ҡаҡҡыһыҙ мәғлүмәттәргә таянып, башҡорт халҡы бик боронғо һәм ер йөҙөндә халыҡ булып ойошҡан иң тәүге ҡәүемдәрҙең береһе, тип белдерҙе. Өфөлә 2021 йылда баҫылған "Боронғо башҡорттар" китабы тап ошо тикшеренеүҙәргә һәм һығымталарға арналған.

Кеше нисек кенә яралмаһын, бөгөнгәсә уның үҫеше өс үҙәктә бара. Беренсеһе - аҡ кешеләр үҙәге Урал менән Европа араһы, икенсеһе һарылардыҡы - Көнсығыш Азия һәм өсөнсөһө ҡаралардыҡы - Африка. Аҡтарҙың үҫешенә һәм таралыуына этәргес Урал тауҙарында булған, тип һанай Йәҙгәр Бәширов. Быға төп дәлил итеп бөгөнгө Башҡортостандың тап үҙәгендә ятҡан һәм тап башҡорт телендә бынан дүрт мең йылдан күберәк элек барлыҡҡа килгән Шүлгәнташ мәмерйәһен һәм "Урал батыр" эпосын ала. Эйе, Шүлгәнташ мәмерйәһендәге кеүек һүрәттәр төшөрөлгән ер аҫты торлаҡтары Францияла һәм Испанияла бар. Әммә тарихи эпос менән мәмерйә икеһе бергә тик башҡортта ғына билдәле. Шуға күрә башҡортто иң боронғо ҡәүемдәрҙең береһе тип атай Йәҙгәр Бәширов һәм уға ҡаршы килеүсе табылмаҫ, тип уйланыла. Дөрөҫ, мәмерйәгә Шүлгәндең исемен биргән ҡәүемдең атамаһы "башҡорт" булған, тип раҫларға йыйынмайбыҙ. Сөнки ул ваҡытта кешеләр халыҡ булып ойошмаған һәм уларҙың әлеге атамалары ла булмағандыр әле. Был һуңғы мең йыллыҡтың күренеше. Бында ла тәүҙә ырыуҙар, ырыу-аралар була, шунан уларҙың ҡушылыуы нигеҙендә халыҡ, тораҡ милләт тыуа. Бөгөнгө француздар менән испандарҙың да үҫеш юлы башҡорттарҙыҡы һымаҡ. Уларҙың тағы бер оҡшашлығын билдәләп үтәйек: өс халыҡтың да нигеҙ ДНК-лары бер. Әгәр француз менән испандарҙың боронғолоғон берәү ҙә кире ҡаҡмай икән, башҡорттоҡон да ҡаҡмаясаҡ.

Дүрт мең йылдан ашыу элек тә, унан һуң да кешеләр донъяһында бик ныҡ үҙгәрештәр, тетрәнеүҙәр, уңыштар һәм ҡаҙаныштар булған. Себер-Урал-Европала фекерләү ҡеүәһе ныҡ үҫешкән һәм шуның нигеҙендә яңы ҡорал, яңы технология, яңы асыштар барлыҡҡа килгән һәм һуңғы ике мең йыл араһында ғына ла биш империя төҙөлөп, тарҡалған. Әҙәм балаһы ядро ҡоралын уйлап тапҡан, йондоҙҙарға осҡан, саҡрымдар тәрәнлегендә ятҡан диңгеҙ төбөндәге нәмәләрҙе өйрәнгән. Әммә ул бер ваҡытта ла меңәр йыл әүәл булған боронғолоҡто онотмаған һәм әле лә ошо бейеклектәргә күтәрелеү нигеҙендә шул боронғолоҡ ята, тип элеккеләргә рәхмәт әйтә.

Башҡорттоң боронғолоғо халыҡты бар иткән үҫәргән, таҙ, бөрйән, ҡыпсаҡ, ҡатай, гәрә, мең, меркет, кирәй, ҡаңлы, әйле, күҙәй, төрөкмән, ҡырғыҙ, кәлсер, йомран, дыуан, юрматы, уран һәм башҡа ырыуҙарҙан торған. Бөгөнгө башҡорт халҡын 49-лап ырыу бар итә. Йәҙгәр Бәширов ошо ырыуҙарҙың һәр береһенең тиерлек уҙған тарихын барлап сыға һәм халыҡты күтәреп тороуҙағы уларҙың урынын атап күрһәтә.

Башҡорт улай бик боронғо булғас, кешелектең үткән тарихында ни эшләп эҙ ҡалдырмаған һуң? Яҙма тарихта уның тураһында беренсе тапҡыр VII-VIII быуатта ғына телгә алалар бит, тип әйтер кемдер, һәм хаҡлы буласаҡ. Ошо һорауҙың бирелерен алдан уҡ тоҫмаллап, Йәҙгәр Бәширов боронғо башҡорттарҙың Туран осоронда мәсәғүт, Буртас батшалығында бүтән исем, кимерәйҙәр дәүерендә, ҡыпсаҡ һәм саҡ дәүләттәрендә тағы ла бер төрлө аталып, фарсы хандары ваҡытында нисек йәшәгәндәрен асыҡлай.

"Урал батыр" эпосын бик борон иждат итеп, әле лә хәтерендә һаҡлап йөрөткән халыҡ менән бер дәүерҙә кемдәр йәшәгән һәм улар тарихта ниндәй эҙ ҡалдырған һуң? Йәҙгәр Бәширов был һорауға ла үҙенсә һәм бик тулы яуап бирә китапта. Мәсәлән, Сәсән хандар ҡулы аҫтында сәскә атҡан Фарсы донъяһын туҙҙырған Александр Македонский менән боронғо башҡорттар нисек осрашҡан һуң? Бәлки, күрешмәгәндер? Был һорауға ла яуап бирә Йәҙгәр Бәширов.

Яңы эраны төрлө ил тарихсылары төрлөсә атап йөрөтә. Христианды үҙ дине тип һанаусылар был эраны "беҙҙең эра" тип атай. Христиан булмаған күп кенә ил тарихсылары, христианға эйәреп, бигерәк тә Рәсәйҙә, урыҫ булмаған халыҡтар вәкилдәре лә "беҙҙең эра" тип һалдыра. Әлбиттә, улар "яңы эра" тип әйтергә тейеш ине. Яңы эрала башҡорттар һун осорон кисерә, төркиҙәрҙең үҙҙәренә йоғонтоһон башынан уҙғара, уйғырҙар ваҡытында ла боронғо илендә йәшәй башҡорт.

Үрҙә һанап кителгән тарихты быға белеүсе юҡ инеме ни? Әлбиттә, бар ине. Тик тарихсыларҙың күбеһе ун алтынсы быуаттан башлап егерменсе быуат бөткәнсе тиерлек был турала өндәшмәүҙе хуп күрҙе. Сөнки Рәсәй батшаһы һынлы батшаға ҡаршы күтәрелергә баҙнат иткән башҡорт тураһында аламанан башҡа һүҙ әйтелмәне. Әйтһән, һин дә ауыҙ башҡорт исемлегенә инәһең. Шуға күрә боронғо, яңы эра башындағы, урта быуаттар дәүерендәге башҡорттар тураһында һуңғы 30-40 йыл осоронда ғына дөрөҫөн яҙа башланылар. Тарихсы Нияз Мәжитов, унан һуңғы быуындар ғына башҡорттоң асылын тарихта һынландыра килә. Уларҙың береһе, һис шикһеҙ, Йәҙгәр Бәширов. Ул беҙҙең халыҡтың үткәнен "Бөйөк Башҡортостан. Халыҡтарҙың этник тамырҙары, ойошоуы һәм үҫеше", "Урта быуат хандары: Башҡорт хан", "Кол Ғәли һәм башҡорт халҡының мәҙәниәте тураһында" тигән китаптарын сығарҙы.

Бына беҙҙең алда яҙыусы тарихсының яңы зур әҫәре. Рәхмәт уға. Әлбиттә, тарих менән шөғөлләнеүселәрҙең барыһы ла боронғо башҡорттар тураһында хәбәрҙәр ине. Тик быға са китаптар әҙмә-әҙлекле рәүештә башҡорттоң үткәнен теҙеп күрһәтә алмағайны. Шуны Йәҙгәр Бәширов ошо баҫмаһында эшләне. Халыҡтың үткәненә кешеләрҙең күҙе асылған дәүерҙә уның баҫылып сығыуы бик яҡшы. Был хеҙмәттең баһаһы, һис шикһеҙ, бик юғары. Республикабыҙ Хөкүмәте лә уны оло баһаға лайыҡ тип һанар, моғайын.

**Ғәлим ХИСАМОВ,
яҙыусы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# НАСАР КӘЙЕФТӘН...

■ Тиҙҙән дарыуханаларҙа "насар кәйефтән" таблеткалар барлыҡҡа килеүе ихтимал. Уны Австралия ғалимдары төркөмө тәҡдим итмәксе, әлеге көндә улар тикшеренеүҙәрҙе тамамлай. Әлегә билдәле булыуынса, яңы препарат 5 тәбиғи компоненттан торасаҡ. Сифаты буйынса ул антидепрессанттарға ҡарағанда яҡшыраҡ буласаҡ, ти улар. Ябай психотроп матдәләргә ҡарағанда, таблетканың әүҙем механизмы кеше мейеһенең химик процестарына йүнәлтелә. Дарыу составына ингән матдәләр араһында фолий кислотаһы, цинк, башҡа мөһим элементтар бар. Шулай уҡ төп компоненттарҙы үҙләштереүгә ярҙам итеүсе матдәләр бар. Белгестәр раҫлауынса, яңы дарыу нервы көсөргәнешенән, депрессия хәлдән сығырға ярҙам итәсәк.

■ Ауырлы саҡта еләк-емеште күберәк ашаған ҡатын-ҡыҙҙарҙың балалары юғары интеллект менән айырылып тора, тип белдерә Канада ғалимдары. Тикшеренеүҙәрҙә 808 бала ҡатнашҡан. Буласаҡ әсә көн һайын ҡулланған бер порция емеш-еләк тест һөҙөмтәләрен уртаса 2,38 процентҡа күтәргән. Ә бына клетчаткаға, Омега-3 кеүек майлы кислоталарға бай ризыҡтар тест һөҙөмтәләре күрһәткестәренә бер ниндәй ҙә йоғонто яһамаған.

■ Аджу университеты ғалимдары Көньяҡ Кореяның 6 колледжында уҡыған студенттар араһында һорау алыу үткәргән һәм ғүзәл заттарҙың 52 проценты смартфонына көнөнә 4 сәғәттән ашыу ваҡыт бүлеүен асыҡлаған. Сағыштырыу өсөн: ир-егеттәр араһында ошо ваҡыт буйына телефонға текәлеп ултырыусылар 29 процент ҡына. 23 процент - ҡатын-ҡыҙ һәм яҡынса 11 процент ир-ат смартфон менән көнөнә 6 сәғәт ҡуллана. Ҡатын-ҡыҙҙарға смартфон социаль селтәрҙәргә инеү өсөн кәрәгерәк. Улар кемгәләр шылтыратыу, уйын уйнау, ниндәйҙер мәғлүмәт эҙләүгә ҡарағанда Facebook һәм Instagram-ды йышыраҡ ҡуллана. Ир-егеттәр буш ваҡыты булғанда ғына мобиль телефонын иҫенә төшөрә. Шул уҡ ваҡытта һәр бишенсе ҡатын-ҡыҙ (20,1 процент) һәм 8,9 процент ир-егет телефон менән ҡулланыу ҡағиҙәләрен бөтөнләй белмәй.

■ Рухи сәләмәтлек нигеҙендә ябай ғына ҡағиҙәләр ята, тип белдерә белгестәр. Уның беренсеһе булып кеше эшенә ҡыҫылмау тора. Донъяла бер төрлө фекер йөрөткән, бер төрлө булған кешеләр юҡ - Аллаһы Тәғәлә беҙҙе төрлө итеп яратҡан. Шуға ла үҙ дөрөҫлөгөңдө кешегә көсләп тағырға кәрәкмәй. Ғәфү итә һәм онота белеү - күңел тыныслығына илгәшеү өсөн эффектлы сара. Тормош шул тиклем ҡыҫҡа, ҡасандыр кемдер һеҙҙе рәнйеткән өсөн йөрәктә таш йөрөтөү уны мәғәнәһеҙерәк итәсәк. Өсөнсө кәңәш - йәмғиәттә абруй яуларға ынтылмағыҙ. Донъяла эгоистар шул тиклем күп, шәхси мәнфәғәтен алға ҡуйыусы бер ҡасан да башҡаларҙы баһаламаясаҡ. Етмәһә, бөтөн яҡтан камил кешеләр булмай, шулай булғас, ни өсөн һеҙ үҙегеҙ кеүек үк кешенең маҡтауына лайыҡһығыҙ? Көнләшеү, башҡаларҙы үҙгәртергә тырышыу ҙа рухи тынысылыҡҡа эйә булырға ҡамаусалаясаҡ.

■ Холестерин кимәлен түбәнәйтеүгә тәғәйенләнгән майлыҙ диеталар кире эҙемтәләргә алып килеүе ихтимал, тип иҫкәртә ғалимдар. Бындай рационда кеше йыш ҡына ҡапҡылап алырға ғәҙәтләнә, етмәһә, углеводҡа бай ризыҡтарға өҫтөнлөк бирә, был иһә һимереүгә килтерә. Эксперттар ит, балыҡ, һөт азыҡтары һәм майлы, әммә файҙалы ризыҡтар, мәсәлән, авокадоға ла иғтибар итергә ҡуша. Майлы һөт аҙыҡтары йөрәкте һаҡлай.

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

# ҺӘР БАЛА ҺӘЛӘТЛЕ,

## тик уны күрә, үҫтерә беләйек




(Башы 1-се биттә).

➔ **Балалар һеҙгә нисек килеп ҡушыла ала?**

- Әлбиттә, беҙ һәләтен үҫтерергә теләгән баланы үҙебеҙ эҙләп йөрөмәйбеҙ. Ул үҙе теләп беҙҙең эшкә ҡушылып китергә тейеш. Сөнки күңеленә ятҡан шөғөлдө тик ул ғына белә һәм артабан тырышып белем эстәүе-эстәмәүе ошоға туранан-тура бәйләнгән булыуын да күҙ уңынан ысҡындырырға ярамай. Устав буйынса 7-се кластан 1-се курсҡа тиклемге йәш арауығында булған балалар менән эшләйбеҙ, шулай ҙа 5-се кластан башлап 4-се курсҡа - йәш кеше бакалавр белемен алғансыға тиклем уны оҙатып барыу маҡсатында эшмәкәрлегебеҙҙе киңәйтергә тырышабыҙ.

Бына уҡыусының "Аврора" эшенә ылығып китергә ябай ғына юлын тасуирлап китәйек. Тәү сиратта уҡыусы беҙҙең рәсми сайтты асып ҡарай, шунда барлыҡ йүнәлештәр буйынса ойошторолған эшмәкәрлек менән таныша һәм башлап ғариза тултырып ҡалдырырға тейеш. Ғаризаһы тикшерелгәс, уҙҙәктән уға электрон почта аша махсус бүләктәребеҙҙе юллайбыҙ. Ә артабан уҡыусының электрон почтаһына беҙҙә үткәрелгән онлайн уҡыуҙар тураһында мәғлүмәттәр ебәрә башлайбыҙ. Ул ҡайһыныһындалыр ҡатнашты һәм һөҙөмтәле эшләй икән, көндәҙгә-ситтән тороп уҡыу этабына күсәребеҙ, профиль сменаларға саҡыра башлайбыҙ. Ә инде үҙәк үткәргән олимпиадаларҙа ла үҙен яҡшы күрһәтә алһа, "Аврора"-Осош проектына саҡырабыҙ. Аңлағанһығыҙҙыр, "Аврора" эшенә ылығып китеү өсөн балаға бер ниндәй артыҡ сығымдар талап ителмәй, республиканың ниндәй район-ҡалаһынан, төпкөл ауылдан булған да ла ни бары интернетҡа тоташтырылған берәй гаджет һәм теләк кәрәк.

Беҙҙең курстар төрлө кимәлдә ойошторолған предмет олимпиадаларында еңеүҙәр яуларға ярҙам итеүе, хатта ошоно беҙ төүмаҡсат итеп ҡуйыуыбыҙ сер түгел. Шулай ҙа ниндәйҙер бер уҡыусы олимпиадаларҙа артыҡ ҡатнашырға ашҡынып тормай, хатта кәрәк тип тә тапмай, әммә фәнни ҡыҙыҡһыныуҙары бар икән - "Аврора"-РАН проектына ҡушыла ала. Был проект балаға фән менән ҡыҙыҡһыныуын арттырырға, ғилми тикшеренеүҙәр үткәрергә, ниндәйҙер фәнни эштәр менән шөғөлләнергә, төүге мәҡәләләрен яҙып өйрәнергә булышлыҡ итә. Ә инде йәш ғалимдарҙың эштәрен беҙҙең уҡытыусылар профессорҙар менән бергә тикшереп, юғары баһаға лайыҡ булғандарға "Аврора" фәндәре кандидаты" исеме биреләсәк. Был уй Башҡорт дәүләт медицина университетының бер профессоры менән әңгәмәләшкәндән һуң килде. "Ҡайһы бер балаларҙың эштәре магистр хеҙмәтенә торошло", - тигәйне ул.

➔ **Ысынлап та, хәҙерге йәштәргә киләсәктә ниндәй һөнәр һайлаясағын алдан күҙаллау мөһим. Бик булмаһа, ҡайһы юғары уҡыу йортона уҡырға барырға теләүен белеү кәрәк.**

- Эйе, был йәһәттән беҙ "Аврора"-Вуз тигән программа астыҡ һәм мәктәп уҡыусылары 7-се кластан алып республика вуздарына уҡырға инергә әҙерлек үтә ала. Улар онлайн платформала уҡый һәм һайлаған юғары уҡыу йортоноң студенты булырға әҙерләнә. Ҡайһы берҙә шулай ҙа булырға мөмкин: уҡыусы Берҙәм дәүләт имтиханына яҡшы әҙерләнһә лә, тапшырған саҡта бер аҙ ҡаушап китепме, йә башҡа сәбәптән тейешле кимәлдә балл йыя алмаған. Был осраҡта уның "Аврора"ла үткән бөтә юлын беҙ асып ҡарап, бигерәк тә "Аврора-Вуз" проектында әҙәмлеген күрһәк, үҙен әҙерләгән юғары уҡыу йортона инергә ярҙам да итә алабыҙ. Шулай уҡ киләсәктә төрлө ойошмалар менән бәйләнешкә инеп, "Аврора"-Эш тигән проект асырға һәм балаларҙы хеҙмәт юлын башларға әҙерләргә ниәт итеп торабыҙ. Был да кәрәкле йүнәлештер тибеҙ, сөнки белеме булып та һөнәре буйынса эшләмәгән, йәки вуз тамамлағас, хеҙмәт стажы булмағанлыҡтан эшкә урынлаша алмай аптырап йөрөгән йәштәр менән йыш осрашырға тура килә.

Беҙ әле мәктәптә уҡытылған бөтә 24 предмет буйынса, бынан тыш программалаштырыу, квадрокоптерҙарҙы программалаштырыу, микробиология, робот техникаһы һәм башҡа өлкәләр буйынса белем бирәбеҙ. Бөтәһе лә бар, тик башҡорт теле генә юҡ, сөнки Башҡортостан Мәғариф министрлығында уның менән шөғөлләнгән айырым бүлек эшләй. Шулай ҙа әлегә "Тамыр" балаларүҫмерҙәр телеканалы менән тапшырыуҙар төшөрәбеҙ һәм яңы проекттарҙы ла бойомға ашырыуҙы уй-ниәттәрҙә генә булһа ла йөрөтәбеҙ.

➔ **Был белемдәрҙе балаларға кемдәр бирә?**

- "Аврора" һәр йүнәлеш буйынса Рәсәйҙең иң яҡшы педагогтары менән эшләй. Үҙ предметын юғары кимәлдә белгән, тәжрибәле, яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтеп эшләгән оҫта уҡытыусыларҙы эшкә яллайбыҙ. Улар Мәскәүҙән дә булырға мөмкин, йә башҡа төбәктән дә. Әлбиттә, химия буйынса беҙҙең Башҡортостан уҡытыусылары командаһына етеүсе юҡ, был фәндән үҙебеҙҙекеләр уҡыта. Былтыр Башҡортостандың төрлө ауыл-ҡалаларынан 30 мең уҡыусы "Аврора" системаһына инде. Улар менән Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаһының төбәк этабында ҡатнашыусылар һаны ла 2 169-ҙан 3 523-кә артты, ә еңеүселәр һәм призерҙар өс тапҡырға күбәйҙе. 2021 йылда Башҡортостандың 47 уҡыусыһы Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаһының еңеүселәре булды. Хатта бер "аврорасы" мәктәп уҡыусыларының география буйынса Европа олимпиадаһында икенсе урынға лайыҡ булды. Ул хәҙер Халыҡ-ара олимпиадаларҙа ҡатнашыу өсөн Рәсәй йыйылма командаһына инергә дәғүә итә.

➔ **Бөгөнгө балалар бик күпте белә, уларҙы ниндәйҙер яңылыҡ менән ҡыҙыҡһындырыуы ла еңел түгел. Һеҙ быға нисек өлгәшәһегеҙ?**

- Ысынлап та, хәҙерге балаларҙың аң кимәле бик үҫешкән. Уларға ҡарап һоҡланмай ҙа булмай, беҙ бит ул йәштә урамда йүгереп уйнап йөрөгән малайҙар инек. Ә бөгөн үҫмерҙәрҙең ҡыҙыҡһыныуҙары бар, ҡайһыларының бойомға ашырырға теләгән бынамын тигән проекттары, яңы идеялары бар. Бындай йәштәр өсөн беҙҙә "Аврора"-Стартап проекты асылған, унда техник белемдәре көслө уҡыусылар үҙ проектын күрһәтеп, шуға инвестициялар табып, киләсәктә тормошҡа ашырыу мөмкинлеген бирергә ниәтләйбеҙ.

**Нишләптер, ҡайһы бер өлкәндәр балалар хәҙер ялҡау, улар интернет селтәрендәге мәғәнәһеҙ видео-фәләнде ҡарауҙан башҡаны белмәй, ә бына беҙ заманында китапхананан сығышмай инек, тигән кеүегерәк ғәйеп таға ла ҡуялар. Был һис улай түгел, ошо фекер менән килешә алмайым. Бөгөн балалар аңлы, аҡыллы һәм киләсәктә үҙенә нимә кәрәк булырын аныҡ белә. Шуға ла айырым предметҡа бөтә иғтибарын йүнәлтә, ә башҡаларынан үҙенә кәрәк тиклем генә белемде алырға мөмкин.** Элек уҡытыусыларҙың һәм атаәсәләрҙең тел осонда булған "Бөтә предметтарҙан да тик "яҡшыға" өлгәшергә тейешһең", тигән һүҙҙәр ҙә актуаль түгел бөгөн. Мәҫәлән, бала математиканы яҡшы белә, ә рус теленән өлгәше бер аҙ аҡһай, ти. Шул саҡта уҡытыусылар атай-әсәйгә нимә ти? Рус теленән репетитор менән шөғөлләнеү кәрәк, ти. Юҡ, был осраҡта балаға, киреһенсә, математика буйынса репетитор яллау зарур, сөнки уның көслө ягын тартырға, үҫтерергә кәрәк. Был фекерем менән килешмәүселәр ҙә булыр, әммә бөгөнгө тенденциялар шулай.

➔ **Киләсәктә ниндәй һөнәр оҫталары талап ителәсәк, тип уйлайһығыҙ?**

- Дөрөҫөн әйткәндә, күҙ алдына килтереү һәм ниндәйҙер прогноз яһауы еңел түгел. Сөнки илдең мәғариф өлкәһендә киләсәктә бик ҙур үҙгәрештәр булыр һымаҡ. Бынан тыш, йәмғиәт, социаль-иҡтисади торош, илдәге сәйәсәт, технологиялар һәм тормошобоҙҙоң башҡа мөһим өлкәләре лә үҙгәрешһеҙ тормаҫ. Шулай ҙа киләһе 5-10 йылға баҙарҙы яулаған гаджеттар, кешенең көнкүрешен уңайлы итә торған заманса техникаларға бәйле һөнәр эйәләре талап ителер, моғайын. Тағы ла "экологик яҡтан таҙа булған" тигән талапҡа тап килгән нәмәләр етештереү өлкәһендә эшләү ҙә актуаль булыр, минеңсә. Мәҫәлән, бөгөн Ҡытайҙа экологик яҡтан таҙа емеш-еләк, йәшелсә үҫтергән фермерҙар продукцияһын махсус ҡушымта аша һата. Фермер баҡсаһында нисек эшләүен фото-видеоға төшөрөп һала, күрһәтә һәм һөйләй. Ә уны ҡараған кешеләр шунда уҡ үҙенә кәрәклене түтәлдән һатып ала. Был беҙҙең өсөн дә бик әһәмиәтле тема. Әлбиттә, һуңғы тенденцияларҙы иҫәпкә алып, Космос өлкәһенә бәйле белгестәр ҙә талап ителер, тип әйтә алам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был әңгәмәбеҙ "Аврора" һәләттәрҙе үҫтереү үҙәге тураһында барлыҡ мифтарҙы юҡ итер һәм быға тиклем уның эшенә ҡушылып китергә йөрьәт итеңкерәмәй торған уҡыусыларға ла, уҡытыусыларға ла ыңғай ҡарарға килергә булышлыҡ итер, тип ышанабыҙ.**

Сәриә ҒАРИПОВА
әңгәмәләште.

АҒИНӘЙ ҺҮҘЕ

**Оло йәштә лә әүҙемлеген, йәшлек дәртен юғалтмаған, тырышып донъя көткән кешеләр миндә һәр ваҡыт һоҡланыу тыуҙыра. Ундайҙар башҡаларҙан күңел күтәренкелеге, ихласлығы һәм тормошҡа ла, эргә-тирәһендәгеләргә лә бер ниндәй дәғүәһе булмауы менән айырыла. Ә, бәлки, тап ошо сифаттары уларға йәшәү дәрте һәм көс өҫтәйҙер ҙә.**

# ДОНЪЯБЫҘ ОЖМАХ ҠЫНА



Һарыш ауылында йәшәгән 84 йәшлек Сәриә Әминева беҙ барғанда яңы ғына картуфын ҡаҙып бөтөп, тирләп-бешеп сәй эсеп ултыра ине.

- Хәлем-кәрем булғанда ниңә балаларҙы көтөп ултырайым инде? Көн матур, ҡояш көлөп тора, - тип ҡаршы алды ул. - Эшләһәң, сәй ҙә, аш та тәмле бит. Ә яҡшы итеп ашаһаң, күңел дә күтәренке.

Етеҙ хәрәкәттәр менән сәйнүгеҙ шыжлатырға ҡуйҙы ла, өҫтәлгә сынаяҡтарын теҙҙе. Үҙе йәшлек хәтирәләренә бирелде:

- Беҙҙең быуындың бала сағы бик ауыр осорға тура килде. Олоғая килә үткәндәр йыш иҫкә төшә. Һуғыш йылдары онотолмай, аслыҡ, яланғаслыҡ, билдәһеҙлек... Шулай булһа ла, тылдағылар яҡты киләсәккә ышанды, ер һөрҙө, иген сәсте. Бер ваҡиға иҫкә йыш төшә. Бер көндө ер тырматырға тип беҙҙең күҙ терәп торған берҙән-бер һыйырыбыҙҙы алып сығып киттеләр. Беҙ, эреле-ваҡлы балаларҙың, бирмәйбеҙ, тип һыйырыбыҙға сат йәбешеүенә иғтибар ҙа итмәнеләр. Илай-илай малҡайыбыҙҙың артынан эйәрҙек. Яңы ғына быҙаулаған һәүкәш әллә ни ыратып эшләй ҙә алмай. Шулай ҙа көс-хәл менән бер рәт үтте лә, баҫыу ҡырына сығып, йығылды ла. Башын да күтәрә алмай, ауыр тын алып, таңға тиклем ятты шунда. Беҙ илай-илай йәш үлән килтереп ашаттыҡ, һыйыр булғас, ҡатығыбыҙ ҙа бар ине, әсе ҡатыҡ эсерҙек. Бәхетебеҙгә, икенсе көнөнә ул башын күтәрҙе, беҙгә ҡушылып ул да илай ине, күҙенән субырлап йәш аҡҡанын күрҙек. Ошо ваҡиғанан һуң башҡаса, һыйырығыҙҙы биреғеҙ, тип килеп йөрөмәнеләр, - ти Сәриә инәй. Ни тиклем көслө булып күренергә теләһә лә, тормошондағы был хәтирә уның күңел яраларын ҡуҙғытыуын тоймай мөмкин түгел.

Мәҡәләбеҙ геройы сығышы менән Күгәрсен районы Ҡалдар ауылы ҡыҙы. Фронтовиктар ҡайтып, ауыл хужалығы аяҡҡа баҫа башлаған йылдарҙа колхоз һарығын көтә ул.

- Туйғансы арыш икмәген ашай ғына башлағайныҡ, мине көсләп тиғәндәй кейәүгә биреп ебәрҙеләр. Илата-илата, туҡмай-туҡмай тиһәм, хәҙер бер кем дә ышанмаç та инде. Бәхеткә күрә, бармайым, тип ҡырталашыуым бушҡа ғына булды - бик матур ғаиләгә эләктем. Ҡайным-ҡәйнәм дә, бабайым да, йәштән "бабай" тип әйтергә ғәҙәтләндем, мине шунда уҡ үҙ күрҙеләр. Йорт һалып, башҡа сығырға булғас, күсмәйем тип илағанымды хәтерләйем хатта.

Һарыш ауылы халҡы ул заманда ла уңғанлығы, тырышлығы менән айырыла ине, ти Сәриә инәй.

- Көйәнтәләп һыу ташып, елкә сейләндергән кеше булмағандыр бында. Ҡайны йортоноң да ишек алдында ҡойо булыуына ныҡ ҡыуандым. Аттары, мунсалары ла бар ине, - ти Сәриә Әхмәтғариф ҡыҙы. - Йәшәгәндә төрлө саҡ, ир ирлеген иткән ваҡыттар ҙа булғандыр. Әммә бер тапҡыр ҙа балалар эйәртеп, төйөнсөк төйнәп урамға сыҡманым. Түҙҙем, уның ҡарауы түш ите ейҙем. Бабай ғына иртәрәк баҡыйлыҡҡа күсте, алтын туйыбыҙҙы билдәләргә бер йыл ғына ҡалғайны. Әлеге матур көндәрҙе, балаларының изгелеген тағы бер аҙыраҡ күрергә насип итмәне, - ти ул.

Оло быуын кешеһе менән әңгәмәбеҙ бала саҡ, йәшлек хәтирәләренән әлеге заманға барып тоташа. Сәриә Әминева бөгөнгө тормошто "донъя ожмахы" тип атай.

- Эй, рәхәт заман килде. Һыу, бәҙрәф, мунса өйҙә, кер йыуыу өсөн автомат машина бар, һыуыткыс, туңдырғыс тулы ризыҡ. Балалар тейәнеп ҡайта, бөтә эшемде бөтөрөп китә. Миңә зарланырға түгел. Хәлемдән килгәнсә баҡса үҫтерәм, сәскәләр яратам. Йәштәргә, әлбиттә, бөгөн ауырғараҡ тура килә. Эш юҡ, торлаҡ юҡ. Себергә тип сығып киткән булалар ҙа, һаулыҡтарын бөтөрөп ҡайталар. Тапҡан ғына аҡсаларын дауаланыуға тотоналар. Колхоз-совхоздар булһа, ҡамғаҡ кеүек ситтә йөрөмәстәр ине, - ти ул.

Ниндәй темаға ғына һөйләшһәк тә, Сәриә Әхмәтғариф ҡыҙының һүҙе мотлаҡ балаларына барып тоташа. Эйе, олоғайған көнөндә уларҙың игелеген, иғтибарын, наҙын тойоп йәшәй ул. Шуға ла күңеле көр, тормошонан ҡәнәғәт. Бар оло кешеләргә лә ошо бәхетте кисереп йәшәүен теләйбеҙ.

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Мөхәббәт һәм байлыҡ йәлеп итеү

Күпмеләр ваҡыт үтеп китте һәм һеҙ Юғары Минегеҙ менән тығыҙ бәйләнеш булдырҙығыҙ икән, ти. Ваҡыты-ваҡыты менән унан ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүҙе еңелләштереү өсөн берәй ҡул хәрәкәте уйлап табығыҙ. Һеҙ бармаҡтарығыҙ ярҙамында был хәрәкәтте яһаған һайын, мейегеҙ Юғары Минегеҙ менән бәйләнеш булдырасаҡ.

Ниндәй ҡул хәрәкәте һайларға белмәйһегеҙме? Ғәҙәттә, барыһы ла доға уҡығанда ҡулланылған хәрәкәтте һайлай. Әммә был хәрәкәт үҙенең элекке көсөн күптән юғалтҡан. Шуға ла мин үҙем был осраҡта бергә тоташтырылған баш һәм һуҡ бармаҡтарымды ҡулланам. Был хәрәкәт кешенең иғтибарын да йәлеп итеп бармай, уны машина йөрөткәндә лә, ултырғанда ла, ятҡанда ла эшләп була.

Ҡул хәрәкәтен программалаштырыу өсөн күнегеүҙәр:

1. Иркенләп ултырығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм өс тапҡыр тәрән итеп тын алығыҙ.

2. Күҙ алдына күңелегеҙгә оҡшаған картиналарҙы килтерегеҙ.

3. Эстән генә Юғары Минегеҙҙең яҡтылыҡ менән сорналған образын саҡырығыҙ. Күңелдән генә: "Мин һине яратам", - тип әйтегеҙ.

4. Быны эшләгәндән һуң баш һәм һуҡ бармаҡтарығыҙҙы тоташтарығыҙ.

5. Эстән генә өс тапҡыр шулай тип ҡабатлағыҙ: "Мин ҡулдарымдың бармаҡтарын ошо рәүешле ҡуйған һайын минең мейем Юғары Минем һәм минең Ижадсымды тәрәнерәк тоясаҡ".

6. "Мин тулы аңымда" тип әйтеп, күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ.

Барт гәзиттә фотограф булып эшләй. Ул был ысулды бер нисә йыл дауамында ҡулланған. Бер тапҡыр эштән ҡайтып килгәндә, ул баш һәм һуҡ бармаҡтарын тоташтырып, Юғары Миненән: "Миңә тағы берәй ҡайҙа барырға кәрәкмәйме икән?"- тип һораған. Бер нисә секундтан һуң, ул үҙе лә аңламайынса, уңға боролоп китә һәм юл уны диңгеҙ буйына алып сыға. Унда бер кәмәне ут ялмаған була. Барт машинаһынан йүгереп төшөп, бер нисә фотоһүрәт яһай һәм был фотолар өсөн уға ярайһы уҡ ҙур суммала аҡса түләйҙәр.

Джинни һәр ваҡыт ғаилә ҡороп, балалар үҫтереү тураһында хыялдана. Бер ваҡыт ул интернетҡа инер алдынан ысын ир-егет менән осрашыу тураһындағы хыялын иҫенә төшөрә. Ошо көндә үк ул интернет аша буласаҡ тормош иптәше менән таныша һәм эш түй менән тамамлана.

Алда һеҙҙе Юғары көстәрҙең ярҙамын алыу мөмкинлеге биргән ысулдар менән таныштырыуҙы дауам итәсәкбеҙ. Ә әлегә мөхәббәтле булығыҙ һәм етеш тормошта йәшәгеҙ килә икән, бары тик бармаҡтарығыҙ менән хәрәкәт яһарға ғына онотмағыҙ.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

# ИҢ МӨҺИМЕ... ХӘРӘКӘТ



**Һаулыҡты нисек ҡартайғансы һаҡлау, оҙағыраҡ йәшәү хаҡында уйланмаған кеше бик һирәктер был донъяла. Хатта ошо ҡартайыу механизмдарын өйрәнгән тотош фән дә бар. Оло йәштә лә хәрәкәтсәнлеген, зирәклеген юғалтмаған инәй-бабайҙар менән осрашһам, уларҙың оҙаҡ йәшәү сере менән ҡыҙыҡһынмай ҡалмайым. Туҡһандан үтеүенең сәбәбен берәүҙәр йәш саҡта тик үлән менән туҡланып, ауыр эштә сынығыуына бәйләнә, икенселәре сәләмәт тормош алып барыуынан, өсөнсөләре нәҫел-нәсәбенән күрә.**

Һарыш ауылында йәшәгән 93 йәшлек Тәнзилә инәй Кәримованың да оҙон ғүмерлелегенең үҙ сере бар.

- Күңелдә тик яҡшы уйҙар ғына йөрөтөргә кәрәк. Үпкәләүҙәрҙән, көнсөллөктән, асыуҙан һаҡланыу мөһим. Йәндә лә, тәндә лә ҡартайта торған нәмә улар. Яратҡан шөғөл булыу ҙа кешене ауыр тойғоларҙан, кисерештәрҙән һаҡлай. Йәш үтеү менән ҡыҙыҡһыныуҙар үҙгәреүе мөмкин, әммә нисә йәштә булһа ла, кешенең ҡулына ярарлыҡ эш табып алған эше булырға тейеш, - ти ул.

Бынан тыш, Тәнзилә Ғөбәйҙулла ҡыҙы йәнле аралашыуҙың кеше тормошонда ҙур роль уйнауын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Үҫтергән балаларының изгелекле мөнәсәбәте, татыулыҡ та ыңғай кисерештәр биреүен, күңел төшөнкөлөгөнә ҡаршы торорға ярҙам итеүен билдәләне.

- Шулай ҙа иң мөһиме - хәрәкәт, - ти ул эшен туҡтатмай ғына. Беҙ барғанда ишек алдында үҫкән әремдән һепертке бәйләп, тупһаһын һепереп йөрөй ине. - Күп йөрөргә тура килһә, бер ҙә зарланырға ярамай. Атлау, йәйәү йөрөү йөрәкте, ҡан тамырҙарын нығыта, шуға күрә һәр ваҡыт хәрәкәт итергә тырышығыҙ. Һаулыҡты йәштән һаҡларға кәрәк. Кешегә ғүмер Хаҡ Тәғәләнән бүләк итеп бирелә, шуға күрә уны һаҡлау һәр кемдең бурысы булырға тейеш. Күҙ ҙә, ҡолаҡ та, йөрәк тә, аяҡ-ҡулдар ҙа ҡартайғас бигерәк тә кәрәк. Кеше көнлә булып ултырмаç өсөн уларҙың сәләмәтлеген хәстәрләгеҙ. Дауа - аяҡ аҫтында.

Оло быуын вәкиленең һәр һүҙендә хаҡлыҡ бар ине. Ауырып дауаланғанға ҡарағанда, сирҙе иҫкәртеү һәм ҡылығыңды, уйҙарыңды, тормошҡа, кешеләргә мөнәсәбәтеңде үҙгәртеү күпкә отошлораҡ шул.

**Лена БАРЫЕВА.**



## 4 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Шуша". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Ради добра. [12+]**
**17.45 История одного села. [12+]**
**18.00 "Пофутболим?" [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**21.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Топ 5 клипов. [12+]**
**0.00 Х/ф "Если любишь - прости". [12+]**
**3.00 Спектакль "Таланты и поклонники". [12+]**

## 5 ОКТЯБРЯ ВТОРНИК

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-17". [16+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Шуша". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00, 16.00, 20.45, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15, 20.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Пушкинская кАРТа". [6+]**
**15.45 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Хазина". [12+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**21.20 Хоккей. ХК "Сочи" - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**0.30 Х/ф "Ничей". [12+]**
**3.00 "Райса+Файзи". [12+]**
**5.00 Топ 5 клипов. [12+]**

## 6 ОКТЯБРЯ СРЕДА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Шуша". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Тайм-аут. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда.**
**23.00 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Парень из Голливуда, или необыкновенные приключения Вени Везунчика". [12+]**
**3.00 Спектакль "Судьба выбранная мной". [12+]**
**4.30 Башҡорттар. [6+]**
**5.00 "Бай". [12+]**

## 7 ОКТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55, 2.20 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Шуша". [16+]
23.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.05 Т/с "Личное дело". [16+]
4.55 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ласточкино гнездо". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30, 17.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**18.00 "Криминальный спектр". [16+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Елкән". [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 История одного села. [12+]**
**0.00 Х/ф "Подлец". [16+]**
**3.00 Спектакль "Половецкая мистерия". [12+]**
**4.45 "Весело живем!" [12+]**
**5.00 Автограф. [12+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

## 8 ОКТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### РОССИЯ 1

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 18.40 "60 минут". [12+]
14.55 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
17.15 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20, 1.45 Юморина. Бархатный сезон. [16+]
23.35 Футбол. Россия-Словакия. Отборочный матч Чемпионата мира-2022. Прямая трансляция из Казани.
2.55 Х/ф "Под прицелом любви". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 Д/ф "Вирус правды". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30, 22.00 Автограф. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**14.15 "Ҡурай даны". [12+]**
**14.30 Башҡорттар. [6+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15, 5.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**17.15 История одного села. [12+]**
**17.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**18.00 Дорожный патруль. [16+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Йокерит" (Хельсинки). КХЛ.**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "ВасСәләм!" [12+]**
**0.00 Х/ф "Джокер". [12+]**
**1.45 "Спектакль "Галиябану". [12+]**
**3.45 Әлләсе... [12+]**
**4.30 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**6.00 "Млечный путь". [12+]**

## 9 ОКТЯБРЯ СУББОТА

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.30 Юмор! Юмор!! Юмор!!! [16+]
12.35 Доктор Мясников. [12+]
13.40 Т/с "Золотая клетка". [16+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Паром для двоих". [12+]
1.20 Х/ф "Долги совести". [12+]
4.30 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Ҡурай даны". [12+]**
**9.00 Күстәнәс. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 "Выше всех!" [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Книга сказок". [0+]**
**11.00 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**11.15 Бишек. Колыбельные моего народа. [0+]**
**11.30 Башҡорттар. [6+]**
**11.55 Конноспортивный турнир "Терра Башкирия".**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Концерт Рафиса Сирусина. [12+]**
**19.00 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**
**19.45 "Свадьба наизнанку". [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2021". [12+]**
**0.00 Х/ф "Дом Солнца". [16+]**
**2.30 Спектакль "Любовница. [12+]**

## 10 ОКТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### РОССИЯ 1

5.10, 3.10 Х/ф "Простая девчонка". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Большая переделка.
12.00 Парад юмора. [16+]
13.40 Т/с "Золотая клетка". [16+]
18.00 Дуэты. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Однажды и навсегда". [12+]
4.57 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Ҡурай даны". [6+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "Ай текә". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [0+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**
**12.30 "Ете егет".**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.15 "Дорога к храму". [0+]**
**15.45, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**16.15 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "СКА" (Санкт-Петербург). КХЛ.**
**19.00 "Радуга рулит".**
**20.15 Әлләсе... [12+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 5.00 "ВасСәләм!" [12+]**
**23.30, 3.15 Х/ф "Про любоff". [16+]**
**1.15 Спектакль "Мы с тобой одной крови". [12+]**
**3.00 История одного села. [12+]**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө районы** Шамонино ауылынан Гөлсирә Иҙрисова, Гәүһәр Тимерғазина, Зилиә Юлбирҙина, Вәлимә Шәһивәлиева, **Ҡариҙел районы** Яңы Аҡбүләк ауылынан Ғәҙилә Ғилманова, Тәнзилә Яҡупова, **Ишембай районы** Аҙнай ауылынан Фәнилә Хәсәнова, Нурия Насирова, **Көйөргәҙе районы** Кинйәбай ауылынан Тәнзилә Ҡотлобаева, **Баймаҡ районы** Ишмөхәмәт ауылынан Мәрзиә Латипова, **Сибай ҡалаһынан** Зәлиә Ғәлиәхмәтова, Фаил Ғәйнуллин, Сажиҙә Ғәниева, Әлфир Заманов, Гөлназ Исламғолова, Марс Ишморатов, Гөлнара Исәнаманова, Альбина Сирғәлина, Илнур Сәлимгәрәев, Элина Үҙәнова, **Салауат ҡалаһынан** Айбулат Ҡотошов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ныҡлы һаулыҡ, яҡындарығыҙҙың именлеген теләйбеҙ. Йөрөгәндә - юлығыҙ уңһын, һөйләгәндә - һүҙегеҙ үтһен!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**6 октябрь "Амеля"** (А. Балгазина, Н. Крашенинников). 12+
**7 октябрь "Ғәфү ит мине!"** (И. Герман), мелодрама. 16+
**8 октябрь "Мөхәббәт ҡоштары"** (И. Йомағолов), муз. комедия. 16+
**9 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), муз. мелодрама. 18.00 16+
**10 октябрь "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Я. Пулинович, Г. Яхина). 18.00 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**6 октябрь "Килә яуа, килә яуа"** (З. Хәким), комедия. 16+
**7 октябрь "Башҡорт туйы"** (М. Буранғолов), романтик драма. 12+
**8 октябрь Премьера! "Яҙмышымдың икенсе бүлеге"** (Н. Саймон), трагикомедия. 16+
**9 октябрь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 12.00, 14.00 0+
**"Уйҙарымдан ғына юғалма"** (Р. Гюнтекин), муз. драма. 18.00 12+
**10 октябрь "Аладдин"** (И. Казакова). 12.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**8 октябрь "Урал батыр"** (В. Аношкин). 19.00 12+
**9 октябрь "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова). 11.00, 13.00 0+
**"Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 16.00 0+
**10 октябрь "Три поросенка"** (С. Михалков). 11.00, 13.00 0+
**"Лиса-сирота"** (О. Штырляева). 16.00 0+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**8 октябрь Премьера! "Киҫәкбикә. Риүәйәт"** (М. Башкиров). 12+
**10 октябрь "Три богатыря и Соловей-разбойник"** (А. Зарипов), әкиәт. 12.00 0+
**"Рух асылы" "Ашҡаҙар"** башҡорт эстрада-фольклор төркөмө концерты. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**6 октябрь** Өфөлә М. Ғафури исемендәге БАДТ сәхнәһендә **"Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+
**9 октябрь "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 13.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

**1443 һижри йыл.**

| Октябрь (Сәфәр - Рәбиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (27) дүшәмбе | 5:56 | 7:26 | 13:30 | 17:12 | 18:42 | 20:12 |
| 5 (28) шишәмбе | 5:57 | 7:27 | 13:30 | 17:10 | 18:40 | 20:10 |
| 6 (29) шаршамбы | 5:59 | 7:29 | 13:30 | 17:07 | 18:37 | 20:07 |
| 7 (1) кесе йома | 6:01 | 7:31 | 13:30 | 17:05 | 18:35 | 20:05 |
| 8 (2) йома | 6:03 | 7:33 | 13:30 | 17:02 | 18:32 | 20:02 |
| 9 (3) шәмбе | 6:05 | 7:35 | 13:30 | 17:00 | 18:30 | 20:00 |
| 10 (4) йәкшәмбе | 6:07 | 7:37 | 13:30 | 16:58 | 18:28 | 19:58 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

Өфө ҡалаһының Ә. Исҡужин исемендәге 9-сы балалар музыка мәктәбе өҫтәмә белем биреү муниципаль бюджет учреждениеһы коллективы директорыбыҙ Ғәйетбаев Әхиәт Ғиниәт улының ҡәҙерле әсәһе

**Сәғирә Зәкәриә ҡыҙының**

вафат булыуы сәбәпле, уның һәм туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 5 ОКТЯБРЬ - УҠЫТЫУСЫЛАР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**39-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Әтлек. Ғиләжев. Ихтиандр. Тәҡдир. Мүк. Абыз. Аманат. Аҡыл. Тәсбих. Иҫ. Тибр. Атлы. Әҙәм. Рәхмәт. Ойоҡ. Әсә. Ауыҙ. Твен. Кәрим. Арат. Әтәс.

**Вертикаль буйынса:** Мифтахов. Ишкәксе. Ҡәбилә. Ғәли. Уҙаман. Атай. Тулҡын. Мәҙәк. Аҫа. Әҫтә. Ризыҡ. Әмер. Креол. Иртә. Табалдырыҡ. Тәхет. Даян. Ректор. Тун.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ЫРЫМБУРҒА...

## поезд менән



**Өфө - Ырымбур маршруты буйынса йөрөйәсәк "Орлан" пассажир поезын юл башлатыу телемост режимында уҙҙы. Ул "Урал транспорты" IV махсус форум-күргәҙмә ваҡытында башҡарылды.**

Ырымбурға тәүге тиҙ йөрөүсе пассажир поезын ебәреү тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров, Куйбышев тимер юлдары етәксеһе Вячеслав Дмитриев һәм Ырымбур өлкәһе губернаторы Денис Паслер ҡатнашты.

Хәҙер күрше өлкәгә Өфөнән барып етеү өсөн ни бары 6 сәғәт кәрәк буласаҡ. Әлегә тиклем Ырымбурға Өфөнән тимер юлы менән тура барыу мөмкинлеге юҡ ине. Ике төбәк араһында заманса "Орлан" йөрөйәсәк. Ул 3 вагондан тора, вагондарҙа климат-контроль эшләй, кәрәҙле телефондар өсөн розеткалар ҡуйылған, ҙур габаритлы әйберҙәр өсөн махсус майҙансыҡтар бар. Шулай уҡ "Орлан"дар физик мөмкинлеге сикле булғандар өсөн бар яҡлап ҡулайлаштырылған - улар инвалид коляскала күтәреүсе махсус ҡоролма эшләй һәм вагон эсендә махсус урындар бар.

Өфө тимер юлы вокзалынан поезд 7.48 минутта ҡуҙғалып, Ырымбурға 13.54 сәғәттә барып етәсәк. Маршурт юлында Дим, Ҡарлыман, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез һәм Күмертау станцияларында туҡтау ҡаралған. Ырымбурҙан кире Өфөгә "Орлан" 15.15 сәғәттә сығасаҡ һәм баш ҡалаға 21.23 сәғәттә килеп етәсәк. Билет хаҡы бер яҡҡа 866,80 һум. Бөтә төр төбәк һәм федераль ташламалар менән ҡулланыу ҡаралған.

**Гөлназ САФУАНОВА.**

АФАРИН!

# ЗАМАНҒА ЭЙӘРЕП...



**Бөгөнгө заман уҡытыусыһы - ул уҡытыусы ғына түгел. Ә йәш быуында ватансылыҡ, кешелеклелек, маҡсатҡа ынтылыусанлыҡ, зауыҡ, хатта эшҡыуарлыҡ сифаттары ла тәрбиәләгән һөнәр эйәһе.**

Мәғариф системаһындағы үҙгәрештәр, реформалар, яңылыҡтар туған тел уҡытыусылары алдына ла яңынан-яңы талаптар ҡуя. Әммә төплө белемле, әүҙем һәм инициативалы, йүнсел һәм эшлекле, үҙенә лә, йәмғиәткә лә файҙа килтерә алған, ижади фекерләү һәләтенә, юғары мәҙәнилеккә, илһөйәрлек сифаттарына эйә булған, милли рухлы Башҡортостан гражданын тәрбиәләү һәр саҡта ла актуаль булды һәм булып ҡала. Тик ныҡышмалы, тырыш, белемен, тәжрибәһен даими үҫтереү өҫтөндә эшләгән уҡытыусы ғына бөгөнгө етеҙ үҙгәреп торған заманда ошо маҡсаттарға өлгәшә ала.

1-се Мәләүез ҡала мәктәбенең башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Фәнилә Ғәниева - шундайҙарҙың береһе. Сығышы менән ул Иштуған ауылынан. 1991 йылда Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын тамамлап, Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институтына уҡырға инә. Мәктәптә нисек тырышып уҡыһа, юғары уҡыу йортонда ла алдынғылыҡты бирмәй. 1996 йылда юғары уҡыу йорто дипломы менән тыуған районына ҡайта һәм бына егерме биш йыл һайлаған һөнәре буйынса эшләй. Коллективта, район уҡытыусылары араһында оло хөрмәткә эйә булып, бар белемен, тырышлығын йәш быуынды тәрбиәләүгә бағышлаған. Үҙенә йөкмәтелгән бурысты сәбәләнмәй, артыҡ ығы-зығыһыҙ, тыныс ҡына башҡарырға ғәҙәтләнгән ул.

Фәнилә Салауат ҡыҙы - юғары квалификациялы белгес, эшенең бар нескәлектәрен белгән, һөнәрен яратҡан уҡытыусы. Уҡытыу һәм тәрбиә эшен бер-береһенә бәйләп, йәш быуында туған телгә, тыуған ергә һөйөү тәрбиәләй. Башҡорт йәштәрен инициативалы булырға, үҙ фекерен дөрөҫ итеп әйтә белергә, аудитория алдында сығыш яһарға өйрәтә һәм лидерлыҡ сифаттарын үҫтерә. Уҡыусыларының төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа, конкурстарҙа, ғилми конференцияларҙа әүҙем ҡатнашыуы, маҡтаулы урындар яулауы ла уның эшенең һөҙөмтәле икәнен дәлилләй.

2020-2021 уҡыу йылында Башҡортостан Республикаһында Башҡорт теле йылына арналған "Башҡорт теле - ғорурлығым минең" Бөтә Рәсәй иншалар конкурсында уҡыусыһы Азат Йәнбирҙин икенсе урын яулаты. Йыл һайын башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән төбәк-ара олимпиадаларҙа уның уҡыусылары призлы урындар ала.

Фәнилә Ғәниева үҙе лә һөнәри конкурстарҙан ситтә ҡалмай. Белемен үҫтереү, педагогик оҫталығын камиллаштырыу өҫтөндә даими эшләй. Тырыш уҡытыусы үткән уҡыу йылында "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" район конкурсында ҡатнашып, маҡтаулы урынға лайыҡ булды. Оҙаҡ йылдар мәктәптә методик берекмәне етәкләй. Белем биреү өлкәһендә намыҫлы һәм ижади эшмәкәрлеге өсөн Фәнилә Салауат ҡыҙы район хакимиәте һәм мәғариф идаралығының Маҡтау грамоталары менән бүләкләнгән.

**Вилиә ФӘХРЕТДИНОВА.**

*✓ Юғарыға менеп барғанда осраған кешеләргә иғтибарлыраҡ бул, һин улар менән түбәнгә төшөп барғанда осрашасаҡһың әле.*

*(Уилсон Мизнер).*



ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# ӨФӨГӘ КИЛӘБЕҘ



**Ошо көндәрҙә 89-сы ижад миҙгеленә ишектәрен асҡан Салауат дәүләт башҡорт драма театрының директоры Айбулат ҠОТОШОВ коллективтың киләсәккә пландары, алға ҡуйылған бурыстар һәм уй-фекерҙәре менән бүлеште.**

**Салауат ҡалаһының театр һөйөүселәрен ниндәй матур яңылыҡтар көтә?**

- Быйыл беҙ тәүҙә ижадыбыҙ менән баш ҡала халҡын һөйөндөрөргә ниәтләйбеҙ: 6 октябрҙә М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры сәхнәһендә драматург Сәрүәр Суринаның "Абау, димсе килә!" музыкаль комедияһын уйнаясаҡбыҙ. Спектаклдең ҡуйыусы режиссеры Зиннур Сөләймәнов. Өфөләр менән осрашыуҙы етди әҙерләнеп, бик тулҡынланып көтәбеҙ. Ә инде 14-15 октябрҙә үҙебеҙҙең Салауат ҡалаһы тамашасыларын премьера менән сәләмләргә торабыҙ. Роберт Батулланың "Кисер мине, әсәй!" әҫәрен үҙебеҙҙең артист Радик Ғәлиуллин сәхнәләштереүендә ҡарарға тәҡдим итәбеҙ. Әйтергә кәрәк, беҙҙең коллектив өсөн был яңы әҫәр булһа ла, ул күптән яҙылған пьеса, төрлө коллективтар, шул иҫәптән Татарстан театрҙары тарафынан да сәхнәләштерелгән. Шуға күрә театр һөйөүселәргә ул яңылыҡ түгел, әммә һәр режиссер үҙ спектаклен үҙенсә төҫмөрләүен иҫәпкә алып, тамашасылар күңеленә хуш килер, тип уйлайбыҙ. Хатта "Ромео һәм Джульетта" кеүек ҡат-ҡат ҡуйылған әҫәрҙәр ҙә һәр ижади төркөм ҡулында яңыса яңғырауы сер түгел бит. Спектаклдең йөкмәткеһенә килгәндә, ул беҙҙең заманда йәмғиәт өсөн бик актуаль мәсьәләне күтәрә: атай-әсәйҙәр һәм балалар араһындағы мөнәсәбәт, ҡалдырып кителгән сабыйҙар тураһында булыр. Был спектакль Радик Ғәлиуллиндың режиссер булараҡ беренсе ижад емеше.

Яңы сәхнәләштереүҙәр тураһында һөйләгәндә, әлеге көндә режиссер Илсур Ҡаҙаҡбаев Алексей Житковскийҙың "Горка" тип аталған пьесаһы өҫтөндә эшләй. Был спектакль "Кесе Ватан мәҙәниәте" проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыласаҡ. Әйткәндәй, "Берҙәм Рәсәй" партияһының ошо проекты быйыл театрыбыҙға 2 млн 300 мең һум ярҙам күрһәтеп, матди-техник базаны нығытыу, бинаны бер аҙ яңыртыу эштәрен үтәү мөмкинлеге булды. Шулай уҡ тағы бер яҡшы яңылығыбыҙ бар: ижади коллективыбыҙ яңы актерҙар менән тулыланды, улар араһында күптән үҙен сәхнәлә күрһәтеп өлгөргән тәжрибәлеләре лә, яңы ғына белем алып бөткән йәштәр ҙә бар. Мәҫәлән, быйыл Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһын тамамлап ҡайтҡан Эльвира Йәрмөхәмәтова һәм З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында уҡыған Йәнгүзәл Халиҡова хеҙмәт юлын беҙҙә башланы.

Ҡыҫҡаһы, шау-гөр килеп яңы миҙгелгә әҙерләнеп йөрөйбөҙ. Тик бынау ҡәһәр һуҡҡыр ауырыу ғына бер аҙ пландарыбыҙҙы боҙҙо, күрше өлкәләр һәм республиканың район-ҡалалары буйлап гастролдәребеҙ кисектерелеп тора. Шуға күрә Ырымбурҙа 5 көн урынына 2 көн генә сығыш яһап ҡайттыҡ, Бүздәк, Тәтешле, Саҡмағош, Әбйәлил, Белорет райондарына, Нефтекама, Сибай, Туймазы яҡтарына юлдар ябылып тора. Салауат ҡалаһы халҡын ғына түгел, республикабыҙҙың башҡа ҡала-ауылдарында йәшәгәндәрҙе лә ижадыбыҙ менән таныштырыу, мәҙәни саралар-ға һыуһындарын ҡандырыу маҡсатын үҙ эсенә алған был эшмәкәрлегебеҙҙе шулай ҙа дауам итер көн булыр, тигән өмөттәбеҙ. Сөнки һуңғы йылдарҙа былай ҙа ауыл халҡы менән театрҙар араһында бәйләнештәр элекке кеүек тығыҙ булмауын аңлап торабыҙ. Бында йәшерен-батырыны юҡ, ауыл халҡының социаль хәленән, коллективтарҙың финанс мәсьәләһенән дә килеп тыуған күренеш ул. Һәр хәлдә, элекке кеүек берәр айлап гастролдәргә сығып, райондарҙың һәр ауылында булып, шығырым тулы тамашасы йыйып йөрөлмәй хәҙер. Район үҙәктәре һәм ҙурыраҡ ауылдарға ғына барабыҙ, унда күрше-тирәләге тораҡ пункттарҙан халыҡ автобус яллап булһа ла килеп ҡарай.

**Ә кескәй тамашасыларығыҙ өсөн ниндәй күстәнәстәр әҙерләнегеҙ?**

- Әле театрҙың баш режиссеры Лиана Ниғмәтуллина "Волшебная лампа Аладдина" тигән спектакль өҫтөндә эш башланы. Ҡала балалары өсөн булғас, был әкиәт рус телендә ҡуйыла һәм Яңы йылға әҙер булыр, тип иҫәп тотабыҙ. Билдәле булыуынса, беҙҙең театрҙа "Арлекин" өлгөлө балалар театр студияһы эшләй һәм улар ҙа кескәй тамашасыларҙы сағыу, мауыҡтырғыс, мажаралы спектаклдәре менән ҡыуандырыр. Әйткәндәй, быйыл театр студияһы коллективы "Алтын асҡыс" Балалар һәм үҫмерҙәр театраль коллективтарының Берлин асыҡ халыҡ-ара конкурсында Гран-при яуланы. Уларҙың Мостай Кәрим повесы буйынса сәхнәләштерелгән "Өс таған" спектакле шундай юғары баһаға лайыҡ булды.

Ғөмүмән, Салауат башҡорт драма театрында балалар һәм йәштәр өсөн спектаклдәр сәхнәләштереүгә, уларҙы сәнғәт донъяһына йәлеп итеүгә, ижадыбыҙ арҡылы тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бүленә. Заман башҡа - заң башҡа, тиһәк тә, беҙ уларға кеше һәр ваҡыт кеше булып ҡалырға тейешлекте, яҡшы менән яманды айыра белергә өйрәтергә, тәрбиәләмәһәк тә, дөрөҫ юл күрһәтергә бурыслыбыҙ. Шуға киләсәктә эскелек, интернет донъяһы, наркомания, терроризм һ.б. заман афәтенә әүерелгән темаларҙы күтәргән сәхнә әҫәрҙәренә лә мөрәжәғәт итербеҙ, тип ниәтләйбеҙ.

**Салауаттар театрҙы ярата мы?**

- Белеүегеҙсә, Салауат ҡалаһында төрлө милләт вәкилдәре йәшәй һәм уларҙың барыһы ла башҡорт телен, мәҙәниәтен яҡшы белмәй, әммә бик ҡыҙыҡһыналар. Ҡайһы саҡта спектаклдәрҙе тәржемә менән ҡарарға килеүселәр күберәк булыуын күҙәтәбеҙ. Бының менән ғорурланырға ла була, ләкин әҙерәк үкенесле лә күренеш бит. Салауат ҡалаһында башҡорттар аҙ йәшәй, тип әйткем килмәй, ҡыҙғаныс ҡа күрә, театрға йөрөүселәр һаны самалыраҡ. Милләттәштәр үҙебеҙҙең сәнғәтте ярат һындар, балаларын башҡорт телендә һөйләштереп, башҡорт спектаклдәренә йөрөтөп, башҡорт гәзит-журналдарын уҡытып, башҡорт мәктәбендә белем алыу мөмкинлеген биреп үҫтерһендәр ине. Былар беҙҙең милләтте һаҡлау юлдары бит.

**Камила ҒӘЛИЕВА әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ЯМҒЫРҘА АТ ҺАЙЛАМА,

## байрамда ҡыҙ һайлама

Буш башҡа барыһы ла инә, буш баштан тағы ла күберәк сыға.

**(Владислав Гжегорчик).**

Юғарыға менеп барғанда осраған кешеләргә иғтибарлыраҡ бул, һин улар менән түбәнгә төшөп барғанда осрашасаҡһың әле.

**(Уилсон Мизнер).**

Айырым кешеләрҙең яманлығын, гонаһ, тип атайҙар. Тотош халыҡтың яманлығын, милли характер, тиҙәр.

**(Вернер Мич).**

Күңелең буш булғанда унда Алла инмәйәсәк.

**(Анри де Монтерлан).**

Бәхет, яҙ һымаҡ, һәр осраҡта үҙ йөҙөн үҙгәртә...

**(Андре Моруа).**

Йоҙроҡтар төйнәлгәндә асыҡ фекерләү мөмкин түгел.

**(Джордж Нейтан).**

Насар яҡшы шағир булғансы, бөйөк насар шағир булыу һәйбәтерәк.

**(Огден Нэш).**

Эскеселәр артынан да, сәйәсмәндәр артынан да беҙгә йыйыштырырға тура килә...

**(Остин О'Малли).**

Кешегә әйбергә ҡараған кеүек ҡарарға ярамай, уның хаҡы барыбер әйберҙеке кеүек үк түгел.

**(Патрик О'Рурк).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Хоҙай ике осраҡта йылмая икән. Бына врач ауырыу баланың әсәһенә: "Ҡайғырмағыҙ, мин һеҙҙең улығыҙҙы мотлаҡ дауалаясаҡмын", - ти. Ошоно ишетеп, Алла: "Мин был әсәнең улын үҙемә алырға йыйынам, ә врач уның тәнен дауаламаҡсы", - тип уйлай һәм йылмайып ҡуя. Врач сирле менән булған хәлдең хужаһы итеп тоя үҙен, ә ысын хужа - ул Хоҙай икәнен иҫенә лә алмай.**

**Икенсе тапҡыр Алла ике егеттең үҙ-ара ер бүлешкәнен ҡарап тора. "Был ер - минеке, ә теге өлөшө - һинеке", - ти егеттәрҙең береһе. Алла йылмая һәм былай тип уйлай: "Бар Ер йөҙө минеке генә булғанда, был әҙәм балалары үҙҙәрен ошо ергә хужа тип уйлай".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 21040

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
1 октябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3250
Заказ - 1169